ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29-4 август - сентябрь (урағай - һарысай)

2015

№35 (661)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Балалар ниндәй уйын уйнай?**



6

**Ҡымыҙ, ҡорот, ҡаҙылыҡ...**

Аҙыҡ ҡына түгел, дауа ла



8

**Ҡурай - арбуйлы уйын ҡоралы,**

ҡурайсы ла иң абруйлы музыкант



9

**Милли көй-моңдарыбыҙ...**

үҙебеҙҙе танытыуҙың иң шәп юлы



11

Һайлауҙар 12-15

***Мөхтәрәм йәмәғәт! Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә яҙылырға онотмаһығыҙмы, тип өндәшәбеҙ тағы бер тапҡыр. Баҫмабыҙға республика ҡалалары һәм районДарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Һуңламағыҙ: 31 августҡа тиклем 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына быға тиклемгә хаҡ менән, йәғни 539 һум 76 тингә (индексы 50665) яҙыла алаһығыҙ.***

✓

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Уңыш йыйыр, себеш һанар мәл етте. Баҡса емеш-еләген, йәшелсәне, ит-майҙы үҙегеҙ өсөн генә тотонаһығыҙмы, әллә бер аҙ аҡса эшләп ҡалыу ысулы буларак та файҙаланаһығыҙмы?

*Шәүрә МУЛЛАЯНОВА, Бөрйән районы:* Ышанып ҡарап торғаныбыҙ шул баҡса ла, мал инде. Магазиндан он, шәкәр, көнбағыш майы, сәй кеүек иң мөһим аҙыҡ-түлекте генә алырға тырышабыҙ, ә ҡалған барыһын да тиерлек үҙебеҙ етештерәбеҙ. Ауыл кешеһенә йәй ял ваҡыты түгел, ә йүгереп йөрөп эшләй торған миҙгел. Бер-нисә йыл элек ҡайһы берәүҙәр магазинда бөтә нәмә һатылғанлыҡҡа һылтанып, баҡса ултыртмай, мал көтмәй башлағайны ла, хаҡтарҙың артынан ҡыуып етә алмағас, яңынан ауыл тормошона ҡайтты.

Беҙҙең баҡса әллә ни ҙур булмаһа ла, йыл һайын ҡышҡылыҡҡа етерлек уңыш йыйып алабыҙ. Ҡалала үҙ ғаиләләре менән йәшәгән өс улыбыҙҙы ла баҡса уңышы, майҡорот, ит менән тәьмин итәбеҙ. Улар, үҙ сиратында, йәйге ялдарында беҙгә ярҙам итә: килендәр баҡса, ҡош-ҡорт ҡараһа, уландар бесән әҙерләй. Баҡсала сөгөлдөр, һуған, һарымһаҡ, кәбеҫтә, ҡыяр, помидор, бәрәңге, кишер кеүек йәшелсәләр сәсеп, баҙға һаҡлауға һалабыҙ һәм ҡышҡылыҡҡа төрлө салаттар әҙерләйбеҙ. Һуғымға тип йыл да бер башмаҡ һимертәбеҙ. Ҡышын уға өҫтәмә итеп бернисә һарыҡ һуябыҙ. Йыл һайын мотлаҡ 30-лап ҡаҙ бәпкәһе алып үҫтерәбеҙ. Күп булһаҡ та, ошо күләмдәге ит йәйгә аяҡ баҫҡансы етә. Йәйгеһен ит йәһәтенән һарыҡҡа ҡөс төшә - бесәндә итһеҙ булмай. Үҫкән организмға, еӊәнсәрҙәргә лә итле аш-һыу кәрәк.

Бөрйәндә умарта тотмаған кеше һирәк. Беҙҙең дә 10-лап умартабыҙ бар. Быйыл ни өсөндөр бал ҡорто күпләп бал йыйманы, шуға күрә элекке кеүек күстәнәс-бүләккә таратыу юҡ, тик үҙебеҙҙең өҫтәлгә генә етә.

Быйыл баҡсалағы барлыҡ еләк-емеш ағастары ла мул уңыш бирҙе. Килендәр бер бөртөгөн дә ергә төшөрмәй йыйып, ҡайнатма, компот эшләп ҡуйҙы. Уларға урман байлығынан әҙерләнгәндәрен дә ҡушһаҡ, байтаҡ ҡына ҡышҡылыҡ запас тупланды.

Һыйыр ағын йәйгеһен, һөттөң мул сағында, йыйнаштырып ҡуям, ләкин бик күп тупламайым. Ауыл майын ҡала кешеләре әллә ни ашап бармай, магазиндан алынғанын хуп күрә. Шуға күрә йәйгеһен балаларға күберәк яңы айыртылған ҡаймаҡ ашатырға тырышам. Ә бына әсе ҡоротто 1,5 литрлыҡ һауыттарҙа күпләп әҙерләйем һәм ҡышҡыһын барыһына ла таратам.

Ғаиләбеҙ ҙур булғас, йыйып алған уңышты арттырып һатыуға сығарыу мөмкинлеге юҡ. Ит һатыр өсөн кәмендә ике-өс һыйыр малы тотоу кәрәктер ул, бер һыйырҙың итен тартып-һуҙып булмай. Йәшелсәнән, еләк-емештән аҡса эшләп ҡалыу ниәте булһа, мотлаҡ ошо йүнәлештә эшләү генә үҙ һөҙөмтәһен бирәләр, тип уйлайым. Нимәләр һатам тиһәң, беҙгә район үҙәгенә йәки Белорецкка барырға кәрәк. Әгәр ҙә күп әйбер алып бармаһаң, килем юл сығымын да ҡапламай. Шуға күрә үҙебеҙҙеке - үҙебеҙгә, тип донъя көтөп ятҡан көн. Һаулыҡ биргһен Хоҙай, йыл да мул уңыш ебәрһен. Үҙ еребеҙҙә ныҡ баҫып, тәбиғәткә һыйынып, баҡса ултыртып йәшәһәк, бирешмәҫбеҙ. Туктауһыҙ һөйләгән санкциялары ла ҡурҡытмай, сөнки беҙҙең халыҡты тыуған ере туйҙыра. Быға тиклем ҡолаҡ та ишетмәгән ниндәйҙер экзотик аҙыҡ-түлектең Рәсәйгә индерелмәүенән беҙ бер нәмә лә юғалтманыҡ, сөнки уларҙы әлегә тиклем дә күргән дә, тәмләп ҡараған да булмаһы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# УҢАЙЛЫ ТРАНСПОРТ

**Өфөлә "Кала электричкаһы" проекты тормошҡа ашырыла икәнен беләһегеҙҙер. Шуға ярашлы, 15 сентябрҙән "Дим - Шаҡша - Дим" ҡала электричкаһы йөрөй башлаясаҡ.**



Электр поезының расписаниеһы Башҡортостан ҡала яңы пассажирҙар компанияһы сайтында баҫылған. Димдән электричка иртәнге сәғәт 5 тула 6 минуттан ҡуҙғала, һуңғы станцияға иртәнге сәғәт 6 тула 25 минуттан килеп етә. Кире йүнәлештә Шаҡшанан электр поезы иртәнге 6-сы 2 минутта һәм 7-се 26 минутта юлға сыға. Әлеге ваҡытта "Уң яҡ Ағиҙел", "Өфө", "1629 саҡрым", "Парк", "Черниковка", "Спорт" туҡталыштары планлаштырылған. Электричкалар көн һайын эшләйәсәк, тип күҙаллана.

Ҡала эсендә халыҡты транспорт менән тәьмин итеү һәм пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙең сифатын яҡшыртыу маҡсатында 2013 йылда Дим - Өфө - Шаҡша участкаһында "Кала электричкаһы" проекты ғәмәлгә ашырыла башлағайны. Проектҡа инвесторҙар йәлеп ителә. "Дим" һәм "Шаҡша" станцияларын файҙаланыуға тапшырыу буйынса юл карталары әҙерләнгән. "Гастелло", "Кала мәҙәниәт һарайы", "Воронки - Көньяҡ автовокзал", "Уң яҡ Ағиҙел - Телеүҙәк" транспорт-күсеп ултырыу урындарын ойоштороу ҡарала. Транспорт-күсеп ултырыу урындары эскалаторҙар, траволаторҙар һәм лифттар ҡуйыуҙы күҙ уңында тота.

2014 йыл аҙағындағы мәғлүмәттәр буйынса, "Кала электричкаһы" проектына 316 миллион һум һалынған: Өфө хакимиәте - 240 миллион, Куйбышев тимер юл идаралығы 76 миллион һум аҡса бүлгән.

12+

✓ *Көҙөн күп булып күренгән картуфты тегеләй-былай таратып бөтәләр ҙә, яҙ етһә, сәсерлек картуф һорап йөрөйҙәр. Ләкин, ундай моңһоҙҙар әҙ арабыҙҙа, күптәр ер ҡәҙерен, унда үҫкән байлыҡ мәртәбәһен, хеҙмәт баһаһын белә.*



*БЫЛ АЙҘА...*

# АЛТЫН КӨҘҘӘГЕ БАЙРАМДАР



**Белем көнөн байрам итеүҙән башлана 1 сентябрь. Был көн Бөтөн донъя тыныслыҡ көнө булараҡ та билдәләнә хәҙер. Терроризм менән көрәштә теләктәшлек көнө (3 сентябрь) шулай уҡ донъяла, илебеҙҙә тыныслыҡ өсөн халыҡ-ара хәрәкәтте әүҙемләштереү, уға берҙәм ҡушылыу, һәр беребеҙҙең күңелендә хәүефһеҙлек тойғоһон нығытыу хаҡына булдырылғандыр.**

Тыныслыҡтың ысын баһаһын Рәсәйҙә билдәләнә килгән бик күп хәрби дан көндәре иҫкә төшөрөп тора. Шундай көндәрҙең береһе - 1812 йылғы Ватан һуғышының Бородино яуы - 8 сентябргә тап килә һәм ул Башҡортостан тарихына ла алтын хәрефтәр менән уйылған. Французлар аяуһыҙ алыштарҙан һуң Н. Раевскийҙың батареяһын ҡулға төшөргәс, Өфө пехота полкының бер батальоны ғына ла тар-мар ителеп ҡаса башлаған рус һуғышсыларын атакаға әйҙәп, үҙ өлгөһөндә уларҙы рухландырып, контрһөжүмгә ташлана һәм шул арҡала батарея дошмандан азат ителә. Һәм, ғөмүмән, француз яуында Рәсәй ғәскәрҙәре менән бер ҡатарҙан алышҡан башҡорт полктары хаҡында тарихи материалдар бик күп хәҙер интернетта ла, китапханаларҙа ла. Ә халҡыбыҙ күңелендә күпме үлемһеҙ йыр-көйҙәребеҙ һәм риүәйәт-хикәйәттәребеҙ йәшәй! Был хаҡта айырыуса балаларыбыҙ белеп үҫһен ине, сөнки тарихыбыҙҙы белеү - ул илһөйәрлек, мәҙәнилек билдәһе генә түгел, кешенең ябай грамоталылығы күрһәткесе лә.

Шул уҡ 8 сентябрь Халыҡ-ара грамоталылыҡты таратыу, уҡыу көнө тип билдәләнһә лә, беҙҙең көндәрҙә һәм даирәбеҙҙә уҡый белмәгән, хәреф танымаған кеше юҡ. Ул ғына ла түгел, хәҙер хатта сабыйҙарыбыҙ ҙа ҡатмарлы электрон техниканы, компьютер менән идара итеүҙе белеп тыуа, тиҙәр. Тимәк, улар өсөн грамоталы булыу - ул илеңде, телеңде, тарихыңды, шәжәрәңде лә яҡшы белеү тигән һүҙ түгелме ни? Бына шуларҙы белмәгән кеше, ысынлап та, грамотаһыҙ, йәғни наҙан була ла инде! Ә бына уҡыу тигәне... Бөттө ул, уҡыу тигән нәмәне лә онотто халыҡ - ҡайҙа барабыҙҙыр... Хатта туған телебеҙҙә аҙнаһына бер сыҡҡан гәзиттәрҙе, айына бер донъя күргән журналдарыбыҙҙы ла алдырып уҡырға теләмәйҙәр. Ҡайһы саҡ йөрәк ҡыҫып ҡуя: тора-бара журналист тигән һөнәр ҙә юҡҡа сығып ҡуймаҫ, тимә! Уның яҙғандарын - уҡыусы, һөйләгәндәрен тыңлаусы ҡалмаһа... Юҡ инде, сәпәкәйләмәй тороғоҙ - Журналистарҙың халыҡ-ара теләктәшлеге ихлас һәм ныҡлы булһа (ә ул йыл һайын 8 сентябрҙә билдәләнеп килә) киң мәғлүмәт саралары тиҙ арала ғына тормошобоҙҙан юғалмаҫ, тигән ышаныс йәшәтә беҙҙе, журналистарҙы. Тимәк, гәзит уҡыусыларыбыҙ ҙа беҙҙең менән бергә йәшәйәсәк, бергә һөйөнәсәк, бергә көйөнәсәк, бергә яңынан-яңы уҡыусылар йәлеп итергә булышлыҡ күрһәтәсәк.

Тағы бик күп көндәр билдәләнә сентябрҙә. Беҙгә бигерәк тә айҙың һуңғы йәкшәмбеһендә билдәләнәсәк Бөтөн донъя йөрәк көнө ҡыҙыҡ тойолдо. Кемдең башына килде икән был шәп идея? Уны күптән һәм киң билдәләргә тейеш булғанбыҙҙыр ҙа бит. Ул көн төрлө ҡыҙыҡлы сараларға бай булыр, тип ышанғы килә. Ә иң мөһиме - ошо көн медицина учреждениеларында бушлай йөрәк эшмәкәрлеген тикшертеү, ЭКГ үтеү мөмкинлеге лә бирелһен ине.

Тормошобоҙҙа мөһим урын алып торған тағы бер изге байрамыбыҙ - Ҡорбан ғәйете - быйыл 24 сентябргә тап килеүен дә хәтерегеҙгә төшөрөп үтәйек, йәмәғәт. Хәйер, был көндө иҫенән сығарған әҙәм һирәктер, сөнки мосолман донъяһында иң ҙур байрамдарҙың береһе ул. Изге ғәмәл - ҡорбан салыу нигеҙендә Аллаһы Тәғәләгә яҡынлашыу, уның рәхмәттәренә өлгәшеү теләге ята. Мөмкинлеге булған һәр мосолман был изге көндәрҙә ҡорбан бағышлап, мохтаждарҙы, яҡындары-туғандарын, ғаиләһен һөйөндөрөп, Аллаһы Тәғәләгә бирелгәнлеген, тәҡүәлеген иҫбатлар, тиелә Китапта.

Артабан сентябрҙә донъяға килгән билдәле шәхестәребеҙҙе иҫкә алып үтәйек. Улар исемлегендә Рәсәй һәм Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Шамил Рәхмәтуллин, БАССР-ҙың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, "Йәдкәр" фольклор ансамблен ойоштороусы Фәтих Иҡсанов, яҙыусы Кәтибә Кинйәбулатова, Советтар Союзы Геройы Ғәфиәтулла Арыҫланов, БАССР-ҙың атҡаҙанған юрисы Ванцет Буранғолов бар.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## *Уңыш йыйыр, себеш һанар мәл етте. Баҡса емеш-еләген, йәшелсәне, ит-майҙы үҙегеҙ өсөн генә тотонаһығыҙмы, әллә бер аҙ аҡса эшләп ҡалыу ысулы булараҡ та файҙаланаһығыҙмы?*



(Башы 1-се биттә).

***Ишморат СӘЛИХОВ, Әбйәлил районы:*** Быйыл еләк-емеше лә, йәшелсәһе лә ишеп һалмалы булды, ауыл кешеһенең ҡура-аҙбарына етерлек уңыш инеп ятырға тейеш. Бесән дә күпереп үҫте, һауа торошо ла былтырғы кеүек әллә ни бимазаламаны, шуға күрә мал-тыуар өсөн дә күңел тыныс.

Ошондай мул йылдарҙы беҙ уңышты ике өлөшкә бүләбеҙ: береһе - үҙебеҙгә, икенсеһе - һатыуға. Йәй буйы бил бөгөп, баш күтәрмәй эшләүҙең ниндәйҙер финанс килеме лә булырға тейеш, тип уйлайым. Ҡалаға яҡын йәшәүебеҙҙең ыңғай яғы - баҡсала өлгөргән йәшелсәне, урмандан йыйып алған еләк-емеште баҙарға алып барып һатыу мөмкинлеге. Ҡала халҡына тәүҙә теплицала өлгөргән ҡыяр, унан редис тәҡдим итәбеҙ. Ул арала урманда ла, баҡсала ла еләк-емеш, башҡа йәшелсәләр өлгөрә башлай. Тәүге бер-ике партияны һәр ваҡыт һатыуға сығарабыҙ, аҙаҡ үҙебеҙгә запас эшләйбеҙ. Өс ҙур баҡсаға сәскән картуфтың күпселек өлөшө шулай уҡ һатыуға сығарыла.

Шәхсән үҙем бер ҡасан да йәй уртаһы етеү менән ауылға йышайған алыпһатарҙар менән эш итмәйем, сөнки уларҙың тәҡдим иткән хаҡына риза түгелмен. Улар ауыл халҡын алдап-юхалап осһоҙға ғына алып киткән тауарҙы ҡалаға алып барып, икеләтә, хатта өсләтә арттырып һата. Ҡайһы берәүҙәр биҙрә-биҙрә картуфын арбуз, ҡауынға алмаштырып ҡала. Был аҙымдары үҙҙәре өсөн ни тиклем файҙаһыҙ икәнлеген аңламайҙар ҙа, әйтһәң дә аңларға ла теләмәйҙәр. Көҙөн күп булып күренгән картуфты тегеләй-былай таратып бөтәләр ҙә, яҙ етһә, сәсерлек картуф һорап йөрөйҙәр. Ләкин, бәхеткә күрә, ундай моңһоҙҙар әҙ арабыҙҙа, күптәр ер ҡәҙерен, унда үҫкән байлыҡ мәртәбәһен, хеҙмәт баһаһын белә. Улар үҙҙәрен ошо ерҙең хужаһы итеп тойған саҡта бер ҡасан да ас булмаясаҡ.

Ауылда эш урындарының бик әҙ булыуы кешене йәшелсә-емеш күпләп үҫтереп, мал аҫрап һатып йәшәүгә этәрә. Ләкин барыһының да ҡалаға күмәртәләп ташып һатыу мөмкинлеге юҡ, шуға күрә йә алыпһатарға биреп ебәрергә мәжбүр, йә үҙенә генә тотонорға тура килә. Ит менән дә эш итеү ҡатмарланды хәҙер. Ҡайҙалыр тәғәйенләнгән махсус урынға алып барып, аҡса түләп һуйҙырып йөрөү кеҫәгә лә һуға, оло мәшәҡәт тә тыуҙыра. Шуға күрә күптәр әлеге лә баяғы алыпһатарҙарға тереләй килеш биреп ебәрә һәм күп килемен юғалта.

Ауылда шәхси ярҙамсы хужалыҡ менән (ЛПХ) йәшәүселәргә дәүләт кимәлендә ярҙам кәрәк, юғиһә, улар баш күтәрә алмайынса, бөгөлөп төшәсәк. Ауыл йәшәһен, йәштәр тыуған ерендә ҡалһын тиһәк, ауылда эшләү һәм йәшәү өсөн шарттар булдырырға кәрәк. Шулай уҡ үҙ хужалыҡтарында етештерелгән аҙыҡ-түлекте һатып йәшәргә теләүселәр алдында тауарын ҡайҙа һатырға тигән мәсьәлә тормаҫҡа тейеш. Баҙарға барып һатам тиһәң - урын өсөн түләргә кәрәк, урамда торһаң - ҡыуа башлайҙар. Баҡса тултырып йәшелсә-емеш үҫтереүҙән ни фәтүә, уны һатып булмаһа? Һатмаҫ инең, аҡса кәрәк. Бына шундай йомоҡ түңәрәктә йәшәй бөгөнгө көндә ауыл халҡы. Әгәр ҙә дәүләт тарафынан контролдә тотолған ауыл халҡының тауарын ҡабул итеү пункттары булдырылһа, мәсьәлә ниндәйҙер кимәлдә хәл ителер ине, тип уйлайым.

***Юлай АЛСЫНБАЕВ, Мәләүез районы:*** Ғаиләбеҙҙе туйындырыусы ла, кейендереүсе лә - мал. Хужалығыбыҙҙа быҙауҙары менән 6 һыйыр, ҡолондары менән 3 ат, шулай уҡ 4 башмаҡ, тиҫтәләгән өйрәк һәм ҡаҙ аҫрайбыҙ. Һыйырҙың һөтөн-ҡаймағын Мәләүезгә алып барып һатабыҙ. Күптән шөғөлләнгәс, ҡатынымдың һөт-ҡаймаҡты алып ҡалыусы аралашсылары бар. Уларға 1,5 литрлыҡ һөттө 45 һумға, ә 700 граммлыҡ банкалағы ҡаймаҡты 70 һумға бирә. Айына 17-18 мең аҡса сығарабыҙ һөт-ҡаймаҡтан. Көҙөн башмаҡ, ат, өйрәк-ҡаҙҙарҙы һуйып һатабыҙ. Тырышҡанда байтаҡ ҡына аҡса сығарырға була. Ләкин аҡса һанағанда рәхәт булһа ла, уға күпме көс түгелгәнлеген үҙебеҙ генә беләбеҙ. Әлегә тиклем һыйырҙарҙы ҡул менән һауа инек, быйыл һауыу машинаһы һатып алғас, ҡулдан бер аҙ эш төштө.

Йәшелсә-емеш һатып мәшәҡәтләнмәйбеҙ, тик үҙебеҙ өсөн генә үҫтерәбеҙ. Төрлө тармаҡта эшмәкәрлек алып барыу ауырға тура киләсәген аңлайбыҙ һәм ике ҡуяндың ҡойроғонан тоторға тырышмайбыҙ. Ҡышын мин шулай уҡ төрлө райондарға йөрөп балта эше менән булам, ә ҡатыным ҡул эштәрен һата. Ауылда эш юҡлыҡҡа һылтанып ултырып булмай, сөнки етеш тормош көткө, балаларҙы кеше араһында кәм-хур итмәҫлек итеп кейендерге килә. Ялҡауланмаһаң, эш рәтен белһәң, намыҫлы булһаң, ауылда ла рәхәтләнеп йәшәргә мөмкин. Бары тик теләк кенә булһын.

**Гөлназ МАНАПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов РФ Федерация Советы ағзалары һәм Федераль Йыйылыш Дәүләт Думаһы депутаттары менән осрашты. Төбәктең социаль-иҡтисади үҫеше, уның инвестиция эшмәкәрлеге, граждандыҡ йәмғиәте институттарын камиллаштырыу һәм импортты алыштырыу программаһын тормошҡа ашырыу мәсьәләләре тураһында фекер алыштылар. Республика Башлығы уңыштарҙы, ҡаҙаныштарҙы барланы. Уның билдәләүенсә, Башҡортостан бөгөн Волга буйы федераль округында торлаҡ төҙөү буйынса беренсе урынға сыҡты. Ләкин республикала, башҡа төбәктәрҙәге һымаҡ уҡ, күмәртәләп һәм ваҡлап һатыу буйынса сауҙа күләме 20 процентҡа кәмене.

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәү өлкәһе Жуковский ҡалаһының М.М.Громов исемендәге осоу-тикшеренеү институты аэродромында уҙған "МАКС-2015" халыҡ-ара авиация-космик салонында булды, "Берләштерелгән двигателдәр эшләү корпорацияһы" һәм "Рәсәй вертолеттары" акционер йәмғиәттәренең генераль директорҙары Александр Артюхов һәм Александр Михеев менән осрашты. Ошо күргәҙмәне тәрән өйрәнеү авиация двигателдәрен эшләүҙә, вертолет төҙөүҙә республиканың роле бик ҙур икәнлеген күрһәтте, -тине республика Башлығы. - Хәрби авиация двигателдәре Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһендә етештерелә. Самолеттарҙың авиация двигателдәре өсөн агрегаттар беҙҙең предприятиеларҙа сығарыла. Авиация конструктор бюроһы, Күмертауҙа вертолет заводы бар".

✓Башҡортостанда Залог фонды булдырылды. Башҡортостан Хөкүмәте положениеһы менән раҫланған Фонд республика өсөн өҫтөнлөклө һәм әһәмиәтле булған инвестиция проекттарына ярҙам итәсәк. Залогты кемгә бирергә кәрәклеген республика Хөкүмәте хәл итәсәк. Башҡортостандың Залог фондына индерелгән объекттарҙың яҡынса хаҡы - 10,6 миллиард һум. Артабан Фондтың активтарын арттырыу планлаштырыла.

✓25 августа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә академик Н.Н. Бурденко исемендәге Төп хәрби клиник дауаханаһында Омскиҙа хәрби казарма емерелеү һөҙөмтәһендә төрлө тән йәрәхәттәре алған һалдаттар, уларҙың ата-әсәләре менән осрашты. Республика Башлығы һалдаттарҙың хәле менән ҡыҙыҡһынды, уларға тиҙерәк һауығыуҙарын теләне. Десантсыларҙың хәле яҡшырған, ыңғай динамика күҙәтелә. Дауаханала улар юғары квалификациялы медицина ярҙамы ала.

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БАЛАЛАРЫБЫҘҘЫҢ...

## күңел ҡанатын нығытайыҡ!

**Тамара ИСКӘНДӘРИӘ-ЮЛДАШЕВА, "Аҡбуҙат" балалар журналының баш мөхәррире, шағирә:** Беҙ халыҡтарҙың уҙаны, үҙбилдәләнеше өсөн бик мөһим ваҡиғалар барған заманда йәшәйбеҙ. Ошондай осорҙа замандың асылын нескәрәк тойорға тырышыу кәрәк - бына шул һәләтебеҙ кәмемәгәнме икән, тип борсолам. Йәшәйеш мәсьәләләрен хәл итеүгә күмелеп, аҡса эшләү һәм йәшәү өсөн көрәшеп, киләсәк тураһында онотоп та ебәрәбеҙ кеүек. Мин хәлле тормошҡа ҡаршы түгел. Көн дә икмәк тураһында уйлап йәшәгәндә рухи аҙыҡ туплауҙы ҡайғыртыу ҡыйын. Әммә матди байлыҡты өҫтөн ҡуйған халыҡтар яйлап деградацияға табан бара. Беҙ уларҙы өлгө итмәйек, үҙебеҙҙең ҡиммәттәрҙе - зыялылыҡты алға ҡуяйыҡ. Быға тиклем булған ҡаҙаныштарыбыҙҙы юғалтмайбыҙмы? Мәктәптәрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте өйрәнеләме, башҡорт телендәге гәзит-журналдарыбыҙ йәшәйме? Башҡорт халҡының донъя кимәлендә бөтәндәр менән тиңләшерлек рухи ҡомартҡылары, шәхестәре бар. Шуларҙы өҫтөн ҡуйған осраҡта ғына милләтте йәшәткән өмөт сығанағы һүнмәҫ. Әле шундай дәүер килде - һынылыш осоро. Иң мөһиме, һәр милләттәш киләсәк тураһында уйланһын һәм үҙ алдындағы бурысты башҡаларға япһармай ғына башҡарырға тырышһын ине.

Ҙур маҡсатҡа табан юл бәләкәй аҙымдарҙан башлана. Киләсәктә балаларыбыҙ рухи яҡтан ярлы булмаһын, тиһәк, тәү сиратта уларға туған телде, әҙәбиәтте һәм мәҙәниәтте һеңдереп үҫтерергә кәрәк. Зыялылыҡ тәрбиәләүҙең нигеҙе ғаиләлә һалына. Тамағы туҡ, өҫтөнә кейер кейеме бар икән - еткән, тип уйлап хаталана күптәр. Сабыйы менән артыҡ талапсан итеп һөйләшеп, хаталары өсөн әрләп, ҡыҫкырып та ебәреүселәр юҡ түгел. Ә уның күңел бөтөнлөгөн хәстәрләү - шул зыялылыҡтың бер өлгөһө бит. Ауылда малсы, игенсе булып эшләгән ҡәҙимге кешеләрҙең үҙ балаһына дөрөҫ, матур тәрбиә биреүен күреп һоҡланғаным бар. Балаһын, тауыш күтәрмәйенсә генә, кешелекле, ихтирамлы, илһөйәр шәхес итеп үҫтергән шул ябай кешеләрҙе мин ысын зыялы тип һанайым.

Бөгөн, мәктәптәр ҡыҫҡартылып, эреләтелгән заманда, балалар башҡа тел мөхитенә күсә, шуға ла үҙ-ара башҡорт телендә аралашмай, туған телдәге матбуғат менән ҡыҙыҡһынмай. Ә бит "Аҡбуҙат", "Аманат", "Шоңҡар", "Йәншишмә" кеүек гәзит-журналдарҙы дәрестәрҙә лә, ябай йәшәйештә лә ҡулланмайынса, ысын зыялылар тәрбиәләп булмай. "Аҡбуҙат"та беҙ бит һәр әҫәрҙе ентекләп һайлап алабыҙ, балаларҙың күңелен имгәтмәһен, яҡтылыҡ ҡына өләшһен, тип, маҡсатлы рәүештә рәссамдарҙан яҡты, сағыу һүрәттәр талап итәбеҙ. Сабыйҙарҙың кескәйҙән рухы ныҡ булһын, журналда сыҡҡан һәр һөйләм уларҙан киләсәктә кеслә, илһөйәр шәхестәр тәрбиәләргә ярҙам итһен, тибеҙ. Шул тиклем күңелебеҙҙе биреп эшләгәс, һәр башҡорт ғаиләһенә барып етһен ине ул "Аҡбуҙат"!

Әлеге ваҡытта журналдарыбыҙҙың яҙмышы ҡыл өҫтөндә тора. Ата-әсәләр матбуғатҡа йылдан-йыл әҙерәк яҙыла. Тираж кәмегәс, килем дә юҡ. Шунан инде, килемһеҙ баҫмалар дәүләткә кәрәкмәй, тигәнде лә ишетергә тура килә. Балалар өсөн баҫмаларҙан (айырыуса, милли телдәге!) килем көтөү үҙе үк хата фекер икәне бәхәсһеҙ. Реклама тураһындағы законда ла былдай баҫмаларҙа балаларҙың ата-әсәләргә йөгонтоһон файҙаланыу тыйылған. Нимә эшләргә? Баҡтиһәң, Рәсәйҙә милли балалар матбуғатын яҡлаусы бер генә закон юлы ла, хөкүмәт ҡарары ла юҡ икән. Ҙур-ҙур заводтар ябылған заманда кескәй генә журналға ни һан, тип фекер йөрөтөмә икән дәүләтебеҙ? Ә шул бәләкәс кенә журнал киләсәк быуындар өсөн, ил өсөн, бәлки, шул заводтарҙан да мөһимерәк хеҙмәт башҡаралыр? Журнал - ул шундай уҡ "завод", миңдәрсә балаларҙың рухи байлығын, күңел көрлөгөн тыуҙырыусы "фабрика"! Беҙ ҙә, ғәйәт ҙур предприятие кеүек, илдең буласаҡ граждандарын "әүәләйбеҙ", киләсәктәге зыялыларҙы, шәхестәрҙе тәрбиәләйбеҙ. Шуға ла балалар матбуғаты дәүләт ҡурсалауына - тәғәйен закондарға, ҡарарҙарға нигеҙләнгән хәстәрләүгә күптән лайыҡ, тип уйлайбыҙ.

Халҡыбыҙ - ата-әсәйҙәр, олатайөләсәйҙәр, аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр - берҙәм булып, милли матбуғатыбыҙҙы алдырайыҡ беҙ. Хөкүмәттән генә көтөп ятыр сара юҡ! Күп кенә ауылдарҙа матур тәжрибә йәйелдерелә - ағинәйҙәребеҙ, үҙҙәре журналыбыҙҙы алдырып, балалары ялға ҡайтҡанда бергәләп ҡарап, уҡып, файҙалана. Аралашыу үҙе бер ҡиммәткә әйләнгән хәҙерге заманда сабыйҙарға нимә кәрәген белеп эшләгән, уҡымлы, ҡыҙыҡлы баҫмабыҙ һәр ата-әсәгә ярҙамға килә бит. Рухи тәрбиә алмай, матди ихтыяждарын ғына аңлаған сабый - бер ҡанатлы ҡош ул. Балаларыбыҙҙың күңел ҡанатын нығытайыҡ!

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР

# "КЕҪӘ ЧЕРНОБЫЛЕ"



Эскелекте һәм тәмәке тартыуҙы бөтөнләй тормоштан алып ташлауға саҡырыусы Заря-Әсәй Бикташева тәмәкене "кеҫә Чернобыле"нә тиңләй. Бик кеслә сағыштырыу! Уның был фекерен бер аҙ дауам итер инем: тәмәкесенең бер үпкәһе Хиросима булһа, икенсеһе - Нагасаки. Икенсенән, эсеү һәм тартыу суицидка тиң ғәмәл тип аталырға тейештер ҙә. Тиң генә лә түгел, шул уҡ суицид. Сөнки эсеү-тартыуҙың да, суицидтың да һөҙөмтәһе бер - үлем. Айырма шунда ғына: тәүгеһендә кеше яйлап, әммә ыҙалап, икенсеһендә ҡапыл донъялыҡтан китә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

КИЛЕШМӘЙЕМ!



# ҮТӘ КҮБӘЙЕП КИТТЕ...

## ҡолаҡҡа ятмаған телмәрҙәр

**Үҙемде аңлап белгәндән алып мин матур һөйләшкән кешеләргә ғашиҡмын. Бөгөнгөләй иҫемдә, иң тәүҙә әсәйемдең атайыма йылмайыңҡырап иркә генә һүҙ ҡушыуҙарын ҡыҙыҡ күрҙем, унан һуң инде һәр өнгә иғтибарлы булған тәүге уҡытыусым арбаны.**

Мәктәп, урта һәм юғары уҡыу йорттарында белем алыу йылдарында бик күп остаздарым булды. Шуларҙың һәр ҡайһынынан тел байлығы, һүҙ хазинаһы оторға тырыштым. Минең өсөн һәр һүҙе үҙ урынында булған, кинәйәле мәкәл-әйтемдәр менән байытылған телмәре тәҙәк тел оҫталарына Аллаһы Тәғәлә үҙе тел аҫҡыстары биреп ҡуйған кеүек. "Телдең моңон, гармонияһын татып ҡараған кешенең генә телмәре матур була", тигәйне үҙенең бер әңгәмәһендә танылған артисыбыҙ Олег Ханов. Ысынлап та, телең һөйләгән моңдо ҡолағың да ишетергә тейеш шул. Быға өҫтәп, ҡулың менән ҡағыҙға төшөрөлгән һүҙҙәр иһә күҙҙәрҙе һөйөндөрөргә тейеш, тиер инем. Был бигерәк тә бөгөн телебеҙҙе һаҡлаусы һәм пропагандалаусы тип ҡабул ителгән гәзит-журналдарыбыҙға, радио-телевидениеға ҡағыла.

Һуңғы ваҡытта шуға иғтибар итәм: хәбәрселәрҙең мәҡәләләрендә, тапшырыуҙарында "тыуҙырылған" тиган һүҙ күбәйеп китте. Әйтәйек, "Киске Өфө"нөң 28-се һанында "Өфө - йылмайыусы ҡала" туплан-маһында Ҡытай корреспонденты Чжоу Ляндың ҡыҫҡа ғына фекерендә был һүҙ өс тапҡыр яңғырай: "хужабикәләр генә тыуҙыра ала торған бөхтәлек", "инвесторҙарға ниндәй шарттар тыуҙырыласаҡ", "инвесторҙар өсөн яҡшы шарттар тыуҙырабыҙ". Ошо урындарҙа "булдырыла, эшләнә" тиган һүҙҙәрҙе синоним буларак ҡулланып булмай инеме?

- Педагогтарҙың бер бик яҡшы алымы бар - уҡыусы нимә яҙғанын аңлаһын өсөн тексты үҙенең йә башҡаларҙан ҡыҫкырып уҡытыу. Журналистарға ла ҡайһы саҡта үҙенең яҙғанын бер нисә тапҡыр ҡыҫкырып уҡып сығыу кәрәктер. Шул саҡта, моғайын да, ҡолаҡҡа ятмаҫтай һүҙҙәр, һөйләмдәр шәйләнер ине.

**Сәриә ҒӘЛИАСЛАНОВА.**
**Баймаҡ районы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓"Социнвестбанк" клиенттарын хеҙмәтләндереү буйынса эшен яңыртты, бөтә офистар, банкоматтар тулы режимда эшләй. Тик вкладчиктарға ҡулаҡса биреүгә лимит урынлаштырылған - көнөнә 50 мең һум. Яҡын көндәрҙә был сикләү кисектереләсәк. Банктың ышаныслылығы дәүләт ярҙамы менән тәьмин ителә.

✓Иғтибар! Почта йәшниктәренә "Пенсия фонды"нан тип таратылған хаттарҙа компьютерҙарға зыян килтереүсе вирустар һалынған, тип хәбәр итә ведомстволың матбуғат хеҙмәте. Хаттарҙа яңы РСВ-У отчет төрө менән танышырға тәҡдим ителә. Пенсия фонды иҫкәртә: pfrf.ru сайты администрацияһы бындай хаттар тарату менән шөғөлләнмәй.

✓Ағымдағы йылдың ғинуар-июль айҙарында Башҡортостанға күпме аҡса бүленгәнлеге һәм тотонолғанлығы хаҡында билдәле булды. 1 августа төбәктең тупланма бюджеты килемдәр буйынса 103,8 миллиард һумға үтәлгән, был былтырғы ошо уҡ осорға ҡарата 110,2 процент. Республиканың Финанс министрлығы билдәләүенсә, ошо һандан һалым һәм һалым булмаған килемдәр 82,2 миллиард һум тәшкил иткән - 2014 йылдың ғинуар-июль айҙары менән сағыштырғанда 5 миллиардҡа күберәк.

✓15 сентябрҙә Өфөнөң Октябрь районында "Йәш ғаилә - 2015" район конкурсы үтә. Конкурста ҡатнашыу өсөн Өфөлә эшләгән, уҡыған йәш ғаиләләр саҡырыла. Ата-әсәләрҙең йәше - 35-тән, ә балаларҙыҡы 14 йәштән үтмәҫкә тейеш. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн кәрәкле документтарҙы Октябрь районының мәҙәниәт һәм йәштәр сәйәсәте бүлегенә алып килергә: Маршал Жуков урамы, 3/2, 3-сө кабинет. Мәғлүмәт өсөн телефон: 230-47-84.

✓Башҡортостанда 799 мең гектарҙа ашлыҡ һуғылған, был дөйөм майҙандың 45 проценты. Ун һигеҙ райондың хужалыҡтарында майҙандарҙың яртыһынан ашыуы йыйып алынған. Гектарҙан уртаса уңыш 17,8 центнер булғанда 1421 мең тонна ашлыҡ һуғылған. Яҙғы бойҙай - 182,4 мең тонна, арпа - 305,6, һоло - 156,4, борсаҡ - 44,7. Бөгөнгө көндә Стәрлетамаҡ районында 71,64 мең, Саҡмағошта - 70,29, Илештә - 69,11, Мәләүездә - 67,61 мең тонна иген һуғылған.

**"Башинформ"дан.**

✓ Бынан тыш, һигеҙ муниципалитет буйынса кем мөмкинлектәрҙе яҡшы файҙаланған, кем үҙен яҡшы күрһәткән һәм нимәлер эшләгән, кем үҫеш өсөн хатта ҡыл да ҡыбырлатмаған - һәр күрһәткес буйынса рейтинг эшләргә йөкмәтте.



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## БАЛЛЫ ЙӘРМИНКӘ

**Өфөләге "Аҡбуҙат" ипподромында бал күргәҙмә-йәрминкәһе асылды. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары бер майҙанда балдың 200-гә яҡын төрөн һатып ала ала.**

- Йәрминкәгә Нуриман, Архангел һәм Иглин райондары умартасылары килде. Былар - Башҡортостандың баллы төбәктәре. Улар йүкә, сәскә балын һәм уның төрлө төрҙәрен килтерә. Маҡсатыбыҙ - ҡала халҡын умартасылар, уларҙың продукцияһы менән таныштырыу, - тип һөйләне Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге директоры Әмир Ишемғолов. Уның һүҙҙәренсә, күргәҙмәгә ҡуйылған ошондай күләмдәге продукция донъяның бер илендә лә юҡ.

- Шуға күрә республикала фәнни ҡеүәт һәм технологиялар үҫешкән тип ғорурлыҡ менән әйтә алабыҙ. Улар араһында балдан яһалған 50-нән ашыу косметика продукцияһы, прополислы һыу, бал ҡушылған крем, өҫтәмәләр ҡушылған балдың 75 төрө бар, - тип билдәләне Әмир Миннеәхмәт улы.

## ФАЙҘАЛЫ ТАПШЫРЫУ БУЛМАҠСЫ

**Республиканың төп телеканалында башҡорт телендә "Асыҡ дәрес" тип аталған яңы проект старт ала. Тапшырыу 31 августа киске сәғәт 9-сы 15 минутта һәм 1 сентябрҙә киске 6-ла эфирға сыға.**

"Асыҡ дәрес"тең бурысы - белем биреү мәсьәләләрен төрлө яҡлап тикшереү өсөн телевизион майҙансыҡ булдырыу", - тине яңы программаның авторы һәм алып барыусыһы Гөлсимә Иштанова. Ул үҙе белеме буйынса - уҡытыусы. Журналистар мәғариф өлкәһендәге реформалар хаҡында һөйләйәсәк, ҡатмарлы уҡытыу методикаһына төшөнөргә ярҙам итәсәк, борсоған һорауҙарға яуап бирәсәк. Мәҫәлән, "Ни өсөн мәктәп хакимиәттәре, дәреслектәр барыһына ла етә, тип раҫлаһа ла, йыл һайын ата-әсәләр уларҙы үҙ аҡсаһына һатып ала?" тигән һорауға "Асыҡ дәрес" тапшырыуының тәүге сығарылышында яуап алырға мөмкин. Проекттың геройҙары - уҡыусылар һәм уларҙың ата-әсәләре. "Был бик мөһим, - тип иҫәпләй режиссер Ләйсән Рамазанова. - Беҙ тәү сиратта ата-әсәләр өсөн эшләйбеҙ". Тапшырыу рус телендәге субтитрҙар менән оҙатылып барасаҡ.

## КИҘЕҮГӘ ҠАРШЫ ДАУА

**Өфөлә "Иммунопрепарат" предприятиеһы белгестәре киҙеүгә ҡаршы яңы вакцина әҙерләне. Быйыл "Микроген" ғилми-етештереү берекмәһенең Өфөләге филиалында уйлап табылған препарат иҫкәртеү прививкаларының милли календары буйынса халыҡты бушлай вакцинациялау өсөн файҙаланыласаҡ.**

Яңы вакцина йыл һайын 18 йәштән 60 йәшкәсә кешеләргә киҙеүгә ҡаршы прививка яһау өсөн тәғәйенләнгән. "Рәсәйҙә 15,5 миллиондан ашыу кеше ошо вакцина ярҙамында киҙеү вирусынан һаҡлана ала. "Совигрипп" тулыһынса илебеҙҙә әҙерләнгән һәм уға сит ил компоненттары ҡушылмаған. Уны әҙерләү өсөн компания 200 миллион һум аҡса инвестициялаған", - тип хәбәр итте "Микроген" ғилми-етештереү берекмәһенең генераль директоры Петр Каныгин. Иммунобиологик препарат Рәсәй медицина берләшмәһендә лә хуплау тапҡан. "Киҙеүгә ҡаршы вакцина һәм уны алыу ысулдары" тикшереүе өсөн патентка эйә булыусы "Микроген" ғилми-етештереү берекмәһе "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы асышы" номинацияһында Интеллектуаль милек буйынса федераль хеҙмәттең дипломына лайыҡ булған.

КӨНАУАЗ

**Уҙған шәмбе Сибай ҡалаһы үҙенең 60 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Ҡала халҡының шатлығын уртаҡлашырға һәм тантана менән ҡотларға Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов та килгәйне. Ул Сибайҙың Урал арьяғының баш ҡалаһы, уның иҡтисади, мәҙәни һәм мәғариф үҙәге булырға хаҡлы рәүештә лайыҡлы, тап шуның өсөн дә республиканың өстән бер өлөшөн алып торған ҙур бер субтөбәктең "локомотивы" роле уйнауын билдәләп, ҡала үҫешенә ҙур өлөш индереүселәргә дәүләт наградалары тапшырҙы.**



# СИБАЙҘАР БАЙРАМ ИТТЕ...

Сибайҙың тау байлыҡтары һәм төҫлө металлургия тармаҡтары предприятиелары тарафынан 2011 йылдан алып 6 миллиард һум инвестицияланған, яңы 400 эш урыны барлыҡҡа килгән. Сибай элеваторында яңы тирмән эшләй башлауы күрше районлар өсөн дә иген үҫтереү күләмен арттырыуға стимул булып тора. Бында йылына 76 мең тонна он тартырырға мөмкин. Ошо һәм башҡа проекттар тап бынан биш йыл элек ҡабул ителгән Урал арьяғын үҫтереү программаһына ярашлы тормошҡа ашырыла. Уҙған арауыҡта йыллыҡ инвестиция күләме ике миллиард һумдан артып киткән, ҡаланың бюджетҡа индергән үҙкилеме 36 процентҡаса үҫкән. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡҡа ла ҙур өмөт бағлана. Рөстәм Зәки улы белдереүенсә, комплексы программа 2020 йылға тиклем оҙайтыласаҡ. Программа тормошҡа ашырылыу осоронда әллә ни артыҡ һикереш булмаһа ла, был барыбер алға яһалған аҙымға тиң, сөнки ул төбәктәге хәл-торошто тотороҡландырырға, яңы эш урындары булдырырға, инвестициялар йәлеп итергә мөмкинлек асты. Бөгөн бында уртаса эш хаҡы, һалым һәм һалым булмаған килем, бюджет тәьминәте арта, эшһеҙлек күрһәткесе уртаса республика күрһәткесенән кәмерәк. Ҡыҫҡаһы, Урал арьяғы үҫешендәге тоткарлыҡтар яйлап хәл ителә бара. Бөгөн субтөбәктә 8 мең эш урыны булдырылған, төп капиталға инвестициялар 50 миллиард һум тәшкил иткән. Бюджет инвестициялауы 5,5 миллиард һум тирәһе. 435 километр юл, 14 күпер һалынған һәм ремонтланған. Төбәк аграрийҙарына ярҙамға 2 миллиард һум йүнәлтелгән. Республика һәм федераль бюджеттан финанслау шарттарында бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү маҡсатында дүрт йылда Урал арьяғына 234 миллион һум йәлеп ителгән. Әммә...

- Үҙәктең ҙур ярҙамына ҡарамаҫтан, урындағы власть органдары эшлекле команда туплай, теге йәки был мөһим йүнәлешкә квалификациялы менеджерҙарҙы һәм башҡарыусыларҙы һайлай алманы. Һөҙөмтәлә программала планлаштырылғанса, төбәктең фәнни-техник һәм инфраструктура ҡеүәтен сифатлы итеп нығытып, шулай уҡ проблемалы райондарҙа бәләкәй, урта һәм эре эшҡыуарлыҡтың балансы үҫешенә өлгәшеү мөмкин булманы, - тине дәүләт Башлығы. - Бында, тәү сиратта, урындағы инвесторҙарға таянырға кәрәк. Улар урындағы иҡтисадтың үҙенсәлеген, халыҡтың менталитетын белә, төбәк иҡтисады артабан үҫешә алырлыҡ нигеҙҙе тәшкил итә. Беҙгә үҙен крайҙың патриоты итеп тойоусылар, тимәк, аҡыллы һәм ышанысы инвесторҙар кәрәк. Ә беҙҙә иң мөһим сифат юҡ - кешеләргә таянмайбыҙ, улар менән эшләмәйбеҙ. Беҙ, чиновниктар һымаҡ, йыйылышабыҙ, отчет бирәбеҙ, графиктар төҙөйбеҙ, ә кешеләр ҡайҙа? Графиктар артында кешеләр күренмәй, халыҡ, йәмғәтселек әүҙемлеге юҡ.

Рөстәм Хәмитов республика министрлыҡтарына һәм ведомстволарына "хаталар өҫтөндә эшләп", программаны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләрен анализларға ҡушты. Бынан тыш, һигеҙ муниципалитет буйынса кем мөмкинлектәрҙе яҡшы файҙаланған, кем үҙен яҡшы күрһәткән һәм нимәлер эшләгән, кем үҫеш өсөн хатта ҡыл да ҡыбырлатмаған - һәр күрһәткес буйынса рейтинг эшләргә йөкмәтте. Артабан инде хакимиәт башлыҡтары менән индивидуаль эш алып барыласаҡ.

Кемдер Сибай ҡалаһы юбилейын байрам тип кенә ҡабул итһә, етәкселек өсөн байрамдар - эшләнгән эштәргә йомғаҡ яһау, киләсәккә пландар билдәләү сараһы ул.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТАҒЫ ҠУНАҠТАР КӨТӘБЕҘ

**6 - 10 октябрҙә Өфөлә VII Рәсәй философтары конгресы үткәрелә. Башҡортостандың баш ҡалаһына Рәсәйҙән һәм сит илдәрҙән 1 меңгә яҡын ғилми берләшмә вәкилдәренең килеүе көтөлә.**

Конгресс халыҡ-ара форум форматында ойошторола. Сараға донъя кимәлендә билдәле ғалимдар саҡырылған, тип хәбәр иттеләр Башҡорт дәүләт университетынан (уҡыу йорто - конгресты ойоштороусыларҙың береһе). Ҡатнашыу өсөн Ҡаҙағстан, Ҡытай, Төркиә, Ҡырғыҙстан, Тажикстан, Иран, Израиль, Үзбәкстан, Әзербайжан, Испания, Болгария, Бельгия, Украина илдәренән 1450-нән ашыу ғалим ғариза биргән. Рәсәй философтары конгресы өс йылға бер тапҡыр уҙғарыла. Бынан алдағы саралар Санкт-Петербургта (1997), Екатеринбургта (1999), Дондағы Ростовта (2002), Мәскәүҙә (2005), Новосибирскиҙа (2009) һәм Түбәнге Новгородта (2012) ойошторолдо.

Конгрестың темаһы - "Философия. Толерантлыҡ. Глобалләшеү. Көнсығыш һәм Көнбайыш - донъяға ҡараштар диалогы". Эш барышында ҡала мөхитен үҫтереүҙең заманса йүнәлештәре, мәғариф һәм милли хәүефһеҙлек, экологик этика һәм экологик цивилизация, милләт-ара мөнәсәбәттәр мәҙәниәте, заманса тәбиғәт белеменең мөһим проблемалары киңеү темаларҙы тикшереү планлаштырыла. Ойоштороусыларҙың һүҙҙәренсә, форумдың Өфөлә уҙыуы Рәсәй төбәктәре һәм сит илдәр араһындағы фәнни һәм мәғариф бәйләнештәрен үҫтерергә, шулай уҡ уҡытыусыларҙың һәм аспиранттарҙың стажировкаларын ойошторорға булышлыҡ итәсәк.

**"БАШИНФОРМ".**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓4 сентябрҙә Милли йәштәр театры артындағы Ике фонтан майҙанында "Лондонград" концерты була. Асыҡ һауа форматындағы сара "СТС-Өфө" телеканалындағы ошондай уҡ исемдәге йәштәр сериалына ярҙамға үткәрелә. Профессиональ Өфө музыканттары Лондон тураһындағы һәм Британия төркөмдәре композицияларын башҡарасаҡ. Беренсе программала Башҡорт дәүләт филармонияһының артистары ҡатнаша.

✓1 сентябрҙә Өфөнөң Салауат Юлаев майҙанында "Сәләм, студент!" тип исемләнгән концерт-дискотека була. Матур йолаға әүерелгән байрамды Киров район хакимиәте булышлығында "Юлдаш" радиоһы ойоштора. Программала башҡорт эстрадаһы йондоҙҙарының сығышы ҡаралған. Тамашасыларҙы төрлө уйындар, бүләктәр көтә. Еңеүсегә төп бүләк - велосипед. Асыҡ һауалағы концерт "Ҡурай" каналында тура эфирҙа күрһәтелә. Байрам киске сәғәт 6-ла башлана.

✓28 августа Өфөлә Әҙәбиәт йылына бағышланған "Бында уҡыйҙар" акцияһы старт алды. Бәләкәй китапханалар ҡала халҡының китаптарынан торасаҡ. Акция буккроссинг принцибына нигеҙләнә: телгән һәр кем икенселәр уҡыһын өсөн яратҡан китабын ҡалдыра йәки бүләк итә ала. Йыл һуңында иң яҡшы әҙәби баҫма һәм иң әүҙем ҡатнашыусы өсөн таныу биреү ойоштороласаҡ.

✓Башҡортостан халҡына автомобилдәрҙән бер көнгә баш тартырға һәм шул рәүешле "Бөтә донъя автомобилһеҙ йөрөү көнө"н билдәләргә тәҡдим ителә. Сара йыл һайын 22 сентябрҙә үткәрелә. Был хаҡта республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты хәбәр итә. Йыл һайын был кампания йәмәғәтселектең иғтибарын автомобилдәрҙең күплеге һәм ҡалаларҙа һауаның бысраныуы проблемаларына йәлеп итеү буйынса ҡалаларҙа акциялар, халыҡтан һорау алыу, велопарадтар, конференциялар һәм йәмәғәт, башҡа транспорт төрҙәрен популярлаштырыуға йүнәлтелгән саралар ойоштора.

✓8 августан эргәлә "Эвакуатор эшләй" тигән яҙыу булмаһа, автомобиле алып китеү тыйыла. Административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһындағы кодекска индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, был яҙыу "Туҡталыш тыйыла" тигән юл билдәһе эргәһенә ҡуйылырға тейеш. Әгәр тыйыусы билдә янында иҫкәртеүсе күрһәткес юҡ икән, эвакуациялау законһыҙ тип иҫәпләнә һәм автоһәүәҫкәр суд аша килтерелгән зыянды ҡаплауҙы талап итеү хоҡуғына эйә.

ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҮҘЕ БЕР БӘХЕТ БИТ...

## тыуған ауыл, тыуған йортоң булыу

**Ауылдаштарҙы осраштырып, ырыуҙаштарҙы, туғандарҙы үҙ-ара таныштырыу ниәтендә ойошторолған матур байрамдарыбыҙ байтаҡ. Һабантуйҙар, "Һаумыһығыҙ ауылдаштар!", "Шәжәрә байрамы" шулар рәтендә. Әлшәй районында ла быйыл шәжәрәләрҙе, тамырҙарҙы барлау, яҡташтарҙы, тамырҙаштарҙы бергә туплау маҡсатында 15 ауылдың түңәрәк юбилейына арналған байрам саралары үтте.**



*Ауыл ағинәйҙәре ҡотлай.*

Был "юбилярҙар" араһына Иҙрис ауылы ла ингән. Уға нигеҙ һалыусы Иҙрис Монаш улы XVIII быуатта йәшәгән, ауыл да шул быуаттың 70-се йылдарында рәсми теркәлеү үткән. 1795 йылғы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса Иҙрис ауылы 11 йорттан торған, 68 кеше йәшәгән. Бөгөн ул 155 йорттан торған ҙур ауыл. Ауылдарҙың киләсәге булһын өсөн бында йәшәгән халыҡтың йәшәү шарттарын яҡшыртыу, ауыл тормошон йәнләндереү, бөтә проблемаларҙы кәмәкләп, бергә йыйылып хәл итеү мотлаҡ, ти Әлшәй районы хакимиәте башлығы урынбаҫары Закуан Әхмәтов.

- Тыуған ауылын күрергә ҡайтҡан кеше тәү сиратта атай йортона килә, зыяратты барып күрә, мәктәпкә һәм мәсеткә инеп сыға. Шуның өсөн дә был байрамда беҙ һабантуй ярыштары үткәреп торманыҡ, төп игтибарҙы ауыл тормошона, уның халҡына йүнәлтергә булдыҡ. Эшкә үҙебеҙ башлап тотонмаһаҡ, беҙгә береһе лә ситтән килеп ярҙам итмәсе билдәле. Ауылдағы рухи тәрбиә, әхлаҡ, иман мәсьәләләрен хәл итергә ныҡлап тотонған "Ағинәйҙәр" йәмәғәт ойошмаһы ағзаларының матур башланғысына ир-егеттәр ҙә әүҙем ҡушылырға тейеш. Сөнки ир-уҙамандар ғына хәл итә торған, уларҙың ғына ҡулынан килгән эштәр була. Иҙрис ауылының юбилейы уңайынан үткәрелгән байрам ауылдаштарға эштәрен бер аҙ арыным, туған-тыумасаларын саҡырып, бергә йыйылғанда бер төптән эшләргә өйрәтеү маҡсатын да күҙ уңында тота, - ти Закуан Зөфәр улы.

Иҙрис ауылының юбилей байрамын ойоштороусылар талантлы ауылдаштары сығыштарынан торған йөкмәткеле концерт барышында алдан иғлан ителгән "Матур йорт", "Матур баҡса" конкурстары һөҙөмтәләре буйынса ауылдың ете урамынан өлгөлө хужа-хужабикәләргә иҫтәлекле бүләктәр һәм маҡтау ҡағыҙҙары тапшырҙы. Оло йәштәге хеҙмәт ветерандарына фиҙаҡәр эштәре, әле лә йәштәргә өлгө күрһәтеп йәшәгәндәре өсөн рәхмәт һүҙҙәре лә яңғыраны. Әйткәндәй, Иҙрис ауылында 40, 45, 50, 55 һәм 60 йыл бергә татыу ғүмер иткән ғаиләләр күп икән, уларҙы ла бөтә ауыл халҡы менән сәхнә түренә мендереп тәбрикләнеләр. "Бүләктәр менән шәхси эшҡыуарҙар Нияз Алтынғужин, Ринат Зарипов, Рим Исламовтар ярҙам итте, оло рәхмәт уларға, - тине Әлшәй районының "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Рәйсә Мөфтиева. - Ғөмүмән, ошондай саралар, маҡтаулы кешеләргә иғтибар һәм бәләкәй генә булһа ла бүләктәр ауыл тормошона йәм, рух өҫтәй, халыҡҡа тағы ла дәртләнеберәк донъя көтөргә, күнелдәрен үҫтерергә бер стимул булып тора..."

Иҙрис халҡы былай ҙа тырышлығы, эшсәнлеге һәм ауылының киләсәген хәстәрләй белеүе менән дан алған. Бөтә ил буйынса колхоздар бөлгөнлөккә төшкәндә лә, бында "Сәләмәт" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте менән берлектә ауыл хужалығы һаҡлап ҡалынған, ауыл кешеһенә эш урындары бар. Ауыл эргәһендәге тауҙан сығарылған ташҡа ла иҙристәр үҙҙәре хужа булып алған, урамдарҙы төҙөкләндереү буйынса эштәр гөрләй. "Әле ошо байрам айҡанлы район хакимиәтенән матди ярҙам булараҡ бүленгән 100 мең һум аҡсаға ла Үҙәк урамға таш түшәтеп, юлды тәртипкә килтерә башланыҡ. Ауыл кешеһе үҙе битараф булмаһа, һәр эштә лә уныш ҡаҙанырға мөмкин. Иң мөһиме, бер уйҙа булыу, дәррәүлек, рух һәм тырышлыҡ кәрәк", - ти ауылдаштарының һәр береһе менән тығыҙ бәйләнештә эшләүсе ауыл старостаһы Светлана Сәйетова. Әйтергә кәрәк, ауылдаштар үҙ көсө менән яңы мәсет бинаһы төҙөгән, ул тиҙҙән асылырға тора.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Байрамға йыйылыусыларҙың йөҙҙәренә бағып, һүҙҙәрен тыңлап, шундай һығымтаға киләндә: үҙ ауылың, тыуған йортоң булыуы, тамырҙарың ныҡлығы - оло бәхет икән барыбер. Тик ошо бәхеттең ҡәҙерен белеп, ҡамғаҡ кеүек донъя буйлап таралып китмәй, илен, телен, киләсәген, ауылдарын ҡурсалауҙы йәшәү рәүешенә әйләндереп донъя көтһә ине милләттәштәр. Шул осраҡта ауылдар юғалмаҫ, Иҙрис ауылы кеүек быуат-быуат юбилейҙарын билдәләп йәшәй бирер.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ХОККЕЙ

# ТИК ЕҢЕҮҘӘР КӨТӘБЕҘ

**Континенталь хоккей лигаһының сираттағы, 2015-2016 йыл уйын миҙгеле старт алды. "Салауат Юлаев" көйәрмәндәренең "Өфө-Арена"ла һәм телевизор экрандары янында яратҡан командаһы өсөн "ауырыу" миҙгеле асыҡ, тип иғлан ителде. Алдағы матчтарҙа юлаевсылар данын кемдәр яҡлаясаҡ? Команда составына күҙ һалып үтәйек.**

Ағымдағы уйын миҙгелендә Өфө командаһын Анатолий Емелин етәкләйәсәк. Шулай уҡ уның менән бергә юлаевсыларҙың тренерҙар командаһын Аркадий Андреев (өлкән тренер), Андрей Зюзин (тренер) һәм Дмитрий Курошин (ҡапҡасылар тренеры) тулыландырҙы.

Команда составында ла үҙгәрештәр һиҙелерлек булды. Клуб алты яңы уйынсы менән контракт төҙөнө һәм бер-нисә уйынсы менән хушлашты. Был уйын миҙгелендә юлаевсыларҙың һаҡсылар рәтендә ике яңы уйынсы - Сами Лепистё һәм Филипп Метлюк уйнаясаҡ. Былтырғы миҙгелдә Екатеринбургтың "Автомобилист" командаһы составында сығыш яһаған хоккейсылар менән контракт бер йылға төҙөлгән.

Шулай уҡ командаға дүрт яңы һөжүм итеүсе килде. Улар - "Йокерит"тан ике йылға юлаевсылар рәтенә күсеүсе швед легионеры Линус Умарк, "Атлант"тан шулай уҡ ике уйын миҙгеленә Өфөгә килеүсе Артем Чернов, "Адмирал" һәм "Автомобилист"а уйнап, уларҙы бер йылға "Салауат Юлаев"ҡа алмаштырыусы Александр Нестеров һәм шулай уҡ "Адмирал"дан ике миҙгелгә "йәшел машинаға ултырыусы" Энвер Лисин.

Ә Виталий Коваль, Александр Степанов, Алексей Глухов, Антти Пильстрем, Станислав Голованов, Игорь Скороходов һәм Андрей Зубарев, контракттары тамамланыу сәбәпле, "Салауат Юлаев" составында башҡаса боҙға сыҡмаясаҡ. "Салауат Юлаев"тың капитаны итеп һөжүм итеүсе Игорь Григоренко һайланды.

Миҙгелдең беренсе уйынында юлаевсылар Омскиҙың "Авангард"ына ҡаршы сыҡты һәм, ҡыҙғаныска күрә, 2:4 иҫәбе менән еңелде. Гол авторҙары - Денис Хлыстов һәм Сами Лепистё. 27 август Астанала уҙған уйында ла хужалар көслөрәк булып сыҡты. Өфөләр 3:5 иҫәбе менән еңелде. Өс мәрәйҙең авторҙары - Николай Прохоркин, Сергей Соин һәм Линус Умарк.

Әйткәндәй, миҙгелгә тиклем "Салауат Юлаев" хоккей клубы көйәрмәндәре көнө ойошторолдо. "Өфө-Арена" алдында бер нисә майҙансыҡ эшләне: импровизацияланған хоккей майҙанында халыҡ хоккей уйнарға өйрәндә, "Агиҙел" хоккейсылары былау бешерҙе, тамашасыларҙы шулай уҡ лимонад менән һыйланылар. Фотоға төшөү өсөн шулай уҡ бер нисә урын билдәләнгәйне. Һуҫарҙар - Юлай менән Салауат, хоккей клубының дәртләндереүсе төркөмө "Ice Girls" менән фотоға төшөргә теләүселәр күп булды. "Салауат Юлаев" автобусы, ҡар көрәүсе комбайндар ҙа тамашасы иғтибарынан ситтә ҡалманы. Көйәрмәндәр көнө уңайынан 2005 йылда "Планетаның иң көслө кешеһе" ярыштарының вице-чемпионы, "Рәсәйҙең иң көслө кешеһе" турнирының 4 тапҡыр еңеүсеһе, Гиннесстың рекордтар китабы рекордсмены Эльбрус Ниғмәтуллин тамашасыларға һәләттәрен күрһәтте. Бынан һуң Эльбрус Ниғмәтуллин "Салауат Юлаев" командаһының автобусын бер нисә метрға һөйрәп алып барҙы. Көйәрмәндәр көнөндә хоккей клубы уйынсыларының яңы формаһы ла күрһәтелде. Форма, ғәҙәттәгесә, дәүләт флагының өс төҫөндә, уның дизайнына ҡурай кире ҡайтарылған.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Балыҡ аша

❖ Балыҡ һәм унан әҙерләнгән ризыҡтар, балыҡ консервалары ла аҡһымға, витаминдарға, минералы матдәләргә бай. Айырыуса майлы һимеҙ балыҡтар нервы епсәләре һәм баш мейеһе өсөн файҙалы. Уҡыусыларға яҡшы өлгәшеү өсөн шулай уҡ балыҡ ашау кәрәк.

### Тын юлдарына

❖ Ҡапыл ғына тын юлдары ауыртһа, лимон, ҡурай еләге ҡайнатмаһы менән тирләгәнсе сәй эсергә. Шулай уҡ һөткә бал ҡушып эсеү файҙалы. Һөт эскәндән һуң ауыҙҙы сайҡатырға.

### Ҡурылдай

❖ Брөнхит менән яфаланһаң, көн һайын диаметры 20 см булған шарҙы өрөп тултыр, тын юлдарың асылыр.

### Баш ауыртһа...

Артыҡ күп эшләүҙән, стрестан баш ауыртһа:

❖ йылы һыу менән ҡойоноу файҙалы;

❖ аяҡтарҙы ашыҡ һөйәгенә тиклем ҡайнар һыуға тығып, 10 минут ултырырға;

❖ 1 стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ бөтнөк үләне ҡушып эсеү ҙә сихәтле;

❖ нашатырлы һәм камфаралы спирттарҙы тигеҙ күләмдә ҡушып еҫкәү ҙә һәйбәт дауа;

❖ баштың нығ ауыртҡан яғындағы ҡолаҡ эсенә сөгөлдөр йәки һуғын һутына мансылған бәләкәй генә мамыҡ киҫәге ҡуйырға була.

### Оҙаҡ ятыуҙан тән боҙолғанда

❖ Микробтарҙы юҡ итеүсе ҡайын бөрөһө йә япраҡтары төнәтмәһе, һары мәтрүшкә (зверобой), шалфей, андыҙ тамыры (корень девясила высокого), ҡырылған һуған, кишер, алоэ, каланхоэ, эвкалипт, аҡ шыршы (пихта), әнис (анис) майҙары менән дауалау яҡшы.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# ТОРАЙЫҠ-ТОРАЙЫҠ...
## торналар

**Ырғыҙ-кәмәлек башҡорттарында туй йолаһының иң аҙаҡҡы өлөшөндә лә боронғо торна байрамы сағылыш тапҡан, күрәһең. Был ҡалын - егет яғында үткән туйҙа була. Ҡунаҡтарҙың хушлашыу ашына тундың кире яғын әйләндереп кейгән һәм тундың бер яҡ еңенән сығарылған ағас "суҡышлы", тундың билбауына суҡлы яулыҡ менән бәйләнгән "ҡойроҡ"ло, ҡойроҡ аҫтына яҫтыҡ бәйләгән кеше инә.**

Егет яғынан туйҙа ҡатнашыусылар уны: "Торна килде!" - тип, ҡыуаныслы тауыштар менән ҡаршы ала. Өҫтәл артында ултырған ҡунаҡтар: "Торна инде!" - тип, ҡул-аяҡтарын өҫтәл аҫтына йәшерә. "Торна"ны кәләштең атаһы - төп ҡоҙа эргәһенә алып киләләр. "Торна" "ҡанаттары" - ҡулдарын күтәреп, "суҡыш"ы менән ҡоҙаны суҡыған була һәм: "Ҡыу-ҡыу", - тип ҡысҡыра һәм ишеккә күрһәтә. Йәнәһе, хушлашырға ваҡыт, ти. Һуңынан башҡа ҡоҙаларҙы "суҡый" һәм ҡыуа башлай. Был йола башҡарылғас, ҡоҙаларҙы юл аяғы менән һыйлайҙар.

Туйҙа торна булып кейенгән персонаждың килеп сығыуы юҡҡа түгел. "Битлек - минең тәүбабам", - ти Яңы Гвинея папуастары, бында ла тәүкешеләрҙең ҡараштары сағылған булһа кәрәк. Туй - иң боронғо йола, торнаның - тотем тәүбабаның унда булыуы логик яҡтан үҙен аҡлай, сөнки ул ырыуҙың, ғаиләнең, бәрәкәттең һаҡсыһы.

"Торна морон" тигән уйынды ла тотемик йола ярсығы тип ҡарарға мөмкин. Уйын Пермь крайының Барҙа районында киң таралған булған. Йәштәр йыйылған аулаҡ өйгә торна булып кейенгән кеше килеп инә. Ул шулай уҡ киреһе әйләндерелгән тунды башын да ҡаплап кейә, ҡулына тәртешкә тота. Өйҙәгеләр:

*Торайыҡ-торайыҡ, торналар*
*Тауға табан баралар.*
*Тауға барып еткән инем,*
*К.ткә тибеп ҡуйҙылар,* - тип һамаҡлап бөткәс кенә килеп инә лә, түңәрәк яһап ултырған йәштәрҙең береһен семетә. Һуңынан ул кеше торна була.

Телгә алынған йырҙар ҙа, бейеүҙәр ҙә, этиологик легендалар ҙа, йолаларҙа һәм уйында ҡатнашҡан торна образы ла уның борондан һаҡланып ҡалған тотемик ҡошҡа табыныуҙан тороп ҡалған.

Был йәһәттән ниндәйҙер һығымталар яһағанда шуны ла әйтергә кәрәк. "Ҡош юлы" космогоник легендаһы тотем тәүбаба - торна тураһындағы иң боронғо мифтарға барып тоташа: Ҡош юлы, бәлки, тотемик тәүбабаның төнгө сәйәхәтенең эҙе булараҡ ҡабул ителгәндер. Һуңғараҡ иһә был идея үҙгәрә төшөп, бөтөнләй икенсе тәғәйенләнеш алған. Бындай этнографик параллелдәрҙе Европа, Азия, Африка, Америка халыҡтарының йолаларында ла табырға була. Сыуаш, балҡар, ҡарасай, Төмән татарҙары, хакас, яҡуттарҙа торнаны үлтереү үҙе артынан язаһын алып килә, тигәнгә ышаналар. Тыва халҡы һәм теленгиттар парлап йәшәгән торналарға һунар итмәй. Сөнки уларҙың береһен үлтерһәң, икенсеһенең ҡарғышы төшөүе бар. Күп халыҡтар торна итен ашамай. Эвенкиҙарҙа был кешене үлтереүгә һәм кеше ите ашауға тиң. Венгрҙарҙың халыҡ ижадында әйтелеүенсә, уларға яңы төйәген турул -торна күрһәтә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ*

# БАЛАЛАР НИНДӘЙ УЙЫН УЙНАЙ?

**Теге йәки был һәләтте һиҙепме, әллә ҡыҙыҡ күрепме, өлкәндәр "Ҙурайғас кем булаһың?" тигән һорауҙы беҙгә йыш бирә ине. Ҡыҙҙарҙың күбеһе - уҡытыусы, врач йә һатыусы, малайҙар тракторист, водитель йә осоусы булырға хыяллана ине.**



Уйнағанда ла ошо һөнәр эйәләре булып уйнай инек. Үҙебеҙҙән кескәйерәктәрҙе һанарға, уҡырға, яҙырға өйрәтәбеҙ. Билдә ҡуйырға журналыбыҙ, таҡтаға яҙырға аҡбурыбыҙ, указкабыҙ була торғайны. Уҡытыусы булып уйнаһаҡ, мотлаҡ иренде ҡәләм йәки буяу менән ҡыҙылға буяйбыҙ, ауылда ирен буяған берҙән-бер кеше - уҡытыусыны күргәнгәме, ул фәҡәт ирен буярға тейеш тип уйлағанбыҙ булһа кәрәк.

Врач булып уйнаһаҡ, ҡул аҫтындағы әйберҙәрҙән медицина ҡорамалдары эшләйбеҙ, укол яһайбыҙ, температура үлсәйбеҙ. "Ауырыу", әлбиттә, арабыҙҙағы иң бәләкәйе. Уның бөтә роле ауырыуға һабышып ятыу, сөнки беҙгә, өлкәнерәктәргә, шулай уңайлы. Ята торғас йоҡлап китһә, тағы ла һәйбәтерәк - мыжыған кеше юҡ, иркенләп уйнайһың.

"Өй" яһап уйнамағандар бик һирәктер. Ултырғыстарҙы теҙеп йәки өҫтәлде карауат япмаһы менән ҡороп, "өй" эшләйһең, ҡунаҡҡа саҡырышаһың. Өйҙө болартаһығыҙ тип әрләгән кеше юҡ, өлкәндәрҙең үҙ хәстәре, үҙ мәшәҡәте. Әсәй-атай, йәғни ирле-ҡатынлы булып та уйнайбыҙ. Бындай уйындар ялҡытып ебәрһә, өйҙә булһаҡ, "Һәпәләк", "Йәшенмәк" йәки башҡа зирәклеккә, отҡорлоҡҡа уйындар башлана ине, тышта иһә - "Баҫтырыш", шулай уҡ "Йәшенмәк", "Аҡ тирәк, күк тирәк", футбол, волейбол, "горитуп", икенсе төрлө әйткәндә бура һуғыу. Ә күпме һанағыс яттан белә инек: "Бер бабай юлға сыҡҡан. Тәгәрмәсе боҙолған. Уны йүнәтер өсөн нисә сөй кәрәк булған?" йәки "Шла кукушка мимо леса. А за ним три балбеса. Кук-ма, кук-ма - убирай один кулак".

Яҙын йылға аръяғы ҡарҙан әрселеү менән күрше-тирәнең бөтә балалары шунда йыйыла. Һәр өйҙә дүртәр-бишәр, етешәр-һигеҙәр бала. Кесерәктәр ҙурҙарға ҡарап, командала уйнарға, апайҙары, ағайҙары өсөн "көйөргә", өлкәнерәктәр - бәләкәйҙәрҙе, көсләләр көсһөҙөрәктәрҙе хәстәрләргә, ярҙам итергә өйрәнде.

Ә бөгөнгө балалар ниндәй уйындар уйнағанына иғтибар иткәнегеҙ бармы? Дөрөҫөн әйткәндә, уйнамайҙар бит улар, үҙ-үҙҙәренә йомолалар, сөнки хәҙер бөтәһенең дә өйөндә компьютеры, уйын приставкаһы, планшеты бар. Һәр кем тыныс ҡына үҙ мөйөшөнә барып ултыра ла компьютерға тексәйә, иң мөһиме - бер кем дә ҡамасауламаһын. Балаһы - ата-әсәһенә, ата-әсәһе - балаһына.

Балалар уйнаған уйынды атай-әсәй үҙе уйнап ҡарағаны йәки уйын барышын күҙәткәне бармы икән? Унда төҙөү, яһау, нимәлер эшләү кеүек ижадилыҡ талап иткән уйындар бик һирәк, булһа ла, улары иң бәләкәстәр өсөндөр, бәлки. Күберәге - емереү, үлтереү, юҡ итеү, еңеү, ҡасыу, баҫтырыу, тотоу, атыу, ватыу бит уларҙың. Вампир, зомби йәки терелгән мәйет, башҡа төрлө тормошта булмаған ҡурҡыныс мифик заттар образына инеүҙәр. Был уйындар психик яҡтан нығынып өлгөрмәгән балаларҙа емереү, ватыу, еңеү, юҡ итеү кеүек теләктәрҙән башҡа бер нәмә лә тәрбиәләмәй. Ошондай уйындар уйнаған балаларҙың күбеһе эргә-тирәһендәгеләргә тупаҫ, яндырай, тиҙ ҡыҙып барыусан, үсексән, түҙемһеҙ булыуы күҙәтелә. Миҫалға күптән түгел осраҡҡан күренеште килтереп үтәм. Танышыма ингәйнем, әмәлгә ҡалғандай, үҫмер улын дәрес әҙерләргә ултырта алмай аптыраған мәлгә тура килдем. Сит кеше бар тип тә уйламай, әсәһе менән телләшә: "Дәресеңде ҡара, дәресеңде ҡара тиеүегеҙ менән туйҙырҙығыҙ инде. Уйнап бөтәм дә әҙерләйем тинем бит!.." Ипләп кенә нимә уйнағаны тураһында һорашам, ҡараһаң, бөтәһе лә аңлашыла ул, тине лә, уйынын дауам итте. Баҡтиһәң, ул - ниндәйҙер супермен. Үҙе күренмәй, ә ҡулындағы бысағы ғына ялт-йолт итә. Аҙым һайын төрлө мөйөштән килеп сыҡҡан тере мәйеттәрҙе теге донъяға оҙатыу икән уйындың маҡсаты. Саҡ ҡына иғтибарһыҙлыҡ күрһәтһәң, осло тештәре күренгән ҡанһыраған ауыҙҙарын асып, зомбиҙар үҙҙәре уға ташлана. Үҫмерҙең тексәйеп, көсөргәнешле ултырыуынан күҙе ҡыҙарған, йөҙө асыулы. Был уйын балала ниндәй тойғолар уятҡанын, ниндәй сифаттар тәрбиәләгәнен үҙегеҙ аңлағанһығыҙҙыр инде.

Яңыраҡ балалар баҡсаһында тәрбиәсе булып эшләгән танышым балаларҙың коллективта, командала уйнай белмәүе тураһында зарланып һөйләп торҙо. Коллективта уйнарға ҡайҙа өйрәнһен улар? Хәҙер бит ғаиләләрҙең күбеһе бер йәки ике генә балалы. Ҡайҙан һәпәләк, йәшенмәк уйнай белһендәр? Ысынъяһау итеп йыйыштырылған өйҙә нисек баҫтырыш уйнаһындар? Ҡайҙа инде ул күршенең балаһын индереп уйнатыу? Ҡиммәтле люстра ватылмаһын, затлы келәм, йыһаз быҫранмаһын тиһәң, ысынлап та, иң яҡшыһы - балаларҙың компьютерға йәки уйын приставкаһына тексәйеп ултырыуы инде. "Баҡсаға йөрөй башлағандарға ябай ғына уйындарҙы, физик күнекмәләрҙе саҡ өйрәтеп алабыҙ, балаларҙың уларға хәтере лә, теләге лә юҡ. Уның ҡарауы, компьютер уйындарының ниндәйҙәрен генә белмәйҙәр", - ти танышым.

"Тормоштан артта ҡалаһың, ниндәй һәпәләк, ниндәй йәшенмәк ти ул бөгөнгө заманда?" - тиер кемдер. Эйе, балаларыбыҙ, һис шикһеҙ, алға ҡарап йәшәргә, заман менән бергә атларға тейеш. Ярай, беҙ уйнап үҫкән уйындарҙы уйнамаһындар ҙа, ти. Әммә 3-4 сәғәт буйы компьютер уйыны уйнап ултырған бала һәр атай-әсәйҙе һағайтырға тейеш. Интернетта уйнап еңелеп, үҙ-үҙенә ҡул һалған үҫмерҙәр аҙ булманы бит үткән йылдарҙа...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

*ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?*

# ЯҠШЫРАҠ БАҺАҒА ЫНТЫЛ!

**Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан тапшырыу өсөн 12 сентябргә тиклем ғариза бирергә мөмкин, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Мәғариф министрлығынан.**

Ағымдағы йылдың сентябрь-октябрь айҙарында Берҙәм дәүләт имтиханында ҡатнашыусыларҙың ҡайһы берҙәре математиканан һәм рус теленән имтихандарын яңынан тапшыра ала. Быйыл көҙ Берҙәм дәүләт имтиханын мотлаҡ предметтарҙан "икеле" билдәһе алған һәм аттестатһыҙ ҡалған уҡыусылар, һөҙөмтәләрен яҡшыртыу өсөн рус телен һәм математиканы ҡабаттан тапшырырға теләгән былтырғы сығарылыш класс уҡыусылары бирә.

Математика буйынса БДИ 26 сентябргә тиклем ҡабул ителә. Башҡортостан Мәғариф министрлығының дәүләт йомғаҡлау аттестацияһы һәм белем сифатын баһалау бүлеге етәксеһе Жанна Миникәева әйтеүенсә, был көндә төбәктә имтихан үткәреүҙең дүрт пункты асыла: икәүһе - Өфөлә, Салауатта һәм Әбйәлил районының Аҫҡар ауылында - берәр.

29 сентябрҙә - рус теле, баш ҡалала бер имтихан үткәреү пункты эшләйәсәк; 9 октябрҙә - математика һәм рус теле.

Көҙгөһөн имтиханды ҡабаттан тапшырыу быйыл юғары уҡыу йортона инеү хоҡуғын бирмәй, әммә был һөҙөмтәләр киләһе йылда ғәмәлдә буласаҡ. Көҙ көнө Берҙәм дәүләт имтиханын ҡабаттан тапшырыу өсөн теркәлеү урындары тураһында мәғлүмәт Башҡортостандың Мәғариф министрлығы сайтында бирелгән.

✓ *"Мөхәмәтхан Ҡулаев - тейешле дәрәжәгә күтәрергә хаҡлы шәхесебеҙ. Уның беренсе автономиябыҙҙы төҙөү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыуын иҫәпкә алып, Өфөнөң бер урамына исемен биреп мәңгеләштереү яҙыҡ булмаҫ ине."*

*ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ*

**Ҡайһы бер кешеләргә Хоҙай оло, йөкмәткеле, тынғыһыҙ тормош насип итә, хатта улар иңенә киләсәк быуындарҙың яҙмышын хәл иткән ваҡиғалар өсөн яуаплылыҡ йөкмәтә. Айырым берәүҙәр төплө белем алып, ауырлыҡтарҙа сынығып, бындай тормош юлын үҙҙәре һайлай һәм бер ниндәй ҡаршылыҡтарға ҡарамай, үҙ халҡына хеҙмәт итеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе Мөхәмәтхан Ҡулаев тураһында булыр һүҙебеҙ.**

# МӨХӘМӘТХАН ҠУЛАЕВ



Ул ваҡытта илдә бик киҫкен сәйәси һәм хәрби ваҡиғалар бара. Мстислав Ҡулаевҡа Башҡортостан автономияһы яҙмышын хәл итергә тура килә. Ул 1919 йылдың 20 мартында Владимир Ленин менән Башҡорт автономиялы республикаһын ойоштороу тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуя. Унан алда Сталин менән Әхмәтзәки Вәлиди автономиялы Башҡортостан һәм уның сиктәре хаҡында һөйләшкән була. 1919 йылдың 20 мартында РСФСР-ҙың Халыҡ комиссарҙары советы ултырышында Башҡортостан автономияһы раҫлана. Килешеүҙең аҙаҡҡы тексына Сталин, Ҡулаев, Халиков һәм Бикбаув ҡул ҡуя. Был документ 23 мартта тулыһынса "Известия" гәзитендә баҫылып сыға. 1919 йылда килешеүҙән һуң Ҡулаев Ҡаҙанға ғаиләһе янына ҡайтып килергә рөхсәт ала. Ҡайтҡас, тиф менән ауырып китеп, дауаханаға эләгә һәм оҙаҡ ҡына дауалана. Ошоноң менән Мстислав-Мөхәмәтхан Ҡулаевтың сәйәси эшмәкәрлеге тамамлана.

Тарихи шәхес, билдәле табиб Мөхәмәтхан Ҡулаевҡа мәғрифәтсе бурысын да атҡарырға яҙа. Ул башҡорт теленең фонетик төҙөлөшөн һәм грамматикаһын ентекле өйрәнә, фольклор әҫәрҙәрен теркәй, рус әҙәбиәте классиктарының хеҙмәттәрен башҡорт теленә тәржемә итә. Һөҙөмтәлә рус графикаһы-кириллица нигеҙендә башҡорттар өсөн тәүге алфавит һәм әлифба төҙөй. Ауыл мәҙрәсәһендә ғәрәп, Ырымбур гимназияһында латин, Ҡаҙан университетында кириллица өйрәнгән Мөхәмәтхан Ҡулаев башҡорт алфавиты өсөн иң ҡулайлыһы кириллица тигән һығымтаға килә.

1912 йылда Ҡаҙанда Мстислав Ҡулаевтың тәүге китабы донъя күрә. Ул "Әйтелеш, һөйләшеү нигеҙҙәре һәм башҡорттар өсөн алфавит" тип атала. Ул төҙөгән алфавит 34 хәрефтән тора. Шулай итеп, ул иң беренселәрҙән булып рус графикаһына күсеүҙе яҡлап сыға. Ҡаҙанда уның был идеяһын ҡабул итмәйҙәр. Был турала Ҡулаев үҙе былай тип яҙа: "Мәғариф буйынса халыҡ комиссарының һығымтаһы мине аптыратманы ла, борсоманы ла. Эшемде артабан дауам иттем. Һөҙөмтәлә "Башҡорт теленең өндәре тураһында" яңы китап яҙҙым".

1919 йылда Ҡулаев, камиллаштырып, "Әләпей" әлифбаһын баҫтыра. Телсе булараҡ, әлифба өҫтөндә генә эшләп ҡалмай, ә грамматикаға ла туҡтала һәм "Башҡорт теле ҡылымдары" китабын баҫтырып сығара. Был хеҙмәте үҫәргән башҡорттары һөйләшенә таянып яҙылһа ла, ул тәүге тәжрибә булыуы менән ҡиммәтле. Үҙе лә хәтирәләрендә былай тип билдәләй: "Башҡорт теле тураһындағы хеҙмәтем 1873-1895 йылдарҙағы үҫәргән башҡорттарының һөйләш телмәренә ҡағыла".

Мстислав Ҡулаев Ҡаҙанда 1921 йылда кешенең анатомияһы, физиологияһы һәм гигиенаһы хаҡында татар телендә терминология һүҙлеге әҙерләүҙә ҡатнаша. 1943 йылда медицина өлкәһендәге фиҙаҡәр хеҙмәте өсөн "Һаулыҡ һаҡлау отличнигы" билдәһе менән бүләкләнә.

Халҡыбыҙҙың арҙаҡлы улы Мөхәмәтхан Сәхипкирәй улы Ҡулаев 1958 йылда вафат була, Ҡаҙанда ерләнә. Үҙенең шәхси архивын, ҡулъяҙмаларын Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына тапшырырға васыят әйтеп ҡалдыра. 1963 йылда институттың ул ваҡыттағы директоры Әхнәф Харисов Ҡаҙандан ғалимдың ике тоҡ документтарын алып ҡайта. Архивын тәртипкә килтереүҙә, тәүге теркәүҙәрҙе башҡарыуҙа Зиннур Ураҡсин да ҡатнаша һәм берәй әҫәр яҙыу теләге менән яна. Ниһайәт, 2006 йылда ул "Тәҙрә уйыусы" тигән повесын ижад итә.

Әлеге көндә Ҡулаевтың фонды Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Ғилми архивында һаҡлана һәм үҙ тикшеренеүсеһен көтә, яңы күҙлектән ҡарап баһалауҙы талап итә. Шулай уҡ уның "Үҫәргән башҡорттары теле грамматикаһы", "Башҡортса-русса һүҙлек" тигән әле лә донъя күрмәгән ҡулъяҙмалары ла бар. Алты мендән ашыу һүҙ тупланған хеҙмәтен диалектологик һүҙлек итеп баҫтырыу ҙа мөһим булыр ине.

Академик Зиннур Ураҡсин 2006 йылда: "Мөхәмәтхан Ҡулаев - тейешле дәрәжәгә күтәрергә хаҡлы шәхесебеҙ. Сәйәси эшмәкәрлеген иҫәпкә алмағанда ла, башҡорт өсөн алфавит, дәреслектәр төҙөп, халҡының аң-белемгә күҙен асырға тырышҡаны, күпме көсөн сарыф иткәне өсөн генә лә быға лайыҡ ул. Уның беренсе автономиябыҙҙы төҙөү тураһындағы килешеүгә ҡул ҡуйыуын иҫәпкә алып, Өфөнөң бер яңы урамына исемен биреп мәңгеләштереү һис тә яҙыҡ булмаҫ ине. Быға иманым камил", - тип яҙғайны. Инде был ағайыбыҙ ҙа гүр эйәһе, иманы юлдаш булһын, әммә уның әйткән фекере бөгөн дә актуаль, әле лә әһәмиәтен юғалтмаған.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**
**(Аҙағы. Башы 34-се һанда).**

*БЫЛ ҠЫҘЫҠ!*

# ҠАШМАУ...

## Дрезденға барып етмәгән

**Республикабыҙҙың Үҙәк тарих архивында бик ҡыҙыҡлы документ һаҡлана. Ул Ырымбур генерал-губернаторының канцелярия фондынан алынған. "Император рус йәмғиәтенә башҡорт һәм мишәр ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейемен тапшырыу", тип атала документтың исеме. 1859 йылдың 29 мартында башланған был эш ошо уҡ йылдың 24 октябрендә тамамланған. Ләкин документтың тулы атамаһы уның йөкмәткеһен асып етмәй.**



*Ҡашмау һәм һаҡал кейгән мең ырыуы башҡорто.*

Баҡтиһәң, хат алышыуҙа билдәле рус диңгеҙсеһе, географ Федор Петрович Литке һәм Ырымбур генерал-губернаторы Александр Андреевич Катенин ҡатнашҡан икән. Адмирал Литке 1859 йылдың 19 мартында яҙған тәүге хатында Катениндан Дрезденда ғы король китапханаһы директоры, немец ғалимы Клемға Рәсәйҙә йәшәүсе ҡәбиләләрҙең көнкүреш әйберҙәрен йыйыуҙа ярҙам итеүен һорай. Һүҙ башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының баш кейеме ҡашмау тураһында бара.

Александр Катенин Башҡорт ғәскәрҙәре командующийы Синбугинға ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. 19 июлдә яҙған хатында подполковник Синбугин ошо һорау буйынса йөҙбашы Биишевҡа мөрәжәғәт итеүен белдерә. Биишев ҡашмауҙы һатырға ризалашмай. Ләкин кантон башлыҡтары Ҡансурин менән Биксурин шундай уҡ ҡашмауҙы эшләтеп бирергә вәғәҙә итә. Уның хаҡы саф көмөш менән 350 һум булырға тейеш була. Сөнки ҡашмау эшләү өсөн 5 фунт мәрйен һәм 6 фунт көмөш тәңкә кәрәк икән. Ләкин Литке бындай хаҡҡа ризалашмай. "Хаҡтың юғары булыуы сәбәпле, Император рус йәмғиәте Советы Дрезден музейы өсөн был әйберҙе һатып ала алмай.

3 октябрь, 1859 йыл. Ф. Литке", тип яҙылған һуңғы хатта.

Дрезден музейына башҡорт халыҡ ижады ҡомартҡыһы барып етмәүе йәл, әлбиттә.

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Элекке ваҡыттарҙа башҡорттарҙа, төньяҡ-көнбайыш Башҡортостандан тыш, рус мейестәре бик аҙ була, икмәк бик уңмай йәки бөтөнләй бешерелмәй, уның урынына көлгә күмеп көлсә бешерәләр. Шәкәр бары тик бай ғаиләләрҙә генә була. Әлеге ваҡытта һәр башҡорт ғаиләһендә яҡшы бешерелгән икмәк төп ризыҡ булып тора. Шулай уҡ шәкәр ҙә һәр колхозсы ғаиләһендә бар һәм ул да төп урынды биләй.

Баҡсасылыҡ үҫешеү менән картуф һәм башҡа йәшелсә-емеш башҡорт халҡының менюһында ныҡлы урын ала һәм уны төрләндерә, туҡлыҡлы һәм сәләмәтерәк итә.

Бигерәк тә хужалыҡ һауыт-һабаһындағы һиҙелерлек үҙгәрештәрҙе билдәләргә кәрәк. Элек киң таралған күн һәм ағас һауыт-һаба урынын хәҙер быяла һәм фарфор ҡашығаяҡ, эмалле һәм алюмин кәстрүлдәр алып тора һ.б.

Йәйләүҙәр бөтөү менән ваҡытлыса йәшәү торлаҡтары ла юҡҡа сыға. Башҡорт ауылдарының йөҙө үҙгәрһә лә, нигеҙҙә йорт-ҡура шул уҡ ҡала.

Әгәр XX быуаттың беренсе сирегендә башҡорт ауылдарында торлаҡ төҙөлөшө шул килеш һаҡланһа, йәмәғәт биналары: мәктәптәр, дауаханалар, балалар баҡсалары, интернаттар, ясли биналары, ауыл советтары, колхоз идаралары, клубтар, ауыл ҡулланыусылар йәмғиәте магазиндары ныҡлы итеп төҙөлә.

Ауылдар эргәһендә яңы типтағы малсылыҡ фермалары (**һүрәт**), иген һаҡлау урындары һәм революцияға тиклем башҡорт ауылдарында булмаған ярҙамсы предприятиелар һалына.



Әгәр башҡорттарҙың торлағы архитектура буйынса артыҡ үҙгәреш кисермәһә лә, яңы төҙөлгән йорттар йыйнағыраҡ, йәғни уларҙың эсендә һәм йыйыштырыуҙа һиҙелерлек үҙгәрештәр күҙәтелә.

Йорттарҙың ҡарттар йәшәгән бер өлөшөндә элеккесә ашау һәм йоҡлау урыны булған һике һаҡлана. Әлеге ваҡытта башҡорт өйөн ике яҡҡа йәки ике бүлмәгә - аш өйө һәм ҡунаҡ өйө тип бүлеү күҙәтелмәй. Хәҙерге торлаҡта ололар өсөн һәм йәшерәк оло быуын өсөн ике яҡҡа бүлеү йышыраҡ осрай. Әгәр ҡарттар яғында барыһы ла элеккесә ҡалһа, йәшерәктәр яғы ҡаласа йыйыштырыла. Уларҙа һикене карауаттар, ултырғыс-өҫтәлдәр алмаштыра. Өҫтәл өҫтөндә туҡылған ашъяулыҡ урынына фабрикала етештерелгән клеенкалар йәки эскәтерҙәр ята. Элекке һуғылған йәки ситса шаршауҙарҙы карауаттар эргәһендәге стенаға элеү йәки рус крәҫтиәндәре кеүек карауат өҫтөндәге шаршау өсөн файҙаланалар.

Бындай бүлмәләрҙә көҙгө, будильник ултырған өҫтәлдәр ҙә осрай. Стеналарҙа юлбашсыларҙың - тәү сиратта, Лениндың һәм Сталиндың портреттары, ә быяла аҫтында туған-тыумасаның, таныштарҙың фотолары, төҫлө открыткалар, гәзит-журналдарҙан ҡырҡып алынған материалдар урынлаштырыла, китап кәштәләре эленә. Тәҙрәләргә бик һирәк селтәрле, бик һирәк тюль аҡ ҡорғандар эленә, тәҙрә төбөнә гөлдәр ултыртыла.

Совет осоронда үҫкән йәштәрең өйө лә тап шулай йыйыштырыла: элекке башҡорт ғаиләһе өсөн хас булған Туланың еҙ самауырын һәм сәй эсеү өсөн ваҡ касаларҙы, еҙ ҡомғандарҙы күрмәҫһегеҙ. Уларҙы заманса никелле самауырҙар һәм ҡулйыуғыстар алмаштыра. Теген машинкаһы һәм патефон һирәк кенә йорт йыһаҙын тулыландырып тора. Мейес тә яңыса һалынған.

**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - тыумышы менән Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Башҡортостан фәнни-етештереү ветеринария лабораторияһы директоры урынбаҫары, ветеринария фәндәре кандидаты, доцент Азамат Мөхтәр улы БУКАНОВ булыр. Азамат Мөхтәр улы күптән түгел Әлшәй районында үткән Ҡымыҙсылар һәм йылҡысылар республика конкурстарында баһалама ағзаһы булараҡ ҡатнашты. Сара һуңынан ул донъм ҡымыҙсылыҡ, йылҡысылыҡ тураһындағы ҡайһы бер фекерҙәре менән уртаҡлашты. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**

# ҠЫМЫҘ, ҠОРОТ, ҠАҘЫЛЫҠ...

## Аҙыҡ ҡына түгел, дауа ла

### Ҡымыҙмы, ҡымыҙ эсемлегеме?

Ҡымыҙсылар конкурсында мин Башҡортостан ветеринария лабораторияһы хеҙмәткәре булараҡ ҡатнаштым һәм конкурс сиктәрендә тәҡдим ителгән продукцияның сифатын, хәүефһеҙлеген ҡараным. Күптәр тармаҡ стандартына (ОСТ) һылтанып, кәзә һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ эсемлектәренең ярлығына "Ҡымыҙ" тип яҙа ла ҡуя. Был дөрөҫлөккә тап килеп етмәй. ОСТ стандарттарына һылтаныу - бер, ә был эсемлектең 33-сө регламент талаптарына яуап биреүе - икенсе һәм мөһимерәк мәсьәлә. Әммә күптәр был регламентты белмәй, ә уның урынына элегерәк ғәмәлдә булған, әммә хәҙер ғәмәлдән сығарылған 88-се регламентты нигеҙ итеп ала. 33-сө регламентта ҡымыҙ һәм ҡымыҙ эсемлеге ике төрлө эсемлек булараҡ билдәләнә. Ҡыҫҡаса әйткәндә, яңы регламент буйынса бейә һөтөнән бешелгән эсемлек - традицион рәүештә "ҡымыҙ" тип, ә кәзә, һыйыр һөттәренән әсетеп яһалған эсемлек иһә "ҡымыҙ эсемлеге" тип аталырға тейеш. Ошондай уҡ хәлдә беҙ һөт продукциялары баҙарында ла күрәбеҙ.

Бөгөн магазинда һатылған һөттәрҙең береһе лә һөт түгел. Улар "һөт эсемлеге" тип аталырға тейеш. Пастеризацияланған 100 процентлы натураль һөт иң күп тигәндә 7 көн һаҡлана. 12 көн, 1 ай, 6 ай һаҡланғандары - һөт түгел, ә һөт эсемлеге. Һуңғылары ни өсөн улай яҙа әсемәй? Сөнки уларға консервант өҫтәлә.

Башлаған һүҙҙе дауам итәйек. Республикабыҙ райондарындағы ҡымыҙ етештереүселәрҙең дә был ҡағиҙә ризаһыҙлыҡ белдереүенә күп тапҡырҙар шаһит булғаным бар.

### Кәзә һөтө яҡшыраҡмы, бейә һөтөмө?

Кәзә ҡымыҙын тәмләп ҡараған ҡайһы берәүҙәрҙең "Үәт, исмаһам, шәп!" тип маҡтағанын ишеткәнем бар. Ғилми хеҙмәткәр булараҡ, шуны әйтергә бурыслымын: теләһә ниндәй ҡымыҙ эсемлеге файҙаһы буйынса ысын ҡымыҙ менән ярыша алмай. Ни өсөн тигәндә, ҡымыҙҙа кислота бар. Пектин кислотаһы тип атала ул. Ә был кислота бары тик бейә ҡымыҙында ғына барлыҡҡа килә. Һыйыр, кәзә һөтөнән бешелгән ҡымыҙ эсемлектәрендә ул булмай. Пектиндың файҙаһы нимәлә, тиһегеҙ, ул организмға зыян килтерә торған бактерияларҙы юҡ итә, ә файҙалы микрофлораны тере ҡалдыра. Тимәк, пектин төрлө ауырыуҙарға ҡаршы көрәшә, тиган һүҙ. Тәү сиратта, әйтәйек, ашҡаҙан, үпкә ауырыуҙарынан яфаланғандарға ярҙамға килә. Бейә ҡымыҙындағы был файҙалы матдә туберкулез сиренән дә һаҡланырға ярҙам итә. Йылҡы малы бер ваҡытта ла был сир менән ауырымай.

### Талаптар ҡаты

Беҙҙең лабораторияның ҡымыҙ менән бәйле эшмәкәрлеге тураһында ла һөйләрһығыҙ. Беҙ ҡымыҙҙың стандартҡа тап килеүен тикшерәбеҙ, ошоно күрһәткән сертификаттар бирәбеҙ. Йәғни, беҙ ҡымыҙҙы аккредитациялаусы төп орган булып торабыҙ. Үндай органдар республикала икәү генә. Береһе - беҙҙең лаборатория, икенсеһе - Өфөнөң Шәфиев урамындағы Гигиена һәм эпидемиология лабораторияһы. Беҙҙең лабораторияға малсылыҡ, үҫемлексәлек, ҡортсолоҡ, балыҡсылыҡ өлкәләрендәге бөтөн продукцияны ла килтерергә була. Беҙ уларҙың сифатлы һәм хәүефһеҙ икәнлеген тикшереп, протокол яҙып бирәбеҙ. Бөгөнгө техник регламенттың талаптары бик ҡаты. Унда Санпин талаптары ла, ГОСТ талаптары ла бар. Бөгөнгө көндә күп фермерҙар, эшҡыуарҙар техник регламент талаптарын үтәмәй. Теге йәки был аҙыҡтың, эсемлектең сифатына шик тыуһа, уның техник регламентҡа тап килеүен белдергән сертификатын һорарға онотмағыҙ.

### Сынғыҙхан сәләмәтлегенең сере

Әле күптән түгел монгол императорҙары тураһында төшөрөлгән күп сериялы бер фильм ҡараным. Фильмда Сынғыҙхандың, уның ғәскәренең байрамдарҙа әсегән ҡымыҙ эсеүе телгә алына. Тап ҡымыҙ эсеүҙәре арҡаһында ла уның ғәскәре ауыр шарттарҙа сыҙамлы кисергәндәр. Монголдар минә башҡорттарҙы хәтерләтте. Монгол ғәскәренең артынан бер көтөү ҡуй малы, бер төркөм эшсе халыҡ эйәреп йөрөгән. Улар һарыҡ, йылҡы ите ашаған һәм ҡымыҙ эскән. Барыһы ла юл шарттарында атҡарылыуын иҫәпкә алғанда, Сынғыҙхандың даһилығына тағы бер тапҡыр инанаһың. Ни өсөн икәнлеген киләһе бүлектә аңлатырмын.

### Ит ашағас, ҡымыҙ уртла

Бөгөнгө көньяҡ-көнсығыш райондарҙа йәшәүсе башҡорттарҙың көнкүрешендә һарыҡ, йылҡы көтөүе айырылғыһыҙ. Ошо төбәктә йәшәгән ырыуҙар элек ярым күсмә тормош алып барған. Бойҙайҙы ул ултыраҡ тормош алып барыусы ырыуҙарҙан иткә алыштырып алған. Йәйләү шарттарында күберәген сөсө икмәк бешергән. Әммә аҙыҡтың төп өлөшөн әлеге лә баяғы ит биләгән. Ә итте саманан тыш күп ашау ашҡаҙанға ныҡ көсөргәнеш тыуҙыра. Итте организм өсөн файҙалы микроэлементтарға тарҡатыу өсөн ферменттар кәрәк. Шул ферментты ҡымыҙ тулыландырған да инде. Башҡорт ҡымыҙ эсеп, ул ҡымыҙ ашҡаҙанындағы итте эшкәртергә булышлыҡ иткән. Шулай итеп, боронғолар итте һуңғы файҙалы элементына тиклем үҙләштерә белгән. Шуға ла ашҡаҙаны шәп булған уның. Хәҙер беҙ итте нисек ашайбыҙ? Ҡоролай ашабыҙ. Иң ауыр ит һаналған һыйыр итен генә алайыҡ. Ул йомшаҡ түгел. Бигерәк тә ологайған һыйыр малының ите ҡаты була. Шундай итте ашағандан һуң тән уртаһында ашҡаҙан ауырта башлай. Ни өсөн ауырта? Сөнки ит ашҡаҙандан эсәктәргә китмәй. Артабан китер өсөн фермент кәрәк. Ә фермент нимә була? Бауырҙан кислота бүленә лә, итте бәләкәй өлөштәргә тиклем тарҡата. Шуның өсөн башҡорттар борон-борондан ит менән ҡушып, ҡымыҙ эскән.

### Ит тураһында

Минән ни өсөн төрлө халыҡтарҙа теге йәки был итте ашау тыйылыуы тураһында ла һорайҙар. Мәҫәлән, ни өсөн славян халыҡтары йылҡы итен ашамай? Сөнки улар атты изге хайуан тип һанай. Көнбайыш Европа халыҡтарында ла йылҡы итен ашаусылар ҙа, ашамаусылар ҙа бар. Мәҫәлән, француздар йылҡы итен ашай, ә инглиздар, немецтар - ашамай. Теге йәки был йорт хайуаны культы, йәки, киреһенсә, ул хайуан итен ашауға табу һалыныуы, ғәҙәттә, дини ҡанундар менән аңлатыла. Фәнни күҙлектән ҡарағанда был күренештәрҙең сәбәбен аңлауы ауыр түгел. Өсөнсө миҫалды - мосолмандарҙың сусҡа итен ашауҙан тыйылыуын ҡарайыҡ. Физиологик йәһәттән был хайуандың эске ағзалары кешенекенә бер ни тиклем оҡшаш. Шунлыҡтан, сусҡалар кешеләр араһында таралған ауырыуҙар менән яфалана, уны тарата. Элек, мәҫәлән, сусҡаларҙың таҡун (чума) эпидемияһын таратыуы уларҙы аҫырауҙы тыйыуға килтергән бер сәбәп булған. Ваҡыт үтеү менән көнкүрештә тыйылған был әйбер дин өлкәһенә лә үтеп инеп, нығынған. Бөгөнгө көн ысынбарлығынан сығып ҡарағанда, минең уйымса, сусҡаға ваҡытында вакцинация яһалған, ул яҡшы шарттарҙа үҫтерелгән икән, хатта сусҡа итенең дә зарары юҡ. Йәғни, әрмелә беҙҙең егеттәргә сусҡа итен ашарға тура килһә, бынан трагедия яһарға кәрәкмәй. Былай ҡарағанда ла сусҡа ите шул тиклем йомшаҡ, һығылмалы ит. Уны эшкәртеү ашҡаҙанға ла еңелерәккә тура килә. Ул иттән бешерелгән шешлек тә башҡа ит менән сағыштырғанда һәйбәтерәк килеп сыға. Әгәр был ит тураһындағы һүҙ һеҙҙең дини ҡараштарығыҙға ҡаршы килә икән, мин уны бер кемгә лә көсләп таҡмайым. Бары тик лаборатор тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһенә таянып, был иттең кеше һаулығы өсөн зыянһыҙ икәнлеген еткерергә теләүемдән генә был темаға туҡталдым. Файҙа тигәндәй, йылҡы итенә еткән ит юҡ инде ул барыбер. Йылҡы итендә холестерин, йәғни майҙан бүленеп сыҡҡан фермент булмай. Тимәк, йылҡы ите ашаған кеше йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарына бирешмәй.



### Башҡорт халыҡ медицинаһы

Кемдер: "Беҙҙең ата-бабалар был ризыҡтарҙың файҙаһын нисек иҫәпләп сығара алды икән?" - тип тә уйлап ҡуйғандыр. Һуңғылар менән дә килешергә була. Ни тиһәң дә, тәбиғәте менән табип та булған ул башҡорт. Юҡҡа ғына рус зыялылары, табиптарҙан өҫтөнөрәк күреп, башҡорт халыҡ медицинаһына мөрәжәғәт итмәгәндер бит. Ошо фекерҙән сығып, тағы шуны әйтке килә: әгәр иҡтисади көрсөк артабан бөтөн дәүләт, һаулыҡ һаҡлау институттарын эшләктән сығара ҡалһа (әлбиттә, беҙ быны теләмәйбеҙ), беҙҙең халҡыбыҙ һис юғы медицина препараттары етешмәүҙе еңелерәк кисерәсәк. Сөнки уның баҡсаһы ла, дарыуы ла эргәһендә, тигән һыҙымта яһағы килә. Ҡымыҙы, ҡаҙыһы, йылҡы ите, ҡороты, балы бар бит халҡыбыҙҙың.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Бөгөн беҙ милли ризыҡтарыбыҙ тураһында фәнни күҙлектән сығып һүҙ алып барҙыҡ. Кемдер үҙенең белем багажына яңы фактар өҫтәгәндер, кемдер быға тиклем ишеткән, белгәнен хәтеренә нығытҡандыр. Тағы бер генә һүҙ ҡалған икән. Халҡыбыҙҙың бик шәп һыҙаты бар: ихласлыҡ. Ике- өс сәғәт элек кенә танышҡан ят кешене кем үҙенең баҙына алып төшөп, ғүмер буйы йыйған байлығын күрһәтһен? Бары тик беҙҙең кеше генә былай ихласлыҡҡа барыусан. Әле бына бөгөнгө геройыбыҙ ҙа "хазина күрһәтәм", тип, үҙ йортона саҡырҙы. Йорттоң иң аҫҡы өлөшөндә, хужаның китапханаһында, меңәрләгән китап һаҡлана. Ул китапханала, башҡа авторҙарҙың хеҙмәттәре тупланмаларынан тыш, хатта Лениндың да бөтөн яҙмалары бар. Ғалим был коллекцияны йәш сағында уҡ уҡып сыҡҡан. Ике ҡатлы коттедждың аҫты - китапхана, өҫтәхана ролен үтәй, ер өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан ике ҡаты иһә ял һәм эш урыны. Һәр ҡатта йыуыныу бүлмәһе, бәҙрәф-ванналар бар. Урамда ҡош-ҡорттоң ниндәйе генә юҡ: тауыҡтарҙың, ҡаҙҙың, өйрәктең, күркәләрҙең әллә нисәмә төрө йөрөй. Баҡсала һыу һиптереү системаһы менән йыһазландырылған йылытҡыс (теплица) күҙ яуын алып ултыра... Бер төймәгә баҫһаң, система үҙенән-үҙе төрлө яҡҡа һыу һиптерә башлай. Барыһы ла Азамат Букановтың үҙ ҡулдары менән эшләнгән. Әйткәндәй, теманан бер аҙ ситләшеп, геройыбыҙҙың ниндәй хужа булыуын тасуирлай башлауыбыҙҙың сәбәбе етди. Киләсәктә Азамат Мөхтәр улынан, нисек уңышлы йорт хужаһы булырға, тигән темаға ла фекерҙәре менән уртаҡлашыуын һорап, уның ризалығын алдыҡ, тигән һүҙҙе генә уҡыусыларыбыҙға еткерге килә. Тимәк, осрашыуҙар алда буласаҡ әле.**

✓ Тәбиғи ҡурайға, үлән ҡурайға килгәндә, ул икенсе төрлө тауыш сығара. Ағас ҡурайҙың тауышын нисек шул кимәлгә еткерергә - беҙҙең алда торған иң ҙур, иң мөһим мәсьәлә шул.



**Бөгөнгө әңгәмәсебеҙ - Баймаҡ ҡалаһында тыуып үҫеп, әлге көндә Сибай ҡалаһында йәшәүсе республикаға билдәле оҫта Салауат БАЙМӨХӘМӘТОВ. Ул булмышына тап килерлек үҙ мөхите менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала торған кеше. Сөнки моң сығанағы менән эш итә бит ул. Оҙаҡ йылдар таусы хеҙмәтен атҡарғандан һуң, Салауат Усман улы моң иленә тартылып, донъяға моң таратыусы уйын ҡоралдары (ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡумыҙ, ятаған) яһарға тотона. Уның менән әңгәмә барышында һеҙ башҡорт музыка ҡоралдарын яһау серҙәре менән дә танышырһығыҙ, оҫтаны борсоған ошо өлкәләге ҡайһы бер мәсьәләләр тураһында ла ишетерһегеҙ. Һүҙ - ҡунағыбыҙға.**

# ҠУРАЙ - АРБУЙЛЫ УЙЫН ҠОРАЛЫ,

## ҡурайсы ла иң абруйлы музыкант



### Тормошомдо ҡырҡа үҙгәрткән хәл...

Тормош юлым мине сит тарафтарҙа: Үзбәкстанда ла, Ҡаҙағстанда ла, Тажикстанда ла күп йөрөттө. Себерҙә лә булынды. Һөнәрем буйынса - таусымын. Оҙаҡ йылдар таусы булып эшләнем. 1984 йылда үҙебеҙҙең яҡҡа - Баймаҡҡа ҡайттым. Шул осорҙа Рауил Хәсәнов исемле егет: "Салауат ағай, һинең ҡурай эшләрлек мөмкинлегең бармы?" - тип һорай ҡуйҙы. Ул замандарҙа ҡурайҙа уйнау, ҡурай эшләү яңы ғына тергеҙелә башлағайны шул. Телевидениела ла ҡурай сығыштары шул осорҙа йышыраҡ эфирға сығарылды. Рауил ҡустының был һорауына: "Эшләйбеҙ уны", - тип яуап бирҙем һәм ҡырылған ағастан, йәғни шпондан тәүге ҡурайымды яһап та ҡуйҙым. Шул осорҙа Өфө дәүләт сәнғәт академияһында думбыра эшләү тураһында ла әңгәмәләр әүҙем генә бара ине. "Быны ла эшләргә була түгелме ни", тип, думбыра эшләүгә лә дәртләнеп киттем. Музыка мәктәптәренән боҙолған итальян мандолиналарын алып, уларҙың нисек эшләнгәнлеген өйрәнеп (ниндәй елем менән йәбештерергә кәрәклеген үҙем былай ҙа белә инем), беренсе думбырамды эшләп тә ҡуйҙым. Әйтергә кәрәк, ошо беренсе думбырам тәжрибә туплағас эшләгән ҡайһы бер думбыраларҙан да шәберәк килеп сыҡҡан икән. Был думбыраны мин әле лә ҡәҙерләп һаҡлайым. Әлеге көнгә 120-130-лап ошо ҡыллы ҡоралды эшләгәнмендер. Һуңғы ике йыл эсендә генә эшләгәнем өс тиҫтәнән ашты. Данлыҡлы скрипка оҫтаһы Страдивари үҙ ғүмерендә ярты мең скрипка эшләгән. Мин дә, биш йөҙгә үк барып етмәһә лә, дүрт йөҙгә еткерермен, тигән ниәтем бар. Страдивари скрипкаларҙан тыш гитаралар ҙа эшләгән. Гитара эшләп биреүемде һорап мөрәжәғәт иткәндәре лә булды, ләкин мин уны эшләмәҫкә ҡарар иткәнмен. Бының ике етди генә сәбәбе лә бар. Беренсенән, гитараның милли уйын ҡоралыбыҙ булмауы, икенсенән, кибеттәрҙә уларҙың былай ҙа тулып ятыуы мине туҡтата. Мин үҙ халҡыбыҙ ҡоралдарын эшләү яғында. Мәҫәлән, күптәргә таныш булмаған ятағанды ла эшләгәнем булды. Нимә ул ятаған, тиһегеҙҙер. Бөтөн төрки халыҡтарында ла киң таралыу алған был музыка ҡоралын рустар "гусли" тип йөрөтә. Шулай итеп, минең ҡурай, думбыра эшләй башлауыма ябай ғына һорау сәбәпсе булды. "Ағай, һинең ҡурай эшләрлек мөмкинлегең бармы?" тигән һорау. Тормошта кешенең алдына ошондай хәл иткес тәҡдимдәр, һорауҙар йыш тап була. Уларҙың һәр береһенә ыңғай яуап бирә лә алмай кеше. Гел генә ыңғай яуап биреү, бәлки, кәрәкмәйҙер ҙә. Ә шулай ҙа әҙәм балаһы, бысраҡ һыу, тип, юлында осраған күпме йәншишмәне урап, йә ашатлап үтә икән?..

### Өфөнән Сибайға күсеүем...

1997 йылда Айрат Ҡобағошов менән Зиннур Нурғәлин мине Өфө дәүләт сәнғәт академияһына оҫтаханаға эшкә саҡырҙы. Ул оҫтаханала 4 йыл эшләнем. 2001 йылда Сибайҙа үткән "Ирәндек моңдары" йыр бәйгеһендә үҙем яһаған халыҡ музыка ҡоралдарын күргәҙмәгә ҡуйғайным, уларҙы Сибай ҡалаһының ул ваҡыттағы хакимиәте башлығы Зиннур Йәрмөхәмәтов күреп ҡалып, минең кем булыуым, ҡайҙа эшләүем менән ҡыҙыҡһынды. Өс бүлмәле фатир менән тәьмин итәсәген белдереп, Сибайға эшкә саҡырҙы. Миңә Сибайға күсергә тура килде. Өфөнән дә тәҡдимдәр булды, оҫтахана асабыҙ, кире кил, тинеләр. Вәкил ағай Шөғәйепов менән бергәләшеп асырбыҙ ул оҫтахананы, тигән уйыбыҙ ҙа бар ине, ләкин бина ла, мөмкинлек тә булманы. Сибайҙа фатир бирҙеләр. Өс бүлмәле фатирҙың бер бүлмәһен йыһазландырып алдым да, 12 квадрат метрлыҡ бүлмәлә үҙ эшемде башлап ебәрҙем. Фатирыбыҙ беренсе ҡатта урынлашҡанға күрә, күршеләр ҙә өндәшмәне. Хәҙер ике йыл инде үҙем бүрәнәнән өй һалып сығып, 6х5 майҙанлы оҫтаханала иркенләп шөғөлләнәм. Өфөгә кире барырға ла булыр ине, әлбиттә, әммә миңә Сибайҙың 6 район, атап әйткәндә, Бөрйән, Хәйбулла, Баймаҡ, Әбйәлил, Йылайыр, Ейәнсураның уртаһында урынлашыуы ылыҡтыра. Өфөгә юл төшһә, Белорет, Архангел районДарына ла һуғылам. Унда ла минең ҡурайҙарҙы күтәп алалар. Ҡайһы берҙә Учалыға ла барып сығам. Учалыла сәнғәт ныҡ үҫешһә лә, ҡурай уйнау Сибайҙағы, Баймаҡтағы, Хәйбуллалағы һымаҡ уҡ киң таралмаған. Ул яҡтан йәнә Бөрйәндәр ҙә, Хәйбуллалар ҙа шәп. Хәйбуллала тиҫтәнән ашыу - балалар, 7 ололар ансамблдәре бар. Был нимәнән килә? Моғайын, тәрбиәнәндер. Атаҡлы Ишмулла, Сәйфулла ағай Дилмөхәмәтовтарҙың тәрбиәһе, уларҙың өлгөһө ныҡ тәьсир иткәндер, тип уйлайым. Аҙаҡҡы ваҡытта ҡурайҙа уйнау Белорет районында һәйбәт үҫте. Унда ҡурай ишетелгәне юҡ ине әле. Мин Инйәр, Сәрмән, Шығай ауылдарын ҡурай менән тәьмин иттем.

### Үлән ҡурайға яҡын ағас бармы?

Бөгөн балаларҙы капрон ҡурайҙа уйнатыу тураһында һүҙ ҡуйыртыусылар күбәйҙе. Мин капрон ҡурай яҡлы түгел. Уйнағас, ҡиммәтле, сифатына ярашлы музыка ҡоралында уйнарға тейешбеҙ. Шул ваҡытта ҡурайҙың ҡәҙере була. Ҡурай булғас, ул абруйлы уйын ҡоралы булырға тейеш.

Капрон ҡурайҙы таратыуға сит милләт кешеләре күҙлегенән ҡараған хәлдә, улар, моғайын: "Шундай ярлы икән был халыҡ, һәйбәт ҡурайға мохтажлыҡ кисереп, ағас ҡурайы була тороп та, ниндәйҙер пластик торба менән уйнайҙар", - тигән баһа бирер ине. Мин ундай баһа менән килешә алмайым. Булғас, оҫталар эшләгән, компьютер аша тауышы көйләнгән ҡурай булһын. Уның тишектәрен дә үҙгәртергә була (был йәһәттән һәр бер оҫтаның үҙ сере бар). Мин хатта быға ҡаршы түгел. Ул төрлө ағастан эшләнергә мөмкин. Мин, хәҙер һанап ҡарайым да, 15-16 төр ағастан эшләгәнмен икән ҡурайҙы. Иң яңғырауыҡлы ҡурайҙар тығыҙ ағастан эшләнә. Саған - иң шәбе. Башҡа күп кенә музыка ҡоралдарын да сағандан эшләйҙәр. Пианино, думбыра, ҡалған күп кенә музыка ҡоралдары ҡаты ағастан эшләнә. Ҡурайҙы йомшаҡ ағастан эшләргә буламы, тигән һорау тыуыр. Эйе, миңә ҡурайҙы йүкәнән дә эшләргә тура килде. Ләкин йүкә тауышты этәрмәй, яңғыратмай, киреһенсә, үҙенә йота. Тәбиғи ҡурайға, үлән ҡурайға килгәндә, ул икенсе төрлө тауыш сығара. Ағас ҡурайҙың тауышын нисек шул кимәлгә барып еткерергә - беҙҙең алда торған иң ҙур, иң мөһим мәсьәлә шул. Миңә бер тапҡыр ҡурайҙы ерек ағасынан эшләргә тура килде. Шул ерек ағасынан сыҡҡан тауыш үлән ҡурай сығарған тауышҡа бер аҙ яҡынлай. Африканан килгән ағастарҙан эшләп ҡарағаным да булды. Вьетнамдан килгән "яйа" тигән ағастан да эшләп ҡараным. Ул беҙҙең уҫаҡ, йүкә һымаҡ еңел.

### Думбыраңды сирт әле...

Думбыра ҡырғыҙҙарҙа ялпаҡ формала. Вәкил ағай Шөғәйеповта "Музыкальные инструменты народов СССР" тигән китап бар. Ул думбыраны ана шунан ҡарап эшләгән. Ә ысынында был музыка ҡоралының һәр бер өлөшөн тура килтереп эшләргә кәрәк. Ҡайһы берҙә бер өлөшөн икенсеһенә тура килтереү өсөн 1-2 сәғәт ваҡыт китә. Вәкил ағай хәҙер ҙә, үҙе эшләгән думбыраның яңғырауығы һәйбәт, тигән фекерҙә. Мин был фекер менән бик үк килешеп етмәйем. Был турала үҙенә лә йыш ҡына әйткәнем булды. Ҡауын, йәки груша формаһындағы думбыраның тауышы, ялпаҡ формалағыһыныҡына ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ сыға, минеңсә. Яҫыһы - мандолинаның бер төрө һымағыраҡ ҡабул ителә.

Бер думбыраны эшләүгә күпме ваҡыт китә, тип һорайҙар. Мин ундай маҡсат ҡуйғаным юҡ. Материал кипкән, ваҡыт һынауы үткән булырға тейеш. Дека, өҫтө, ҡапҡасы, тигән деталдәргә шыршы ағасын ғына файҙаланалар. Декаға ҡуйылған шыршы 5 йыл киберға тейеш. Баяғы, иҫке пианиноларҙың декаһын алып, эшкәртәм дә, шуны ҡуям. Эшләгәс, мин яңы ғына эшләнгән думбыраны 2-3 көнгә эҫе бүлмәгә урынлаштырып, киптерәм. Әгәр ҙә сатнамай, сыҙаһа - сыҙай... Материалы насар булһа, ярыла. Дека насар йәбештерелгән булһа, ул асыла башлай. Әгәр думбыра яҡшы материалдан эшләнә икән - уны теләһә ҡайһы эҫе урынға ҡуйып кит - бер ни ҙә булмай. Әгәр ҙә насар икән, йылытҡыс эргәһенә ҡуйып кит - иртәгәһенә юҡҡа сыға. Мин үҙемдең думбыраларыма гарантия бирәм. Ҡурай менән дә шул уҡ хәл.

### Милли музыка ҡоралдарыбыҙ

Милли музыка ҡоралдары, тигәс, беҙҙең үҙебеҙҙең йөҙҙө күрһәтергә тейеш ул. Ә ситтән алып, өҫтәп яһаған, ситтән өҫтәлмәләр алып яһалғаны - беҙҙең халыҡтың милли ҡоралы булмаясаҡ. Милли халыҡ инструменты тигән һүҙ юғалырға ла мөмкин. Бөгөн "беҙ үҙебеҙҙең эшләү кимәлен яҡшыртыу өсөн сит музыка ҡоралдарына эйәрергә, уларҙы күсерергә тейешбеҙ", тигән фекер йөрөткән кешеләр ҙә бар. Улай итһәк, музыка ҡоралыбыҙ үҙебеҙҙеке булыуҙан туҡтаясаҡ бит. Ә ҡоралды нисек яҡшыртырға? Эшләргә. Эшләгән һайын оҫтаның ҡулы оҫтара бара. Фабрикалар бер ваҡытта ла музыка ҡоралы фабрикаһы, тип аталмай. Хет Санкт-Петербургта булһын, хет Мәскәүҙә - улар тәжрибә музыкаль фабрика, тип атала. Музыка ҡоралы бер ваҡытта ла бер төрлө генә булырға тейеш түгел. Гәрсә, уларҙың бөтөн ҡорамалдары автоматлаштырылған булһа ла барыбер тәжрибә фабрикаһы тип атала. Унан бигерәк, оҫта үҙенсә эшләһә, бер ҡорал йәнә икенсеһе менән тап килмәй. Ҡурайҙы ғына алайыҡ. Уның елеме ҡуйыраҡ булып, ҡурай ҡалыныраҡ булыуы мөмкин, йәки өҫтөн ялтыратыр өсөн 2-3 тапҡыр лак һөртһәң дә, ҡалыная ул. Ҡурай ҡалын булһа - бер төрлө, ә нәҙек булһа - икенсе тауыш сығара. Ҡурайсыларҙан: "Һәйбәт үлән ҡурай бармаҡты ҡытыҡлап торорға тейеш", - тиеүен ишеткәнем бар. Йоҡа ҡурайҙың тауышы икенсе төрлө. Шуға ла, материалдың тығыҙлығына ҡарарға кәрәк.

Минеңсә, һәр бер халыҡ музыка ҡоралының үҙенең йөҙө булырға тейеш. Ҡурай беҙҙеке икән - ул беҙҙеке булһын. Сәнғәт академияһы заказы буйынса миңә лә 7 тишекле ҡурай эшләргә тура килгеләне, әлбиттә. Миңә ниндәй заказ була - шуны эшләйем инде. Ҡаршы килеүселәр ҙә булды. Тәжрибәләр эшләргә ярайҙыр, тип ҡарайым.

Хәҙер думбыраның тауышы оркестрҙа юғалып ҡалмаһын, тип, тимер ҡылдар ҡуябыҙ. Миңә ҡалһа, тимер ҡылдар урынына эсәктән эшләнгән ҡылдар яҡшыраҡ. Ҡыл-ҡумыҙҙа аттың ҡойроғонан ҡыл тарттырылырға тейеш.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Заман үҙ талаптарын һәр ваҡыт ҡуя. Ғөмүмән, ниндәй генә яҡшы һөнәрсене, оҫтаны алма - ул төп иғтибарҙы заман талаптарына ғына түгел, ә сифатҡа, зауыҡҡа, профессиональ оҫталыҡҡа һәм ижади ҡарашҡа бирәлер. Салауат Усман улы Баймөхәмәтов беҙҙең күҙ алдына шундай оҫта булараҡ һынлана.**

**Монологтарҙы Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

**✓ Малай тыуыуын көтөп йөрөгән атаһы, әлбиттә, был хаҡта бер ни ҙә белмәй ҡала. Ҡыҙы тыуырҙан бер нисә минут алда, ҡала уртаһындағы башҡа 150 меңгә яҡын кеше кеүек үк, көлгә әйләнгән булғандыр...**






* * *

– Кем ул, Матросов? - тип һораны Ай парк буйлап бер аҙ йөрөгәс. - Был парктың исеме шулай тип атала шикелле, әгәр ҙә хаталанмаһам?

- Эйе, - тине Салауат, - тап ана шулай атала. Матросов та беҙҙең милли геройыбыҙ. Уның даны ла Салауат Юлаев һымаҡ бөтә Рәсәйгә таралған. Атаһы буйынса фамилияһы - Мөхәмәтйәнов.

Түшенә автоматын аҫҡан, аяғөҫтө һүрәтләнгән һәйкәлгә оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо ҡыҙ.

- Һөйлә әле уның хаҡында. Хаталанмаһам, Икенсе Бөтөн Донъя һуғышы батырылыр ул, моғайын, - тип фаразланы ҡыҙ бронза һалдаттың ҡоралына, кейеменә ҡарап.

- Ул Бөйөк Ватан һуғышы геройы, - тип башлап алып китте Салауат. - Тиҫтәләгән миллион кеше ғүмерен алып киткән был һуғыш беҙҙең халыҡтар өсөн нәҡ ана шулай атала. Матросов - Мөхәмәтйәнов шул яуҙа фашист амбразураһын күкрәге менән ҡаплаған батыр.

- Ни менәндер беҙҙең япондарҙағы "харакири"ны хәтерләткәндәй...

- Юҡ, - тине Салауат. - Бер ниндәй ҙә харакири түгел. Был - бөтөнләй башҡа нәмә. Харакири, аңлауымса, ниндәйҙер идея өсөн фәҡәт үҙ-үҙенде юҡ итеү генә була. Ә был батыр үҙенең йөҙҙәрсә яуҙаш иптәштәренең ғүмерен һаҡлап ҡалыу ниәте менән үҙен-үҙе ҡорбан итә. Башҡаса миллионлаған совет һалдаттары һымаҡ, немец фашизмын енеүгә үҙенең тос өлөшөн индергән башҡорт егете ул.

- Уй, ҡалай батыр! - тип һоҡланды ҡыҙ. - Тик ул сакта беҙҙең япон хөкүмәтенең фашистик Германия яғында булыуы бик үкенесле...

- Тормош бик ҡатмарлы шул. Заманалар ҙа үҙгәреп тора. Батшалар ҙа, уларҙың сәйәсәттәре лә бер иш түгел. Тик халыҡтар ғына һәр саҡ шулай һинең менән минең һымаҡ ябай көйөнсә ҡала бирә...

Егеттең үҙ иленең тарихын һөйләүе, шул уҡ ваҡытта фәлсәфәгә лә төшөп китеүе Айға бик оҡшай ине. Һорау артынан һорау биргеһе килде.

- Милли батырығыҙ Салауат тураһында тарих китабынан уҡығаным бар, - тине Ай. - Күптән түгел батырҙың һәйкәле янында ла булдым. Шулай ҙа уның хаҡында ысын башҡорт кешеһенән ишеткем килә. Матросов һәм Салауат. Икеһе ике дәүер кешеләре булыуҙарына ҡарамаҫтан, ошо ике батыр араһында ниндәйҙер оҡшашлыҡ та бар һымаҡ тойола...

- Эйе, - тине Салауат бер аҙ уйлап алғас. - Беренсенән, тамырҙарында башҡорт ҡаны йөрөткән был ике ҡаһарманға ирек һөйөүсәнлек хас. Үҙенең һәм халҡының азатлығы өсөн йәнен-тәнен аямай көрәшсе булыу сифаты, намыҫлылыҡ, иле алдында яуаплылыҡ тойолары юғары кимәлдә булыу берләштерә был ике батырҙы.

Ҡыҙҙың йотлоғоп тыңлағанын тойған егет хисләнеп, артабан һөйләүен дауам итте.

- Ошо ике шәхес хаҡында тағы дәүер, заман күҙлегенән сығып һүҙ йөрөтөү кәрәк. Тәүгеһе, тик башҡорт ере, башҡорт халҡы һәм дине өсөн көрәшһә, икенсеһе иһә, инде дуҫ булып алған урыҫ халҡы менән берлектә бөтә кешелек донъяһының дошманына - Гитлер фашистарына ҡаршы һуғыша.

- Ниндәй аҡыллы итеп әйтелгән һүҙҙәр! - тип шатланды Ай. - Нисек уйлайһың, ни өсөн бөтә донъя тарихы тик һуғыштарҙан ғына тигәндәй тора икән? Әйтерһең, был ерҙәрҙә быуаттар буйы тик һуғыштар ғына булған.

- Үкенескә, - тип артабан фәлсәфәһен дауам итте Салауат, - әҙәм балаһы яҡшы нәмәләрҙе тиҙ онотоусан. Ә бына һуғышмаҙар онотола һалмай. Халыҡ күңелендә оҙағыраҡ һаҡланыусан. Бәлки, шуғалыр ҙа, беҙҙең тарих тик һуғыштар теҙмәһенән генә торған һымаҡ...

Парктан алыҫ булмаған Тукай урамы яғынан аҙан тауышы ишетелде.

- Аҙан ҡысҡыралар, - тине Ай. - Аңлауымса, бөтөн донъя мосолмандарын ғибәҙәткә саҡырыу йолаһы буғай?..

- Тап шулай, - тине Салауат. - Ә һин был хаҡта ҡайҙан беләһең?

- Был турала ла уҡығаным бар. Ә үткән йыл Ғәрәбстан илдәренә турист путевкаһы менән барғанда үҙ ҡолаҡтарым менән ишеттем. Унда аҙым һайын тиерлек мосолмандарҙың ғибәҙәтханалары...

- Мәсеттәр.

- Эйе, эйе, шулай тип аталалар шул, - тине ҡыҙ.

- Ғәфү ит, - тине Салауат ҡыҙҙан бер аҙ уңайһыҙланғандай, - мин тиҙ генә намаҙ уҡып алайым, ә һин бына ошо эскәмйәлә ултырып тор...

Ай, парк эскәмйәһендә ултырған килеш, егеттең ағас төбөнә барып, көньяҡҡа ҡарап бер-нисә мәртәбә эйелеп, йә теҙләнеп, унан тағы аяғөҫтө тороп ғибәҙәт ҡылыуын күҙәтте. Биш минут тирәһендә намаҙын уҡып бөтөп, егет ҡыҙ янына ҡабат килде.

- Көтөп ялыҡманыңмы? - тине Салауат йылмайып.

- Юҡ, киреһенсә, һинә ҡарап ултырыуы бик тә ирмәк тойолдо. Һөйлә әле минә Ислам дине хаҡында.

- Был тиҙ генә һөйләй торған нәмә түгел, Ай. Бер ваҡыт шундай мөмкинлек тә булыр әле.

- Ә намаҙ уҡымаһаң, нимә була?

- Был хаҡта ла һуңыраҡ һөйләрмен...

Парк буйлап тағы оҙаҡ ҡына йөрөнөләр. Ғәйәт алыҫ араларҙа ятҡан ике ил вәкилдәренең береһенә һорауҙары ифрат та күп ине. Ҡыҙ хатта күпкә ҡыҙыҡһыныусанераҡ та булып сыҡты.

- Һинә нисә йәш? - тип кинәт кенә һорап ҡуйҙы Ай.

- Быйыл егерме алты тула.

- Ә тыуған көнөң ҡасан?

- Алтынсы август.

- Алтынсы август? - тип ҡабатлап һораны ҡыҙ ҡапыл ниҙәндер ҡурҡҡандай. Хатта ҡобараһы осоп киткән һымаҡ булды.

- Эйе, эйе, августың алтыһы көнө ошо яҡты донъяға тыуырға миңә Хоҙай Тәғәлә насип иткән. Нишләп быға ғәжәпләнергә?

- Минең өсөн иң ҡайғылы дата. 1945 йылдың тап ана шул көнөндә минең өләсәйем Хиросима ҡалаһында донъяға килгән... - ҡыҙҙың күҙҙәренән ике бөртөк йәше сығып, биттәре буйлап тәгәрәне.

- Хиросима?... Ҡырҡ бишенсе йыл... Ғәфү ит, Ай, - егет ниндәйҙер бик ауыр һүҙ менән ҡыҙҙы рәнйеткәндәй хис итте үҙен. - Был бит америкалылар һеҙгә ядро бомбаһы ташлаған көн!..

- Эйе, - тине Ай битендәге йәш бөртөктәрен ҡулының һырты менән һыпырып.

- Ғәфү ит, - тип ҡабатланы Салауат.

- Өләсәйемдең ата-әсәләре ҡала ситендә йәшәгән. Атаһы таң менән тороп, инде тыуҙырыр ваҡыты еткән ауырлы ҡатынына: "Мин эштән ҡайтҡанды көтөргә тырыш, яҡты донъяға киләсәк улымды һаҡла. Тулғағың тотоп, түҙҙермәй башлаһа, кендек инәһе Нэо әбейҙе ҡайҙа йәшәгәнен беләһең..." тип әйткән дә, ҡалаға эшкә киткән. Алыҫ булыу сәбәпле, эш башланырҙан ике сәғәт алдан уҡ өйҙән сығып китә торған булған ул.

Айҙың күҙҙәренән бер туҡтауһыҙ йәш сорлап, биттәре буйлап аҡты. Бер аҙ тынысланa биреп, ҡыҙ артабан дауам итте.

- Тик уларға башҡаса күрешергә яҙмаған. Ул сығып, автобусҡа ултырып киткәс, күп тә тормай, тулғағы башланған ауырлы ҡатын яртылаш ергә соҡоп эшләнгән күрше таш йортта йәшәгән Нэо әбейгә йүгереп килә. Кендек әбейе ҡулдарын йыуып, бала ҡабул итергә әҙерләнгән мәлдә, теүәл 8 сәғәт 15 минутта, ҡала яғындағы күк йөҙөндә ҡот осҡос ҙур ут шары, унан гигант бәшмәккә оҡшаш ҡап-ҡара болот пәйҙә була. Бернисә секундтан шул яҡтан ғәйәт көслө тауыш менән ел сығып, бар өйҙәрҙе емереп, ағастарҙы төбө-тамыры менән өҙөп, урамдағы кешеләрҙе һепереп тигәндәй осороп алып китә. Ҡала ситендә һәм башҡа өйҙәргә ҡарағанда бик тәпәш булғанға күрәлер ҙә, Нэо әбейҙең йорто ниндәйҙер мөғжизә менән емерелмәй ҡала, тик тәҙрәләре генә селпәрәмә килә. Тап шул мәлдә минең өләсәйем донъяға килә. Малай тыуыуын көтөп йөрөгән атаһы, әлбиттә, был хаҡта бер ни ҙә белмәй ҡала. Ҡыҙы тыуырҙан бер нисә минут алда, ҡала уртаһындағы башҡа 150 меңгә яҡын кеше кеүек үк, көлгә әйләнгән булғандыр...

Ныҡ ҡына акцент менән һөйләшеүенә ҡарамаҫтан, ҡыҙҙың урыҫ теле запасы бай ғына ине. Уның хикәйәтен тыңлаған Салауат та күҙ йәштәрен тыя алманы. Ҡыҙға һиҙҙермәҫкә тырышып, әленән-әле башын ситкә бороп, тәгәрәп төшөргә торған тамсыларҙы ҡулының һырты менән алып ташлағыланы.

- Хөкүмәттең ҡотҡарыусы отрядтары, медиктар килеп тапҡанға ҡәҙәр Нэо әбейҙең өйөндә, уның һуңғы аҙыҡ запасын көскә еткереп, йәшәп торалар. Өләсәйем тыуғас та уның әсәһенең хәле көндән-көн насарая барып, ике аҙна тирәһенән үлеп тә китә. Ул саҡта Ер йөҙөндә бер кем дә белмәгән нур ауырыуы менән сирләгәнлеге һуңынан ғына асыҡлана. Ядро бомбаһы шартлауҙан барлыҡҡа килгән ундай сир тиҙ бүленә торған йәш күҙәнәктәр өсөн айырыуса хәүефле икән. Оло кешеләрҙең организмында ундай процесс бик әкрен барғангалыр, Нэо әбей был ауырыуға биреш һалмаған, күрәһең. Үлер алдынан ҡатын яҡшы күңелле был әбейгә рәхмәттәр уҡып, ҡыҙын Азуми ("хәүефһеҙ йорт") исеме менән атарға үтенә. Азуми өләсәйемде шул кендек инәһе ҡарап үҫтерә. Нэо әбейҙең бар туғандары, балалары ҡала уртаһына яҡын йәшәгән булғанлыҡтан, бомбанан һәләк булғас, уның бер яҡыны ла ҡалмаған була.

Ҡыҙҙың ифрат та аяныс ғаилә тарихын иғтибар менән тыңлаған Салауат, табиб булараҡ, "лучевая болезнь" тип аталған, әҙәм балаһы тарафынан уйлап табылған былдай яман сирҙең һәр симптомын, уны барлыҡҡа килтереүсе механизмдарын хатта молекуляр кимәлдә тиерлек күҙ алдына килтерә барҙы. Ҡарашын күҙ йәштәре аша ҡайҙалыр алыҫҡа төбәгән килеш, Ай ҡайғылы хикәйәтен дауам итте.

- Үкенескә, әсәһенә генә түгел, сабый ғына булып ҡалған өләсәйемә лә бомбаның зыяны тейеп өлгөрә... Ана шул ҡәһәрле нур ауырыуы менән сирле өләсәйем дә ни бары егерме өс йәш кенә йәшәй. "Хәүефһеҙ йорт", тигәнде аңлатҡан исеме лә өләсәйемдең ғүмеренә һис бер йоғонто яһай алмай. Тормошҡа сығып, әсәйемде тыуҙырғандан һуң бер ай ғына торғас, ул да гүр эйәһе була. Һуғыш тамамланғанға сирек быуат үтеп китеүенә ҡарамаҫтан, ҡәһәрле бомба кешеләргә һаман ҡайғы килтереүен дауам итә... Ә әсәйемә Юки тигән исем ҡушалар. Юки - "бәхет" тигәнде аңлата. Әммә уға, шулай, үгәй әсә ҡулында үҫергә тура килә. Япондарҙа исем кеше яҙмышына тәьсир итә имеш, тигән ырым йәшәп килә. Әммә был беҙҙең ғаиләгә лә ҡағылышлы булыуын һис тоймайым...

Артабан тағы ла күңелһеҙ хәбәр ишетеүҙән шикләнепме, Салауат ҡыҙҙың саманан тыш ҡайғылы һүҙҙәрен бүлдерер, бер аҙ күңелен күтәреп алырға булды.

- Хәҙер һинең шундай яҡшы университетты тамамлап, аспирантураға уҡып йөрөүеңә әсәйеңдәр ифрат та бәхетлеләр, моғайын. Бынамын тигән ҡыҙың булыуына шатланмау, уның менән ғорурланмау мөмкинме!..

Егеттең был һүҙҙәренән Айҙың кәйефе күтәрелмәү генә түгел, киреһенсә, бөтөнләйгә бөтә һәм ҡыҙ һулҡылдап иларға кереште.

- Ни булды, Ай? Яңылыш рәнйеткән булһам, ғәфү ит мине...

- Юҡ, Са-ля-уат, һинең һүҙҙәреңә ҡыйырһыманым мин...

- Тыныслан, Ай, - ҡыҙҙың битендәге йәште наҙлап ҡына башбармаҡтары менән һыпырып алды егет.

Бер аҙ тынысланғандай булғас, Ай:

- Әсәйем дә юҡ инде минең, - тип ҡуйҙы. - Фашизмды тар-мар иткәнгә ҡырҡ биш йыл тулыу айҡанлы бөтә донъя халҡы байрам иткән мәлдә, өләсәйемдәр кеүек үк йәп-йәш көйөнсә генә ул да яҡты донъя менән хушлаша. Табибтар нур ауырыуының кеше гендарына, енси күҙәнәктәренә лә зарары булыуын иҫбатлай... Әсәйем үлгәндә миңә ни бары алты ай ғына булған. Атайым башҡаса өйләнмәне, мине яңғыҙы ҡарап, ҡәҙерләп үҫтерҙе, уҡытты. Әйткәндәй, ул да һеҙҙең һымаҡ - хирург...

Улар оҙаҡ ҡына бер һүҙһеҙ парк эскәмйәһендә ултырҙылар. Салауат ҡыҙға башҡа бер ни әйтергә лә ҡыйманы.

- Нишләп быуындарығыҙҙа тик ҡыҙҙар ғына тыуа икән, тигән һорау ҙа борсойҙор һеҙҙе? - ҡыҙ был юлы бер аҙ йылмайғандай итте.

- ...

- Радиоактив нурҙар беҙҙең быуындарға тәү тәьсир иткәндән алып, нисектер, беҙҙең нәҫелебеҙ вәкилдәренең енси күҙәнәктәре ирҙәр генын дауам иттереүсе Ү-хромосома менән бәйләнешкә инеүҙән туҡтаған. Шунлыҡтан, быуындан-быуынға тик ҡыҙҙар ғына донъяға киләбеҙ ҙә киләбеҙ, - Ай тағы күҙ йәштәре аша көлөп ебәргән булды. - Дөрөҫөрәге, киләбеҙ ҙә китәбеҙ...

Ҡабаттан илай башлаған ҡыҙҙы Салауат тынысландырырға маташманы. Әйҙә, бер аҙ илап, "бушанып" алһын, бәлки, еңелерәк тә булып ҡалыр үҙенә...

**(Дауамы бар).**

✔ *Беҙ сығыш яһағанда сәхнәнән: "Был - башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурай, ул бары тик Көньяҡ Уралда ғына үҫә", - тип ҡысҡырып әйттек. Ҡурайҙа уйнау өсөн башҡорт булып тыуырға кәрәк, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит.*



*МИЛЛӘТ БАЛҠЫШЫ*

**Халҡыбыҙҙың иҫ киткес талантлы икәненә һис шик юҡ. Быны йырсы, бейеүсе, музыкант, артистарыбыҙҙың донъяның әле бер, әле икенсе осонда үткән төрлө сараларҙа, ярыштарҙа, фестивалдәрҙә ҡатнашып, лайыҡлы урындар яулауы тураһындағы хәбәрҙәр раҫлап тора. Был юлы ла "Сал Урал" этно-төркөмөнөң Ҡаҙан эргәһендәге бер ауылда үткән этнофестивалдә ҡатнашыуына бер кем дә аптырамаҫ ине, әгәр ҙә интернет киңлектәрен иңләп, "Ҡаҙанды тағы ла яуланылар, был юлы башҡорттар..." тигән баш аҫтындағы хәбәр үҙҙәренән дә алда ҡайтып өлгөрмәһә.**
**"Крутушка" VII Халыҡ-ара этник фестиваль - ул сифатлы этник музыканы һәм фольклор ынйыларын баһалай белеүселәрҙең иң көтөп алған сараһы. Ошондай тамашасыларҙың иғтибарын йәлеп итеүгә нисек өлгәшкән беҙҙең артистар, ғөмүмән, фестивалдән ниндәй тәьҫораттар менән ҡайтҡандар, был хаҡта "Сал Урал" этно-төркөмө проектының иң йәш ҡатнашыусыһы Айназ НИЗАМЕТДИНОВ менән әңгәмәләшеп алдыҡ.**

# МИЛЛИ КӨЙ-МОҢДАРЫБЫҘ...

## үҙебеҙҙе танытыуҙың иң шәп юлы



**➔ Иң тәүҙә фестивалдең исеме тураһында, ни өсөн ул "Крутушка" тип атала?**

- Барыһы ла ябай ғына, сөнки ул Татарстан Республикаһының баш ҡалаһы Ҡаҙан эргәһендәге Крутушка тигән поселокта урынлашҡан санаторийҙа үтә. Быйыл етенсе тапҡыр үткән фестивалдең маҡсаты - үҙенең майҙанына халыҡ ижадын, этник музыканы яратыусы, ошо йүнәлештә эшләүсе йырсыларҙы, авторҙарҙы, музыкаль, бейеү коллективтарын йыйыу. Шулай уҡ Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән, сит илдәрҙән төрлө оҫталар килә, ҡайын туҙы, балсыҡ, тире, кейеҙ, ағас, мәрйендән эшләнгән әйберҙәрҙән торған йәрминкә үтә. Былар барыһы ла ижад итеү шатлығынан ғына туҡылған мөхит булдыра. Уның урыны ла үҙенсәлекле, Ҡаҙан йылғаһының текә яры, уның эргәһендәге ҡояшлы аҡлан, бер ҡасан да туңмай торған һалҡын һыуҙары менән танылған зәңгәр күлдәр теҙмәһе шулай уҡ кәйефте күтәрә. Фестивалде республиканың Йәштәр эштәре, спорт һәм туризм министрлығы ярҙамында "Мәғарифта информацион технологиялар үҙәге" ойоштора.

Фестивалдә "Сал Урал"дың солистары - ҡурайсы, ҡумыҙсы, өҙләүсе Рәис Низаметдинов менән ҡурайсы, думбырасы, өҙләүсе Илһам Байбулдин икенсе тапҡыр ҡатнаштылар, быйыл улар мине һәм "Йатаған" төркөмөнән Илдар Шакировты үҙҙәре менән саҡырҙы. Бөтәһе 20 төрлө ҡурай, 5 төрлө думбыра, 10 төрлө ҡумыҙ алып барҙыҡ һәм уларҙың барыһын да сәхнәнән күрһәттек. Фестиваль өс көн барҙы, 40-ҡа яҡын төркөм ҡатнашты, һәр бер төркөм берәр сәғәтлек концерт ҡуйҙы. Ниндәй генә музыка ҡоралын күрмәнем мин бында, мәҫәлән, Германиянан килгән Владислав Минишана 200-ҙән ашыу инструментта уйнай, хатта ҡурайҙа ла һыҙғырта белә. 400-500-ләгән тамашасы булды. Ғөмүмән, ундағы мөхиттән ныҡ ҡәнәғәт ҡалдыҡ. Сәхнәгә сыҡҡас, күңелендәге тойғоларҙы тамашасыға еткерге килә бит инде, ҡайһы бер концертта тамашасы ҡул да сапмай. Бында халыҡтан килгән көслө энергетиканы тояһың, сөнки уларҙың барыһы ла бында бер маҡсат менән - яҡшы, этник музыка тыңларға килгән. Берәүгә лә фонограмма ҡулланырға рөхсәт ителмәне, һәйбәт аппаратура булды, ҡыҫҡаһы, сығыш яһауы еңел булды.

**➔ Бөтөн донъя халҡының этник музыкаға тартылыуының сәбәбе ниҙә? Бындай музыканың популярлығы нимәгә бәйле, тип уйлайһың?**

- Бөгөн йәштәр ҙә, ололар ҙа музыкалағы еңел-елпе жанрҙарҙан ялҡҡан, беҙгә хәҙер яңы йүнәлештәр кәрәк. Этник музыка халыҡ фольклорына, йәғни, быуаттар буйына камиллашып килеп еткән музыкаға таяна. Уларҙың иң яҡшыларынан ошондай матур, этник музыка тигән төшөнсә барлыҡҡа килде лә. Этник музыка - ул яңы йүнәлеш, әммә ул бер үк ваҡытта халыҡ ижады менән бәйле булғанға күрә, үткәнебеҙ менән дә бәйләй беҙҙе. Йолаларыбыҙҙы, халыҡ йырҙарыбыҙҙы, бейеүҙәребеҙҙе кем һаҡлаясаҡ һуң беҙҙән башҡа? Икенсенән, бына мин - башҡорт, бөтөн донъянан йыйылған милләттәргә үҙемде нисек танытайым һәм уларҙың хәтерендә нисек уйылып ҡалайым? Әлбиттә, тик үҙемдең милләтемдең музыка ҡоралдары, йырҙары менән генә. Сығышыбыҙҙың төп үҙенсәлеге - өҙләү булды, Рәис Низаметдинов та, Илһам Байбулдин да танылған өҙләүселәр бит инде.

**➔ Ә бөгөнгө башҡорт этник музыкаһы ниндәйерәк йүнәлештә үҫергә тейеш?**

- Этник мотивтар бөгөн классик, рок, джаз жанрҙарына ла үтеп инә. Мәҫәлән, ошо уҡ фестивалдә Африка Республикаһынан килгән музыканттар башлыса блюз, джаз музыкаһын башҡарҙы, этно-рок төркөмдәр күп булды. Беҙҙә лә төрлө йүнәлештә эшләгән төркөмдәр булырға һәм уларҙың һәр береһе үҙенсә үҫешергә тейеш. Хәтерегеҙҙәме икән, былтыр "Салауат йыйыны"нда этник фестиваль ойошторолғанда унда 30-ға яҡын төркөм ҡатнашҡайны. Йәғни, улар беҙҙә бар һәм уларҙың һәр береһе кәрәк бөгөнгө көндә, сөнки үҫеш ярыш сәмендә генә барлыҡҡа килә. Бер-беребеҙгә ҡарап, бер-беребеҙҙе уҙырға тырышҡанда ғына музыка үҫә. Шуға бында бер ниндәй ҙә әҙер юл юҡ, бары тик башҡарыусылар музыкаль яҡтан грамоталы булырға һәм башҡорт халҡының музыка башҡарыу йолаларын боҙмаҫҡа тейеш. Әйткәндәй, башҡорт ҡурайын ниндәй генә халыҡ үҙләштерергә маташмай. Беҙ сығыш яһағанда сәхнәнән: "Был - башҡорт халыҡ музыка ҡоралы ҡурай, ул бары тик Көньяҡ Уралда ғына үҫә", - тип ҡысҡырып әйттек. Ҡурайҙа уйнау өсөн башҡорт булып тыуырға кәрәк, тип юҡҡа әйтмәйҙәр бит. Ҡурай моңо беҙҙең ҡаныбыҙҙа, башҡа милләттәр уны башҡортҡа еткереп уйнай алмаясаҡ. Атайым һөйләгәйне, хакастарҙың бер музейында ҡурай күреп ҡалып, музей хеҙмәткәренән: "Был ниндәй уйын ҡоралы һәм хәҙер унда уйнаусылар бармы?" - тип һораған икән: "Был - ҡурай һәм унда бер кем дә уйнамай, ул бары музей экспонаты ғына", - тип яуаплағандар. Башҡорт бер заманда ла үҙ донъяһына ғына бикләнеп ятмаған, йөрөгән ерендә яратҡан музыка ҡоралы - ҡурай ҙа ҡалдырғылағандыр, әммә ҡурайҙа бөгөн еренә еткереп башҡорт ҡына уйнай ала, сөнки ул ҡурай үҫкән ерҙә үҫкән. Үкенес, бөгөн скрипка юғала төшкән, элек башҡорт бабайҙары скрипкала шәп уйнаған. Учалыла Ғәҙелша тигән ауыл бар, уны минең бишенсе быуын олатайым нигеҙләгән. Ҙур ауыл булһа ла, хәҙер бәләкәйләнгән, атайымдың олатаһы йәшәгән саҡта унда 16 йорт булған һәм уларҙың алтауһында скрипкасы булған. 80 йәшлек өлкән әбейҙәрҙең думбырала уйнауын мин күреп өлгөрҙөм әле. Олатайым музыка уҡытыусыһы булған, баянда оҫта уйнаған. Әминә әзәйем иһә шәп йырсы.

Унан һуң, башҡорт халҡындағы кеүек бай фольклор бер халыҡта ла юҡ бит. Беҙҙән алда ғына Польша музыканттары сығыш яһаны, көйҙәре бер үк тембрҙа, ялҡытып китте хатта. Беҙ ҡурайҙа талғын көйҙән башлап ебәрҙек тә, яйлап-яйлап дәртле көйҙәргә, марштарға, бейеү көйҙәренә күстек. Тәүҙә ҡурайҙың моңона иҫтәре киткән тамашасы аҙаҡтан уйнауыбыҙға ҡушылып бейей ине. Бына ошо байлыҡты ҡулланырға, уны үҫтерергә, һис юғында, онотмаҫҡа кәрәк. Бының өсөн баш ҡалала йәшәү ҙә мотлаҡ түгел, миңә ҡалһа. Фестивалдә "Һеҙ Өфөнәнме?" тип килеп һорайҙар ҙа, беҙ: "Юҡ, беҙ ауылдан", - тип шаяртабыҙ. Ысынында иһә, музыканы үҫтерәм тиһәң, әллә ниндәй шарттар ҙа кәрәк түгел, теләгең һәм дәртең генә булһын. Халҡыбыҙҙа һәләтле музыканттар күп, уларҙы берләштереүсе кеше кәрәктер, бәлки. Милли костюмдарыбыҙға һоҡландылар, фотоға төштөләр беҙҙең менән. Мин бер бейеү ҙә башҡарҙым.

**➔ Һин ошо бейеүең менән Ҡаҙанды яулағанһың, тип ишетә биргәйнек инде. Күршеләрҙе бындай уйға килергә нимә этәрҙе һуң?**

- Фестивалдә төрлө - "Уралым", "Игеҙәк", "Үҫәргән байығы" кеүек көйҙәр башҡарҙыҡ, тип әйткәйнем инде. Араларында "Ҡаҙанды алған марш" та бар ине. Ул бик популяр марш, уны, мәҫәлән, З. Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт академияһының ҡурайсылар ансамбле лә йыш башҡара сәхнәнән. Башҡарыр алдынан мотлаҡ атамаһын иғлан итәһең - шуға хәтерҙәренә уйылып ҡалғандыр инде. Ә бейеүгә килгәндә, ул шулай уҡ билдәле бейеүҙәрҙең береһе - "Һунарсы" ине. Ата-бабам яугир ҙа булыуына ҡарамаҫтан, мин ҡаланы алыу хәрәкәттәрен башҡарманым, ә айыуға һунарҙы һүрәтләп бейенем. Уны, күрәһең, яугир образы тип ҡабул иткәндәрҙер инде. Юмор аша булһа ла сығышыбыҙға, тимәк, халҡыбыҙҙың сәнғәтенә юғары баһа биреүҙәре яҡшы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тик ятҡан таш мүкләнә, йөрөгәне - шымара", - тип юҡҡа әйтмәй инде ул халыҡ. Бер сығып, үҙеңде күрһәтеп, донъяны шаулатып ҡайтыуы үҙе бер ғүмер, тигән һығымтаға килдек йәш ҡурайсы, йырсы, бейеүсе тигән даны булған Айназ Низаметдинов менән. Ысынлап та, халыҡ йыр-көйҙәре, бейеүҙәренә, һәләтле шәхестәребеҙгә бай милләт булараҡ, үҙебеҙҙе башҡаларға күрһәтеү беҙгә күпкә еңелерәктер әле. Шуға яуланған үрҙәр Ҡаҙан менән генә туҡталып ҡалмаһын киләсәктә.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *Анар ҡан тамырҙарына яҡшы йоғонто яһай, ул майҙарҙы яндырып, тамырҙарҙың стенаһын һығылмалыраҡ итә. Анар емеше антиоксиданттарға һәм полифенолға бай. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын һаҡлай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# КОМПЬЮТЕР УЙЫНДАРЫ...

## холоҡто үҙгәртә

■ Төнгөләккә ашарға ярамай, тип раҫлай бөтөн табиптар ҙа. Тик әгәр ҙә ваҡытында ашап өлгөрмәгәндәргә нимә эшләргә һуң? Төнгә ҡарай ашауҙы зыянһыҙ итергә тырышығыҙ, тип кәңәш бирә диетологтар. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: ас көйөнсә йоҡларға ятыуҙың шулай уҡ кире яҡтары бар. Ғалимдар күптәр раҫлаған, тамағы туҡ кеше яҡшырай йоҡлай. Йоҡлар алдынан нимәлер ҡапҡылап алыу ҡандағы шәкәр кимәлен нормаға килтерә. Шулай итеп, һуңға ҡалған киске аш майһыҙландырылған йогурттан тора ала. Унда диетик протеин бар, ул асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫасаҡ, иң яҡшыһы - йогурт артыҡ татлы булмаһын. Эремсек тә сәләмәт туҡланыу рационынан. Йәшелсәләр шулай уҡ ярайһы ғына туҡлыҡлы ризыҡ, калориялары ла аҙ. Аҡ ит организмдың углевод менән майҙарҙы энергияға әйләндереүен яйлата.

■ Анар ҡан тамырҙарына яҡшы йоғонто яһай, ул майҙарҙы яндырып, тамырҙарҙың стенаһын һығылмалыраҡ итә. Анар емеше файҙалы матдәләргә, шул иҫәптән антиоксиданттарға һәм полифенолға бай. Улар йөрәк-ҡан тамырҙары системаһын һаҡлай, шуға ла ҡан тамырҙары яҡшыраҡ тарая һәм киңәйә, был иһә ҡан әйләнешен нормала тота. Әселәндереүгә ҡаршы матдәләр атеросклерозды булдырмай, был ҡан тамырҙарына оҙаҡ ваҡыт һығылмалылығын һаҡларға булышлыҡ итә. Ғалимдар раҫлауынса, был емеш һөт биҙҙәре яман шеше ихтималлығын кәметә. Бынан тыш, продукт насар холестерин сығанағы булған түбән тығыҙлыҡтағы майҙарҙы яндыра, ә файҙалы майҙарҙы, киреһенсә, күбәйтә.

■ Америка психология ассоциацияһы белгестәре раҫлауынса, компьютер уйындарының аяуһыҙ төрҙәре кешелә агрессия уята. Ғалимдарға был тикшеренеүҙәрҙе үткәреү өсөн 20 йыл кәрәк булған. Аяуһыҙ уйындар менән кешенең үҙен агрессив тотоуы араһында ысынлап та бәйләнеш бар, ти улар. Ҡан түгелгән, көс ҡулланыу сәхнәләре асыуҙы ныҡ көсәйтә. Ошо рәүешле күңел асыуҙы хуп күреүселәрҙең яйлап холҡо ла, үҙен тотошо ла үҙгәрә. Ғалимдар бындай уйындарҙы уйлап табыусыларға уйындарҙа көс ҡулланыуҙы кәметергә, ә ата-әсәләргә балаларына атыш уйындарын тыйырға кәңәш итә.

■ Фин ғалимдарының яңы тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, кеше үҙен сәләмәт тойһон өсөн уға тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлау мотлаҡ. Тикшенереүселәр билдәләүенсә, йоҡоһо туйған хеҙмәткәрҙәр һирәк ауырый. Ғалимдар йоҡо менән ауырыу сәбәпле эшкә бармай ҡалған көндәр тураһындағы мәғлүмәттәрҙе берләштереп, йоҡо өсөн иң уңайлы ваҡытты иҫәпләп сығарған. 30 йәштән өлкән 1875 ҡатын-ҡыҙ менән 1885 ир-егеттәр ҡатнашҡан һынауҙар күрһәтеүенсә, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар йышыраҡ ауырый икән. Ә кем тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлай, улар дауахана тупһаһын һирәгерәк тапай. Ир-егеттәр өсөн төнгө йоҡо 7 сәғәт 46 минут, ә ҡатын-ҡыҙҙар өсөн 7 сәғәт тә 38 минут тәшкил иткән. Йоҡо туймағанда кеше яңы мәғлүмәтте ҡабул итә алмай, иғтибарлылыҡ, хәтер насарая. Бындай кешеләрҙең энергияһы түбән, кәйефе насар була.

*КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ*



## ЗОЛОТАРЕВ ВИКТОР СЕМЕНОВИЧ

**кандидат в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу №2**

# ДОРОГИЕ УФА И ИНОРС, ВАМ – МОЯ ЖИЗНЬ!

Помечтаем? Главное, людям в Инорсе нужны большая больница - стационар и бассейн с кинотеатром, дороги без ям и нормальное ЖКХ...

В больнице будет родильное отделение для маленьких новых граждан Уфы и Инорса. Будут терапия и хирургия, кардиология и травматология. Будут детское отделение и взрослое... И нужны нам свои бассейн и кинотеатр...

Познакомимся. Я 1961 года рождения. И через год мне исполнится - уже, или только еще, - 55 лет. Я глава большой семьи - пятеро детей! Пришли ко мне и сила, и уважение от людей. Пришли знания, опыт и зрелость. Я одновременно: глава семьи, инженер, политик, тренер и блоггер. Люди читают мои статьи на сайте "Уфимский Журнал". Получил грамоту от ТВ "Вся Уфа" - "топ-блоггер Уфы".

В моей родной Уфе я родился, учился, живу и работаю. Приходилось подрабатывать в такси, совместно с работой инженером, в "тяжелые" времена. Хорошо я узнал все районы Уфы. Все улицы и дворы, каждую остановку в Уфе. Узнал я Уфу ночную и дневную. Уфу богатую и простую, рабочую. Уфу спортивную и уличную. Уфу торговую. Было трудно, пришлось и самому научиться торговать. Увидел я и понял Уфу "обычную", и криминальную. Мне думается, что я научился людей выслушать, и попытаться их понять. Научился умению отстоять мое справедливое право на слово и дело. Научился помогать и защищать. Мимо конфликтов никогда не прохожу молча. Всегда стараюсь стоять за справедливость. У нас - четыре сыночка и лапочка дочка. Старшему сыну 23 года, а нашему младшему - Федору "пятому", - скоро будет два годика. Пытаюсь я работать и жить честно и справедливо. Этому я стараюсь научить и наших детей.

Довелось мне жить и учится в самых разных районах Уфы. В Инорсе, на "Машинке", у "Колхозного рынка", у Дворца Спорта, в Деме, и на Проспекте Октября, в центре Уфы, в районе институтов. Детство и юность я провел в Черниковке, на улицах Первомайская, Свободы, Кремлевская, Кольцевая. Мы росли и мужали на улице. Мы дружили, ссорились, дрались. Мы знали все дворы и улицы любимой Черниковки. Здесь мы влюблялись и гуляли с девчонками. Женились и учились. Соревновались. Учились быть людьми и мужчинами. Я люблю наши народные, ласкающие слух, уфимские названия - "Док", "Восьмиэтажка", "Проспект", "Машинка", "Курочкина гора"...

Тренировались и выступали мы на стадионах имени Николая Гастелло, Динамо и в бассейне Нефтяник. Наши родители и мы сами всегда были связаны с главными заводами Уфы - УМЗ (УМПО) и с нефтеперабатывающими заводами Черниковки. И со всеми основными институтами Уфы: авиационным и нефтяным, БГУ и мединститутом, с пединститутом. Везде в Уфе родные места, и мои однокурсники, одноклассники, друзья детства и спорта.

В Инорсе я живу больше 11 лет на улице Мушникова, в доме №21. Это рядом с Теплым озером. Мы постоянно купаемся с семьей. Дети выросли и научились здесь плавать, а теперь завоевывают призы в плавании и борьбе.

✓ *Уңышлы булыр өсөн бәхетле булырға кәрәк, ә бәхетле булыу өсөн маҡсатлы булырға һәм уны тормошҡа ашырыу йүнәлешендә, ни тиклем ауыр булғанда ла, хис-тойғоларығыҙ икенсе яҡҡа һөйрәгәндә лә, эҙмә-эҙлекле барырға кәрәк.*



Наш Инорс, это великолепный по природе район Уфы, с чистым воздухом, с лесом, озером и речкой. Да, у нас в Инорсе есть недостатки. Да, дороги Инорса во дворах - с ямами, а больница отсутствует. Да, мы живем далеко от центра. Ехать до центра долго. Зато наш район - самый зеленый. Есть рядом озеро и речка - Уфимка, с рыбой и дикими утками. Есть в Уфимке лещь, судак и стерлядь. А за речкой у нас - сады. Мы с семьей любим наш район. Мы и живем, и отдыхаем здесь. Здесь растут наши дети. Мы хотим сделать Инорс удобным для жизни людей. А прежде всего, людям Инорса нужна большая больница-стационар. Требуется нам бассейн для детей. И кинотеатр.

Окончил я в 1978 году среднюю школу №112 в Уфе, в Черниковке, на ул. Интернациональной. А затем - Уфимский государственный авиационный институт в 1983 году. Инженер-механик. Изучал и проектировал системы управления авиационных и ракетных двигателей. Занимался наукой и преподавал почасовиком-аспирантом в УГАИ с 1980 по 1990 годы.

После распада СССР, работал на Севере слесарем-ремонтником 5 разряда в "ЮГАНСКНЕФТЕГАЗ", г. Пыть-Ях, Нефтеюганск. Последние 12 лет работаю в Уфе ведущим инженером в большой (400 человек) проектной фирме "Уралтрубопроводстройпроект". Мы проектируем жилые дома, школы, детские сады, стадионы, газопроводы и нефтепроводы, компрессорные и тепловые станции в Уфе, в РБ и по России.

Более тридцати лет я занимался любительским спортом, волейболом, гимнастикой. Более 20 лет играл на первенство РБ и Уфы. В основном за сборные БГУ и УГАИ. Успешно, три года тренировал студенческую сборную УГАИ. Победили мы всех, кроме мастеров! Стал я в 36 лет чемпионом Уфы по пляжному волейболу среди любителей. Уступили мы только двум мастерским парам.

Последние пять лет много пишу в интернете об Уфе и Башкортостане. Всю работу в интернете - все статьи и видеоролики делаю бесплатно и за свой счет, как в помощь людям и гражданскому обществу Уфы и Башкортостана. Удалось мне через интернет помочь с ремонтом Центру инвалидов на ул. Баландина, с ремонтом теплотрассы на Сельско-Богородской. Сделать в нашем доме козырьки над входами в подъезды. Закрыли десятки открытых люков в Инорсе. Огородили трансформаторные. Добился организации пешеходных переходов на ул. Баландина. Воюем мы с ямами и лужами во дворах и на дорогах Инорса и Уфы. На сайте "Уфимский Журнал" есть более 100 моих статей о нашем обществе, о проблемах, и о путях их решения. Много пишу и снимаю видео о проблемах именно Инорса.

Я лично и партия "Яблоко" требовали 25 января 2015 г. в Курултае РБ не принимать закон о сборе денег на ремонт (чужих нам) многоквартирных домов, а собирать деньги на свои спецсчета, для своих домов. Я предлагал в Курултае РБ отменить эвакуаторы в Уфе, заменив их штрафами по 500 рублей, просто делая фото машины нарушителя с отметкой времени и места.

Поддерживал моими публикациями экологов РБ, например, движение "Антикроношпан". Снимал видео, фоторепортажи и написал десяток статей. Снимал и писал о порубках леса в Инорсе под застройку жилыми домами. Хотя жилье - основа основ для жизни. Сделал сам и бесплатно пять больших документальных любительских фильмов о нашем гражданском обществе, о власти и выборах в РБ. Снимаю о жизни в Уфе и на селе Башкортостана. Фильмы мои о главном для меня - об удивительных людях, живущих и работающих с лошадьми. Много я снимал о моих друзьях - великих тренерах самбо из Кстово и Нижнего Новгорода Михаиле Бурдикове и Владимире Волосове. Всего снято более 450 видеороликов. Сделал свой видеоканал, и канал партии "Яблоко" в РБ (вместе с Е. В. Пучинским). Есть у меня свой сайт в Живом Журнале и Фейсбуке. Статьями и видео я стараюсь сделать нашу жизнь лучше, рассказать о проблемах и путях их решения.

С далекого 1991 года я поддерживаю партию "Яблоко" и политика Григория Алексеевича Явлинского. А с 2014 года являюсь заместителем Председателя регионального отделения партии "ЯБЛОКО" в Башкортостане. Стоит отметить, это совершенно бесплатная работа по развитию демократии в Уфе и Башкортостане. Хотя мне, и не только мне, видятся определенные успехи "Яблока" в РБ. В том числе - наше участие в выборах в горсовет Уфы. Я искренне верю в возможность построения демократии, достижения справедливости и свободы и в России, и в Башкортостане. Более того, я уверен - у нас нет другого пути к построению достойной жизни для народа.

Мечтаю вместе с вами, жителями Инорса, добиться от власти РБ и Уфы строительства комплексной больницы. Такой, как больницы №21 или №6 Уфы, и бассейна. В Инорсе нас почти 100 тысяч жителей. Мы работаем на всех основных заводах и предприятиях Уфы. Мы платим налоги, поэтому имеем право на свою больницу. Нужна больница, детская и взрослая, с терапией и хирургией, с травмпунктом и реанимацией, с родильным отделением. Бассейн тоже позволит резко сократить несчастные случаи на воде с детьми и взрослыми. Позволит тренироваться детям и отдыхать семьям. Необходим Инорсу и парк отдыха, и солидный кинотеатр. В Инорсе мало кафе и ресторанов. Сравните вечерний Инорс с жизнью в центре Уфы. Проигрываем? Зато у нас торгуют магазины во дворах пивом круглосуточно, а вокруг них постоянные конфликты и это мешает людям отдыхать. Наверное, после 22.00 торговать пивом во дворах домов не стоит. Очень важно нам самим навести порядок в работе ЖКХ, в том числе с ремонтом многоквартирных домов. Люди сегодня существенно переплачивают за некачественные и не получаемые услуги ЖКХ. А деньги наши далеко не все доходят до ресурсоснабжающих организаций. Дороги во всех дворах Инорса необходимо привести в порядок, заделав все ямы. Я писал об этом неоднократно в различные инстанции, в мэрию Уфы, в администрацию Калининского района. Однако пока не удается добиться результатов. Идут в ответ обещания и отписки.

Депутат горсовета должен добиваться, чтобы из бюджетов Уфы и РБ на нужды Инорса выделялись и эффективно, подконтрольно использовались достаточные средства. Именно для решения этих вопросов я иду в депутаты горсовета Уфы. Уважаемые жители, подсказывайте, и мы будем вместе с вами налаживать удобную для вас жизнь в Инорсе. Уважаемые избиратели Инорса! Я призываю вас активно участвовать в выборах. Изучайте биографии кандидатов в депутаты. Выбирайте в депутаты тех людей, кто вам понравится, по делам их и по честности их деклараций. У некоторых кандидатов доходы солидные, но "нет ни квартир, ни машин"...

Жизнь справедлива. Кого вы сами выберите депутатом на выборах в горсовет Уфы, тот человек и будет помогать нам обустраивать наш родной район Инорс.

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва Золотареву Виктору Семеновичу согласно ст. 65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N 380-з "О выборах".

*УҢЫШ ҠАҘАН*

# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Имен тормош фәлсәфәһе

### Ни өсөн эҙмә-эҙлекле булырға кәрәк?

Килешеүгә барыу һәм принциптарығыҙҙан ситләшеүҙәр - күпселектең уңышһыҙлыҡҡа батыуының һәм тормош юлында аҙашып ҡалыуының төп сәбәбе, сөнки бары тик аныҡ принциптар ғына хәҙерге замандың баҫымына һөҙөмтәле ҡаршы тора ала. Һеҙҙең принциптарығыҙ - тормошоғоҙҙа барған барлыҡ ваҡиғаларҙа, хәл-торошта үҙегеҙҙе нисек тотоуығыҙҙы баһалаусы рухи барометр ул. Күпселек осраҡта кем менәндер килешеү хаҡына принциптарығыҙҙан ситләшәһегеҙ икән, көнүҙәк мәсьәләне ҙур ауырлыҡ тыуҙырып хәл итәһегеҙ һәм был киләсәктә ҙур проблемаларға килтерәсәк. Шул уҡ ваҡытта быныдай эҙмә-эҙлекһеҙ тәртип һеҙҙең ысын ҡиммәттәрегеҙҙе һәм принциптарығыҙҙы асырға ярҙам итә лә инде. Нисек кенә булмаһын, һүҙҙәрегеҙ эшегеҙҙән айырыла (был үҙегеҙ теләгән тип күрһәткән һәм ғәмәлдә үҙегеҙ теләгән нәмә араһында низағ тыуҙыра).

Үҙәк Европала туранан-тура сауҙа буйынса агентлыҡ асҡас, хеҙмәттәшлек итергә теләп миңә иң беренсе тәмәке етештереү компанияһы мөрәжәғәт итте. Ғәмәлдә ул берҙән-бер клиентыбыҙ булды һәм уның тәҡдименә ризалашыу еңелерәк ине, сөнки офоҡта башҡа бер генә клиент та күренмәне. Әммә мин бер генә секундҡа ла быныдай аҙымды яһамаясағымда шикләнмәнем дә. Күп миллионлы гонорар вәғәҙә итһәләр ҙә, тәмәке тартыуҙы рекламалаусы компаниялар менән хеҙмәттәшлек итмәҫ инем!

Иҫегеҙҙә булһа, уңыштың тормошоғоҙға бары тик вакуумды тултырыу өсөн килгәнен әйткәйнем инде. Был осраҡта мин, тәмәке компанияһы менән хеҙмәттәшлектән баш тартып, башҡа тәҡдимдәргә урынды асыҡ ҡалдырҙым. Бары тик ул минең принциптарыма тап килмәй ине: агентлыҡҡа уңыш килһен өсөн генә сигареттар һатҡансы, ер ҡаҙыуҙы һайлар инем. Сөнки бизнестағы философиям мохтаж булғандарҙың барыһына ла юғары именлек килтереүсе ыңғай ҡиммәттәр булдырыуҙы күҙаллай. Кемдер, принциптарға тоғро булырға кәрәк, тиһә, күпселек был кешене тиҫкәре, аҡылһыҙ, идеалист йәки "мамонт" тип атар һәм кешенән килешә белеүҙе, һығылмалылыҡты, әхлаҡи нормаларҙы киңәйтеүҙе талап иткән замандың ауырлығы тураһында үҙенең яратҡан дәлилен килтерә башлар ине. Мин принциптарҙы һаҡлауҙа бөтөнлөк ҡағиҙәһен һайлайым. Уны үҙегеҙгә ҡарата ла ҡулланып ҡарағыҙ:

- Бәхетле булыу өсөн маҡсат кәрәк.
- Маҡсатлы булыу өсөн шәхси сифаттарың булырға тейеш.
- Ҡиммәттәрегеҙ был тормоштағы философияғыҙҙы барлыҡҡа килтерә.
- Философияғыҙ уға ярҙам итеп торған принциптарығыҙға ярашлы йәшәгәндә генә тормошҡа аша.

Тап аҡылыбыҙҙың принциптар булдырыу һәләте ауырлыҡтар менән көрәшеү мөмкинлеген бирә; бәхетле, мәғәнәле һәм әһәмиәтле итеп йәшәргә теләү интеллектығыҙҙы һәм айыҡ аҡылығыҙҙы - ә хис-тойғоларығыҙҙы түгел - тормош принциптарын формалаштырыуға йәлеп итеүҙе аңлата.

Уңышлы булыр өсөн бәхетле булырға кәрәк, ә бәхетле булыу өсөн, тәү сиратта, маҡсатлы булырға, аныҡ күҙалларға һәм уны тормошҡа ашырыу йүнәлешендә, ни тиклем ауыр булғанда ла, йомғаттә яҡлау тапмағанда ла, хис-тойғоларығыҙ икенсе яҡҡа һөйрәгәндә лә, эҙмә-эҙлекле барырға кәрәк.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# РИЗЫҒЫҢ ДАУА БУЛҺЫН

**Һуңғы ваҡытта табиптар, ваҡытында тикшерелеп торғанда, яман шеште иртә асыҡлап, уны дауалап була, тиһәләр ҙә, был сир сафтарҙы һаман да ҡырыуын дауам итә. Уның төрҙәре лә, билдәләре лә төрлөсә һәм ҡайһы берҙә бер нисә ай эсендә кеше яҡты донъя менән хушлашып та ҡуя. Бөгөн, гәзит уҡыусыларҙы иҫкәртеү маҡсатында, онкологтарҙың кәңәштәрен тәҡдим итәбеҙ.**

● Йылына бер тапҡыр квалификациялы медицина тикшереүе алыу өсөн табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

● Һимереүҙән ҡасығыҙ, даими рәүештә, исмаһам, аҙнаһына 3-4 тапҡыр 30 минут булһа ла гимнастика менән шөғөлләнегеҙ.

● Тәмәке тартмағыҙ! Тәмәке тартыу яман шеш менән сирләү хәүефен 40-45 процентҡа арттыра.

● Һыуҙы фильтр аша таҙартып эсегеҙ.

● Дарыуҙарҙы табип тәғәйенләүенән һәм күҙәтеүенән башҡа эсмәгеҙ.

● Стресс менән көрәшергә өйрәнегеҙ. Нервылар системаһының хроник көсөргәнеше организмдың һаҡланыу һәләтлеген кәметеүен иҫегеҙҙән сығармағыҙ.

● Нурланыу сығанаҡтарынан мөмкин тиклем алыҫыраҡ булырға тырышығыҙ һәм улар эргәһендә булыу ваҡытын кәметегеҙ. Өйөгөҙҙә электр проводкаһын көплөтеп үткәрегеҙ.

● Үпкә рагын иҫкәртеү өсөн тәмәке тартыуҙы ташлағыҙ, бинаны даими рәүештә елләтеп тороғоҙ. Үпкә ялҡынһыныуы ауырыуҙары буйынса ваҡытында дауаланығыҙ. Химик матдәләр менән эшләгәндә тын юлдарын һаҡлау сараларын файҙаланығыҙ. Йыл һайын флюорография үтергә онотмағыҙ.

● Тире яман шешен профилактикалау өсөн ҡояшта оҙаҡ булмағыҙ, ультрафиолет нурҙарын тотҡарлаусы ҡояштан һаҡлаусы күҙлек кейегеҙ. Яғыулыҡ-майлау материалдары һәм башҡа канцероген матдәләр менән эшләгәндә һаҡлыҡ саралары күрегеҙ. Тәнегеҙҙәге тыумыштан булған таптарға зыян килтермәгеҙ һәм уларҙы үҙаллы бөтөрөргә тырышмағыҙ.

● Ашҡаҙан яман шешен иҫкәртеү өсөн аҙыҡты даими ҡабул итергә, артыҡ ҡыҙҙырылған һәм консервацияланған аҙыҡ-түлек ашауҙы сикләргә кәрәк. Көн һайын рационығыҙҙа йәшелсә, емеш-еләк булырға тейеш. Аҙыҡ-түлек эҫе һәм тоҙло булмаһын. Нәҫелдә шундай сир һәм ашҡаҙандың хроник ауырыуы булғанда йылына бер тапҡыр эндоскопия (фиброгастроскопия) үтергә онотмағыҙ.

● Йыуан эсәк яман шешен профилактикалау өсөн сүсле аҙыҡ-түлекте күберәк ашарға, мал майҙарын ҡулланыуҙы сикләргә, хроник эс ҡатыулауын иҫкәртергә һәм дауаларға кәрәк.

● Күкрәк биҙе яман шешен булдырмау өсөн ҡатын-ҡыҙ 25 йәшкә тиклем кейәүгә сығырға тырышырға тейеш. Бала тыуғас, уны бер йәшкә тиклем имеҙеү яҡшы. Гинекологик сирҙәрҙе лә ваҡытында дауалау зарур. Ай һайын үҙегеҙ күкрәк биҙҙәрен тикшереп тороғоҙ. Майлы ризыҡ ашауҙы 20 процентҡа кәметегеҙ, артыҡ ашамаҫҡа тырышығыҙ, күберәк күҙәнәкле, яңы еләк-емеш, тупаҫ ондан бешерелгән икмәк ашағыҙ.

● Предстата биҙе яман шешен иҫкәртеү өсөн енси тормош гигиенаһын һаҡлағыҙ, простатаның хроник ауырыуҙарын дауалағыҙ, өшөүҙән һаҡланығыҙ һәм даими физик күнегеүҙәр эшләгеҙ.

**(Дауамы 15-се биттә).**

*КАНДИДАТ В ДЕПУТАТЫ*

## ИВАНОВ ДМИТРИЙ ВЛАДИМИРОВИЧ

**кандидат в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва по одномандатному избирательному округу №2**




## ГОЛОСУЙТЕ ЗА КАНДИДАТОВ ОТ ✓ ЛДПР!

### ПРЕДВЫБОРНАЯ ПРОГРАММА БАШКОРТОСТАНСКОГО РЕГИОНАЛЬНОГО ОТДЕЛЕНИЯ ЛДПР

**ЛДПР представляет свою программу, положения которой отвечают интересам всех жителей Башкортостана. Только ЛДПР сегодня знает, что нужно сделать сегодня в первую очередь, чтобы республика превратилась в самый сильный и процветающий регион России.**

1. Борьба с коррупцией;

2. Привлечение инвестиций в республику. Максимальная поддержка предпринимателей;
3. Глобальная поддержка сельского хозяйства в рамках обеспечения продовольственной безопасности страны;

4. Улучшение экологической обстановки в республике;

5. Возрождение традиционных морально – духовных ценностей;

6. Восстановить систему организации досуга детей и подростков в кружках и секциях на бесплатной основе, обеспечив ей поддержку на республиканском уровне;

7. Обеспечить контроль цен на лекарства, реализуемые в аптечных сетях на подконтрольной территории и их качество;

8. Особое внимание при рассмотрении республиканского бюджета уделять финансированию социальных программ. Направить дополнительные средства республиканского бюджета на поддержку социально незащищенных слоев населения;

9. Установить порядок, обязывающий депутатов всех уровней ежегодно персонально отчитываться перед избирателем о проделанной работе. Отчеты размещать в СМИ;

10. Списать долги регионам! Выйти с законодательной инициативой в Государственную Думу Федерального Собрания РФ с целью пересмотра системы финансовых отношений между регионами и федеральным центром: не менее 70% доходов должно оставаться в регионе. Данная мера позволит повысить ответственность региональных властей за принимаемые решения, даст толчок развитию регионов и позволит в полном объеме исполнять все региональные социальные программы.

✓ *Емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе ентекләп йыуығыҙ, әрсегеҙ йәки өҫкө япраҡтарын өҙөп ташлағыҙ - тап уларҙа зыянлы матдәләр туплана. Ризыҡ әҙерләгәндә уны быҡтырыуға, бешереүгә өҫтөнлөк бирегеҙ.*



# ЛДПР

## ЗАСТАВИМ ВЛАСТЬ РАБОТАТЬ!

### В ПРЕДДВЕРИИ ВЫБОРОВ 2015 ГОДА, ПРЕДСЕДАТЕЛЬ ЛДПР **ВЛАДИМИР ВОЛЬФОВИЧ ЖИРИНОВСКИЙ** РАССКАЗАЛ О ТОМ, КАКОЙ ВИДИТСЯ ЕМУ НАША РЕСПУБЛИКА СЕГОДНЯ И О РОЛИ ЛДПР В ЕЕ ОБЩЕСТВЕННО-ПОЛИТИЧЕСКОЙ ЖИЗНИ

Я очень хорошо знаю Башкортостан: бывал там не раз. И отношусь с самым большим уважением к башкирам, к татарам, к русским, ко всем, кто проживает в Башкортостане и к новому руководству Башкортостана. До недавнего времени были определенные негативные моменты в отношении к ЛДПР, искаженно были восприняты некоторые мои слова и суждения.

Но никогда в жизни я не говорил что-либо отрицательное, связанное с историей и жизнью башкир. Эти недоразумения, конечно же, были улажены, и постепенно отношения улучшились. Сегодня, когда руководство Башкортостана призывает к диалогу все политические силы, ЛДПР будет занимать достойное место среди тех политических сил, которые желают расцвета и стабильности в развитии Башкортостана. Потенциал республики огромный, народ трудолюбивый, поэтому будем надеяться, что и в дальнейшем у республики будут большие успехи, и она достигнет максимума возможного в развитии экономики и социальных вопросов.

Наша организация в Башкортостане является региональным отделением. Как и по всей стране, наши активисты проводят политическую работу и различные мероприятия. Есть конкретные проекты - "Заставим власть работать", "Коррупции-НЕТ", "Интерактивные приемные". "Общественное мнение", "Вставай, республика родная!", "Доброе сердце", возрождение детского массового спорта, "Аллея любви".

Мы стараемся в каждом районе открыть приемные, чтобы люди могли обратиться за помощью в отстаивании своих прав и законных интересов.

Мы чувствуем, что есть уже поддержка каких-то идей, и в целом ЛДПР, в республике. Это видно по итогам прошедших выборов: теперь есть депутат от Башкортостана в Государственной Думе - Иван Сухарев, есть депутаты от ЛДПР в Государственном Собрании - Курултай, в Советах муниципальных районов и городов республики.

Все это свидетельствует об укреплении позиции партии в регионе. И мы будем рады тому, чтобы в Башкортостане все было хорошо, чтобы все дружно жили, чтобы все политические партии чувствовали себя спокойно, чтобы не было никаких эксцессов, чтобы была нормальная деловая спокойная политическая обстановка.

Я уверен, что по итогам этих выборов во всех Советах сельских поселений, в которых примут участие кандидаты от ЛДПР, появятся наши депутаты, которые будут отстаивать интересы всех, без исключения, граждан! Мы заставим власть работать!

Голосуйте за ЛДПР, и мы вместе изменим жизнь к лучшему! За сильную Россию! За сильный Башкортостан! Только ЛДПР!

**В.В. Жириновский.**

Бесплатная площадь предоставлена кандидату в депутаты Совета городского округа г. Уфа Республики Башкортостан третьего созыва Иванову Дмитрию Владимировичу согласно ст.65 Кодекса Республики Башкортостан от 6 декабря 2006 г. N 380-з "О выборах".

*СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ*

# РИЗЫҒЫҢ ДАУА БУЛҺЫН

**(Башы 14-се биттә).**

**Профилактик туҡланыуҙың төп принциптары шулар:**

● Үҙегеҙ үҫтергән йәки ошо ерлектә үҫтерелгән таҙа аҙыҡ-түлек ашағыҙ. Ризыҡ һатып алғанда уның составына, бигерәк тә консерванттарға иғтибар итегеҙ. Е-103, 105, 111, 121, 123, 125, 126, 130, 152, 952 билдәләре һуғылған аҙыҡ-түлек ҡулланыуҙан тыйылған. Е-103, 105, 121, 123, 125, 126, 130, 131, 142, 152, 210-219, 230, 240, 249, 252, 280-283, 330, 477, 954 билдәләләрен оҙаҡ ваҡыт ҡулланыу шеш барлыҡҡа килтереүе мөмкин.

● Емеш-еләкте, йәшелсәләрҙе ентекләп йыуығыҙ, әрсегеҙ йәки өҫкө япраҡтарын өҙөп ташлағыҙ - тап уларҙа пестицидтар, диоксин һәм башҡа зыянлы матдәләр туплана. Ризыҡ әҙерләгәндә уны быҡтырыуға, бешереүгә өҫтөнлөк бирегеҙ. Ризыҡты асыҡ утта бешермәгеҙ.

● Кәүҙә ауырлығына иғтибар бирегеҙ, артығын ашамағыҙ. Аҙыҡ-түлектең калорияһы организмдың энергия сарыф итеүенән артып китергә тейеш түгел. Аҙнаһына бер тапҡыр ашауҙы кәметеү көнө үткәрегеҙ.

● Аҙыҡты ашыҡмай, яйлап сәйнәгеҙ.

● Эҫе аҙыҡтан һәм эсемлектәрҙән баш тартығыҙ. Ризыҡтарҙың температураһы мөхит температураһына яҡын булырға тейеш.

● Май ҡулланыуҙы 20 процентҡаса кәметеп, үҫемлек майҙарына өҫтөнлөк бирегеҙ.

● Холестеринға бай аҙыҡ-түлек: йомортҡа һарыһы, мал мейеһе, ыуылдырыҡ, һимеҙ ит йә балыҡ, майлы һурпа ҡулланыуҙы кәметегеҙ.

● Үҙләштереү өсөн яҡшы аҡһым һимеҙ булмаған иттә, балыҡта, ярма һәм ҡуҙаҡлыларҙа бар - рационығыҙға шуларҙы индерегеҙ.

● Ризыҡ витаминдарға һәм микроэлементтарға бай булырға тейеш. Бындай аҙыҡ-түлек - бигерәк тә ҡыҙыл төҫтәге емеш-еләк, йәшелсә, диңгеҙ продукттары.

● Мотлаҡ кальций күләме күп булған ризыҡ ашағыҙ. Улар әсегән һөт продукттары, сырҙар, эремсек, кукуруз, кәбеҫтә, сөгөлдөр, хөрмә.

● Сүсле (ярҙыртылмаған ярма, көрпә, ҡуҙаҡлылар, емеш-еләк, йәшелсә) продукттарҙы күберәк ҡулланығыҙ. Ыҫланған, тоҙланған, нитраттар менән эшкәртелгән ризыҡтарҙы ҡулланыуҙы минимумға тиклем кәметегеҙ. Өй шарттарында тоҙ ҡулланыуҙы тәүлегенә 4 грамға тиклем кәметегеҙ. Шәкәр ашауҙы сикләгеҙ, тәм-том, кәнфиттәр менән мауыҡмағыҙ.

**Ошондай билдәләр:**

- Бер сәбәпһеҙ тән ауырлығығыҙ кәмеһә, арыһағыҙ, талсыҡһағыҙ, температурағыҙ күтәрелһә, аҙ ҡанлылыҡ күҙәтелһә;
- Оҙайлы йүтәл ҡаҡшатып, еңеллек килмәһә, ҡаҡырыҡта ҡан таптары күренһә;
- Ауыҙ ҡыуышлығында, ирендәрҙә, телдә сей яра йәки ауыртмаған шештәр барлыҡҡа килһә;
- Тәндә төйөндәр, оҙаҡ ваҡыт уңалмаған сей яра барлыҡҡа килһә, тире ярылһа;
- Тыумыштын булған таптарҙың күләме ҙурайһа йәки ҡанһырап торһа;
- Күкрәк биҙендә, ҡултыҡ аҫтында, умрау һөйәге аҫтында төйөндәр барлыҡҡа килһә; күкрәк биҙенең формаһы үҙгәрһә; түштән ҡанлы бүлендек сыҡһа, уңалмаҫ сей яра булһа;
- Ризыҡтың үтеүе ауырлашһа, күкрәк янһа, аппетит түбәнәйһә, күңел болғанһа;
- Эс көтөрләһә һәм ауыртһа, тура эсәктә ауыртыу булһа;
- Оло яраууҙа ҡан һәм лайла булһа;
- Йыш бәүел килһә, уның төҫө үҙгәрһә;
- Сатта ауыртыу тойолһа, енси ағзалар ҡысытһа һәм унан бүлендектр килһә, эстең аҫҡы өлөшөндә шеш булһа, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙҙың климакс ваҡытында туҡтамай ҡан аҡһа - һис кисекмәҫтән табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

**Табипҡа ваҡытында мөрәжәғәт итеүҙең һаулыҡ нигеҙе булыуы хаҡында иҫегеҙҙән сығармағыҙ!**

СӘНҒӘТ , МӘҘӘНИӘТ...

# ЯҢЫ СПЕКТАКЛДӘР КӨТӘБЕҘ

**М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында Мәскәү драматургы һәм сценарисы Олжас Жанайдаровтың әҫәре буйынса "Йот" тигән драма өҫтөндә эш башланды. Ваҡиғалар Ҡаҙағстанда, үткән быуаттың 30-сы йылдары башында булған һәм "Бөйөк Йот" тигән исем алған ҡот оскос аслыҡ мәлендә бара. Тарихсылар баһаһы буйынса, ҡаҙаҡ халҡының яртыһы көсләп коллективлаштырыу һәм малдарҙы конфискациялау ҡорбаны була.**

Спектаклдең режиссеры Айрат Абушахманов әйтеүенсә, документаль драмала бер юлы ике ваҡиға бара. Береһендә, бөгөнгө Мәскәүҙә рус ҡыҙы, корреспондент Елена һәм ҡаҙаҡ егете Ербол араһындағы мөнәсәбәт, икенсеһе Ҡаҙағстанда 30-сы йылдарҙа барған хәлдәр һүрәтләнә. Ҙур сәхнәлә барасаҡ драмала биш актер ҡатнаша, премьера октябрҙа планлаштырылған.

"Документаль драма жанры фактарҙы ҡоро, ҡаты итеп һүрәтләүҙе талап итә, - ти Айрат Абушахманов. - Тема ҡурҡыныс, пьеса иһә бик үҙенсәлекле. Төп идея - былдай фажиғәләрҙе оноторға ярамай, юғиһә, уларҙың ҡабатланыуы ихтимал. Башҡортостанда ла, был турала асыҡтан-асыҡ һөйләп бармаһалар ҙа, ҡот оскос аслыҡ булған". "Йот" пьесаһы "Действующие лица - 2013" Бөтөн Рәсәй драматургик конкурсында - беренсе, "Свободный театр - 2013" Халыҡ-ара заманса драматургия конкурсының "Пьеса" номинацияһында өсөнсө урын алған. 2014 йылда драма "Золотая маска" фестивале сиктәрендә "Новая пьеса" конкурсының ҡыҫҡа исемлегенә индерелгән.

Башҡорт театрында тиҙҙән яңы мюзикл да ҡуйыласаҡ. Ул "Йософ һәм Зөләйха" тип атала. Мюзиклдың режиссер-ҡуйыусыһы Олег Ханов. Әҫәрҙең нигеҙендә Көнсығыш халыҡтарының күптәрендә булған әҙәби-фольклор мираҫ ята. Драматургик материал татар яҙыусыһы һәм драматургы Юныс Сафиуллин тарафынан тәҡдим ителә. Спектаклгә 2 млн һум күләмендә Республика Башлығы гранты бүленгән. Премьера декабрь айына, театрҙың 69-сы тыуған көнөнә бағышланасаҡ.

# МУЗЕЙ КОМПЛЕКСЫ ТӨҘӨЛӘСӘК



**"Боронғо Өфө" Республика тарихи-мәҙәни музей-заповеднигы архитекторҙар араһында асыҡ һауалағы иң яҡшы музей комплексы өсөн бәйге иғлан итте. Башҡортостан архитектура сәнғәте музейы Сәғит Агиш урамы һәм Салауат Юлаев проспекты араһында урынлашасаҡ.**

БР Мәҙәниәт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, буласаҡ музей Өфө ҡалаһының үҙенсәлекле тарихи һәм мәҙәни мөйөшөнә әйләнеп, туристарҙы үҙенә йәлеп итергә, ҡала халҡының ял итеү урынына әүерелергә тейеш. Асыҡ һауалағы музей комплексы урман-парк зонаһын ҡулланып, төрлө саралар ойошторорға булышлыҡ итәсәк.

Был бәйгелә ҡатнашырға теләүселәр буласаҡ музей комплексының архитектура-план сиселешен тәҡдим итә, шулай уҡ 19-20-се быуаттарҙағы тергеҙелгән мәҙәни мираҫ һәйкәлдәрен урынлаштырыу урындарын иҫәпкә алып, комплекстың майҙансыҡтары структураһын проектлай, музей территорияһын матурлау һәм биҙәү проектын эшләргә тейеш. Конкурстың еңеүсеһе 99 мең һум күләмендәге премия ала. Ҡатнашыу өсөн ғаризалар 21 августан 16 сентябргә тиклем дауам итә, һөҙөмтәләр 25 ноябрь билдәле була. Конкурстың программаһы һәм шарттары РИКМЗ "Древняя Уфа" йәки БР Мәҙәниәт министрлығының рәсми сайтына ҡуйылған. Мәғлүмәт өсөн телефон: 272-77-43.

# ҠЫТАЙҘА ЛА ҺЫНАТМАЙҘАР



**Ҡытайҙа "Азияның супер моделе - 2015" реалити-шоуын төшөрәләр. Унда башҡорт моделдәре лә ҡатнаша.**

Ҡытайҙың көньяҡ провинцияһы - Гуансиҙа икенсе аҙна инде башҡорт делегацияһы ла ҡатнашҡан реалити-шоу төшөрөлә. Беҙҙең республиканы конкурста "Һылыуҡай-Bashkirian Beauty" студияһы моделе Диана Зөбәйерова, "Агиҙел" халыҡ бейеүҙәре ансамбле солисы Тимур Сәхәүетдинов һәм режиссер, студия директоры, "Азияның супер моделе - 2015" конкурсы баһалама ағзаһы Линара Таһирова күрһәтә. Башҡорт моделдәре менән бергә Монголиянан, Һиндостандан, Ҡытайҙан, Малайзиянан, Таиландтан, Кореянан, Яңы Зеландиянан, Япониянан, Рәсәйҙән (Хабаровск ҡалаһы) ҡатнашыусылар бар. Башҡортостан Республикаһы айырым төбәк булараҡ тәҡдим ителгән.

Проект реалити-шок форматында бара, ул өс айҙан һуң Ҡытай телевидениеһында күрһәтелә башлаясаҡ. Шуға ла төшөрөү режимы физик йәһәттән дә, эмоциональ яҡтан да ҡатмарлы, моделдәргә тәүлегенә 12-14 сәғәт эшләргә тура килә. Әле тауҙарҙағы сәй плантацияһында, кунг-фу остаһы мәктәбендә, боронғо ҡытай кварталдарында сюжеттар төшөрөлгән. "Ҡатнашыусыларға үрелгән ҡытай кәрзине менән йылғала балыҡ тотоу үҙенсәлекле һынау булды. Ә кисен ресторанда тотолған балыҡты әҙерләнек. Был ҡыҙыҡ та, ауыр ҙа булды, - ти режиссер Линара Таһирова. - Иң бәхетле мәл булып беҙҙең делегацияның ҡаяға үрмәләүҙә абсолют еңеүсе булыуы. Көньяҡ Ҡытай бейеклеге ҡатнашыусылар араһынан Тимур менән Дианаға ғына бирелде!"

"Азияның супер моделе - 2015" X Халыҡ-ара ТВ-проектын август аҙағына тиклем төшөрәсәктәр һәм ул ҙур Гала-финал менән тамамланасаҡ. Конкурстың барышын "Бәйләнештә" социаль селтәрендә http://vk.com/bashkirianbeauty төркөмөндә күҙәтергә була.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Әбйәлил районының Оло Ғәбдин ауылында йәшәүсе ҡәҙерле әсәйем

**Гәмбәрә Ғәҙән ҡыҙын Шәрәфетдинованы**

күркәм юбилейы менән ихлас күңелдән ҡотлайым! Ҡәҙерләмә көслө рух, оҙон ғүмер, һаулыҡ-сәләмәтлек, бәхет, тыуыр таңдары тыныс булыуын теләйем. Тормошома йәм өҫтәп, ауырымай, ҡайғы-хәсрәт күрмәй, ейәнейәнсәрҙәр һөйөп йәшәү шатлығын бирһен Хоҙай.

*Рәхмәт, әсәй, тыуҙырғаның өсөн,*
*Аяҡ кәндәр булһын яныңда.*
*"Бисмиллаһ", тип һин шатланып уян*
*Ғүмереңдең һәр бер таңында!*
*Ныҡлы иман һәр саҡ юлдаш булһын,*
*Шатлыҡ тойол типһен йөрәгең.*
*Ауырлыҡтар һине урап үтһен,*
*Ҡабул булһын һәр бер теләгең.*
*Ерҙә ҡояш нуры балҡығандай,*
*Һин балҡыйһың минең күңелдә.*
*Тормошом тик һинең менән матур,*
*Рәхмәтлемен һиңә ғүмергә!*

**Иң изге теләктәр юллап, ҡыҙың Сәриә.**

* * *

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Салауат районы** Лағыр ауылынан Земфира Йәнтүрина, **Белорет районы** Инйәр ауылынан Әлфирә Низаметдинова, **Өфө ҡалаһынан** Зөһрә Ҡотлогилдина, Рәйсә Әсәҙуллина, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Мөнир Шәйхетдинов, **Ғафури районы** Сәйетбаба ауылынан Ғиндулла Шәйәхмәтов, **Әбйәлил районы** Хәлил ауылынан Гүзәл Ирғәлина, **Бүздәк районы** Ҡаңны-Төркәй ауылынан Мәхмүзә Шәғәлиева һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Һеҙгә яҡшы кәйеф, ҡоростай сәләмәтлек, ҙур бәхеттәр, донъяғыҙға именлек, күңелегеҙгә бөтөнлөк теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ӘШҺЕҘ КЕШЕ..

## башһыҙ ҡаҙау

Халҡы ямандың бейе аҙыр, ҡатыны ямандың өйө аҙыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ваҡыт ҡоштар тубында барыһынан да бейегерәккә осоп, болоттар өҫтөндә ни барын белергә теләгән бер Ҡош пәйҙә булған. Ул үҙ артынан башҡа ҡоштарҙы ла әйҙәгән. Барыһы ла ризалашмаған былдай ауыр һынауға: берәүҙәр ерҙә эштәре күп булыуға һылтанған, икенселәр ҡанаттары хәлһеҙ булыуын дәлил итеп килтергән. Әммә был Ҡош артынан юғарыға уҡталған ҡоштар ҙа булған. Улар йәшенле болоттарға, ҡояш көйҙөрөүенә, башҡа ауырлыҡтарға ла ҡарамай, юғарыға күтәрелгән дә күтәрелгән. Шулай улар бар болоттарҙы артта ҡалдырып, йыһан киңлегенә килеп сыҡҡан. Ләкин ҡояш яҡтыһы күҙҙәрен шул ҡәҙәре сағылдырған, күҙ алдары ҡараңғыланып, баштары әйләнеп, ҡоштар йүнәлеште юғалтҡан. Шуға ла уларҙың ҡайһы берҙәре кирегә табан уҡтай атылған һәм ергә таш һымаҡ барып төшөп, һәләк булған.**

**Ә юл башлаусы Ҡош юғарыға осоуҙы дауам иткән. Уның артынан осоусы ҡоштар ҡанаттары көйгәнен һиҙеп, шулай уҡ кирегә боролған. Әммә ҡанаттары көйөп бөтөп, ергә яланғас көйө барып төшкәндәр.**

**Ә Ҡош осҡан да осҡан. Бер саҡ уның күҙ алдында ғәжәп матур күренеш асылған. Матурлыҡ ҡына түгел, саф һауа ла әсир иткән уны. Тәьҫораттары менән уртаҡлашырға тип, артына әйләнеп ҡараһа, берәү ҙә юҡ. Шунан Ҡош ошо матурлыҡ тураһында һөйләргә тип, ергә уҡталған. Ҡояштың ҡыҙыу нурҙары аҫтында ҡанаттарын өтә-өтә осҡан ул: тиҙерәк ҡайтып етеп, ырыуҙаштарына ошондай гүзәл донъя барлығы, ҡыйыуҙарҙың унда табан осоп менә алыуы, ә билдәһеҙлек алдында ҡурҡып төшкәндәргә, үҙенең һаҙлығын өҫтөн күргәндәргә уның буй еткеһеҙ булыуы тураһында һөйләргә теләгән ерҙәге ҡоштарға. Ләкин Ҡош ергә тиклем осоп етә алмаған, уны йыртҡыс ҡоштар һауала уҡ өҙгөсләп ташлаған.**

**-Ниңә һеҙ барығыҙҙан да юғарыраҡ осорға теләгән ғәйепһеҙ ҡошто улай өҙгөсләнегеҙ?- тип һораған туп юлбашсыһы йыртҡыс ҡоштарҙан.**

**- Беҙ уның бик бейеккә осоп менгәнен беләбеҙ, уның менән бергә осҡандарҙың үле кәүҙәләре генә ҡайтҡанын да күрҙек. Беҙ Ҡоштоң үле кәүҙәһе генә осоп килә, моғайын, болоттар араһында тотҡарланғандыр, тип уйланыҡ. Йәшен болоттарына эләкһәң, ергә тере ҡайтмаясаҡһың икәнде һәр ҡош белә бит. Шуға ла беҙ уны үлелер тип уйлап өҙгөләнек. Унан һуң, ул бит беҙҙең табыш ине, - тип аңлатҡан йыртҡыс ҡоштар.**

**Улар менән барыһы ла килешкән, сөнки "унан" берәүҙең дә тере ҡайтҡаны булмағанын белгәндәр.**

**Ҡош туптарының да закондары ҡаты. Улар йыш ҡына ошо закондарҙы аша сыҡҡандарҙы өҙгөсләп ырғыта..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 28 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4717
Заказ 3941